ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

21-27 ғинуар (һыуығай)

2017

№3 (733)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Йәһүдтәр ҙә белһен, тинем...



5

Сәхрәләрҙә йәшәгәндәр хәлен...



ҡалалағы аңлар хәлдәме? 8-9

Яҙыусы ғына түгел...



тәңкитсе лә матурлыкты аңлай белергә өйрәтә 11

Ике иңебеҙҙә...

ике фәрештә



13

Сканворд 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Йәнәшәгеҙҙә, таныштарығыҙ араһында 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылмай ҡалғандар булһа, сәләмебеҙҙе тапшырығыҙ, зинһар: хәҙер иһә гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлау өсөн 18 февралгә тиклем яҙылырға кәрәк. 50665 индекслы гәзитебеҙ дүрт айға 326 һум 26 тин генә торасаҡ. Гәзиткә яҙылып та, әле уның бер һанын да ҡулығыҙға алмаһағыҙ, почтағыҙға мөрәжәғәт итегеҙ, редакцияға ла шылтыратып ебәрегеҙ (246-03-23).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Енәйәт кодексы 116-сы "Туҡмауҙар" статьяһының яңы редакцияһы буйынса балаһына ҡул күтәргән ата-әсә енәйәтсе булып сыға, имеш. Был турала һеҙҙең фекерегеҙ?

***Гүзәл ХАРРАСОВА, Башҡортостан адвокаттар коллегияһы адвокаты:*** Былтыр 116-сы статьяға "ювеналь юстиция" вәкәләттәрен файҙаланыу мөмкинлеге биргән төҙәтмә өҫтәлгәйне. Нимәне аңлата һуң был? Ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, хәҙер был закон буйынса хатта тәрбиәүи маҡсаттарҙа ла ата-әсәгә балаларын "сәпәп" алыу тыйыла. Йәғни балаһына ҡул күтәргән өсөн ата-әсә кәмендә бер нисә йылға рәшәткә артына эләгеүе бик ихтимал. Был Көнбайыш өлгөләренә эйәрергә маташыуҙың сираттағы бер миҫалы. Әлбиттә, беҙҙең менталитетҡа төҫ булмаған бындай законды ҡабул итеүгә тәүҙән үк ҡаршылар бик күп булды. Дини йәмәғәтселек белдереүенсә, бындай мөнәсәбәттәрҙе булдырыу ғаилә ҡиммәттәрен ҡаҡшатыуға килтерәсәк. Бөтә Рәсәй Ата-әсәләр йыйылышы ла енәйәт законына индерелгән был өҫтәмәне таныуҙан ҡырҡа баш тарта. Закон ҡабул ителһә лә, күптәр ризаһыҙлыҡ белдереүҙән туҡтамай һәм мәсьәләне ҡайтанан ҡарауҙы талап итәләр.

Был закон минең дә күңелгә ятмай. Беренсенән, закон алдында барыһы ла тигеҙ, тибеҙ, ә был осраҡта тап киреһе килеп сыға ла. Мәҫәлән, балаһын һуҡҡылап алған өсөн ата-әсә енәйәт яуаплылығына тартыла, ә шул уҡ нәмәне эшләгән осраҡлы кеше, әйтәйек, күршелә йәшәгән кешегә бер ни ҙә булмаясаҡ. Булған хәлдә лә ул ни бары административ яуапҡа тарттырылыуы ғына ихтимал. Бында кеше айырып ҡарау - дискриминация - күҙәләнеше күҙ алдына баҫа. Икенсенән, бала менән ата-әсәне ҡапма-ҡаршы ҡуйыуҙы ла аҡыл ҡабул итмәй. Йәмәғәтселек ҡыҫымына алынып, киләсәктә был закон ҡайтанан ҡаралыр, моғайын, тип уйлайым.

***Әлфир ҒАЙСИН, Өфөнөң художество-гуманитар колледж директоры:*** Беҙҙең Рәсәй юридик системаһы ярайһы көслө иҫәпләнә. Йыл һайын уның абруйы арта барыуын да билдәләмәй булмай. Беҙҙәге закондар системаһы бөтә өлкәне лә үҙ ҡоласына алырға һәм бөтә ҡатламдарҙың да мәнфәғәтен күҙәтергә ынтыла. Әлеге һүҙ алып барылған ювеналь закон тигәне лә ана шул маҡсаттан сығып ҡабул ителгәндер, тип уйларға нигеҙ бар. Был аңлашыла ла, сөнки балалар - яҡлауға иң мохтаж ҡатлам. Ысынлап та, әгәр баланы ниндәйҙер сәбәптән, әйтәйек, атаһы ҡайыш менән тотоп ярҙы, ти. Иртәгәһенә был хаҡта бала дуҫына сер итеп кенә әйтһә лә, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа таралып, "сер" уҡытыусыға килеп ишетелеүе бик ихтимал. Мәктәп етәкселеге үҙ сиратында был хаҡта полицияға хәбәр итергә тейеш булып сыға. Бындай закон ҡабул ителмәҫ борон уҡ булған шундай бер хәл тураһында һөйләгәйнеләр, иҫкә килеп төштө шул. "2"-ле алған, насар уҡыған баланы атаһы баяғыса ҡайыш менән һыҙыра. Мәктәптә берәү был хаҡта прокуратураға яҙып бирергә кәңәш итә. Бала күп уйлап тормай, шулай эшләй ҙә. Һөҙөмтәлә атаһына 84 мең һум күләмендә штраф һалына. Ошо хәлдән һуң атаһы улына ҡул ғына һелтәй: минә тимәһә, суҡынып кит, тигәндәй. Шунан үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ инде: ата-әсә контроленән ысҡынған был баланан киләсәктә кем сығасаҡ? Дөрөҫөн әйткәндә, кәрәкмәй беҙгә ул закон, беҙҙең яҙылмаған әхлаҡ ҡанундарына, ата-әсә, ғаилә мөнәсәбәттәренә бер ҙә генә төҫ түгел ул. Шул уҡ ваҡытта мин әлегеләй ҡанһыҙ рәүештә бала туҡмауҙы ла яҡлай алмайым. Ундай ата-әсәләр күп беҙҙә, ҡыҙғаныҫҡа. Тик уларға ҡарата дөйөм ғаилә мәнфәғәтенә зыян килтермәҫлек кешелеклерәк тәрбиәүи-аңлатыу саралары күреүҙән башланырға тейеш эш, тигән фекерҙәмен.

**(Дауамы 2-се биттә).**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ

# ЯҠШЫ ГӘЗИТ - УЛ...

## милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүен ойоштора алған гәзит

**Бынан тап 15 йыл әүәл ижад итеlә башланы "Киске Өфө" гәзите. Ә тарих шунан ғибәрәт: Башҡортостандың дәүләт суверенитетын яулауға өлгәшкәс, уның һөҙөмтәһе булыр ҡаҙаныштар исемлегендә, ысынлап та, "Баш ҡаланың башҡорт телендәге гәзитен булдырырға" тигән пункт та теркәп ҡуйылғайны. Тик ул шунда уҡ ҡына тормошҡа ашырылманы, хәбәр телдән телгә күсте, һөйләнде, сәйнәлде лә, ҡағыҙҙа көйө ҡалып, бер аҙға онотолдо.**

**(Дауамы 2-се биттә).**



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## РФ Енәйәт кодексы 116-сы "Туҡмауҙар" статьяһының яңы редакцияһы буйынса балаһына ҡул күтәргән ата-әсә енәйәтсе булып сыға, имеш. Был турала һеҙҙең фекерегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Сәйғәфәр ИШБИРҘИН, күп балалы атай:*** Беренсенән, бала туҡмау, икенсенән, шул баланың ата-әсәһе өҫтөнән ялыу яҙып, уларҙы төрмәгә ултыртыу хәленә килтереп еткереү - беҙҙең өсөн ҡырағай хәл. Көнбайыш өсөн был ҡәҙимге хоҡуҡ һаҡлау сараһы, уларса цивилизация "ҡаҙанышы", ә беҙҙең ил өсөн был әхлаҡи һәм мәҙәни көрсөк. Кем хаҡлы? Дөрөҫөн әйткәндә, хаҡлыҡ эҙләү мөһим дә түгелдер бында, мәгәр шуныһы хаҡтыр: иманың ҡушҡанса йәшәргә, ата-бабаларыбыҙ йолаһын тотоп, тәүфиҡлы, изге күңелле балалар тәрбиәләргә - бына әлеге сыр-борҙоң сиселеш юлы. Шул саҡта ата-әсәгә ҡайышҡа тотоноу ҙа кәрәкмәҫ, бала ла үҙ ата-әсәһе өҫтөнән аша атлап, гонаһлы булмаҫ, ата-әсәһе рәнйешенә дусар ителмәҫ. Беҙҙең ғаиләләрҙә барыһы ла ал да гөл, тип мин әйтмәйем. Эсеп, боларышып, йәмһеҙләшеп йәшәгән ғаиләләр бар. Ундайҙарҙы бит беҙҙә былай ҙа ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм итеү буйынса эш алып барыла. Ә инде айырыуса ҡанһыҙ ҡыланғандарҙың урыны - дөрөҫ, төрмә. Яңыраҡ ҡына әле Өфө ҡалаһы Орджоникидзе район прокуратураһы 12 һәм 9 йәшлек ике ҡыҙы менән 8 йәшлек улына ҡарата айырыуса аяуһыҙлығы, уларҙы даими рәүештә туҡмап, мыҫҡыллап көн күрһәтмәгәне өсөн 43 йәшлек бер ир енәйәт яуаплылығына тарттырылып, был эш суд ҡарамағына тапшырылды; ир менән ҡатын ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм ителде, ә балалар махсус приютҡа урынлаштырылды, тип яҙып сыҡты республика гәзиттәре. Бындай осраҡтарҙың ахыры билгеле, тик бына тәрбиәүи йәһәттән, тәртипкә саҡырып, уҡыуын яҡшыртһын, әҙәпле булһын өсөн еңелсә ҡайыш эләктереп алған өсөн дә шундай уҡ яза көтәме һуң ата-әсәне? Былар бит икеһе ике төрлө ғәмәл. Минеңсә, был закондың уйлап еткерелмәгәнлеге күренеп тора. Уны бөтөн йәмғәтселек тикшереүенә сығарырға кәрәк булғандыр, тием тәүҙә. Шуныһын да әйтеп китәйем: 5 бала тәрбиәләйбеҙ, бала туҡмау тигән нәмә башҡа ла инеп сыҡҡаны юҡ, шөкөр. Барыһы ла көтөп алынған Хоҙай бүләктәре. Тәртип боҙоу түгел, үҙ-ара ла һүҙ әйтешкәндәре юҡ. Ярҙамсылдар, татыу һәм берҙәмдәр, яҡшы уҡыйҙар. Шуға күрә лә әлеге мәсьәлә беҙгә ҡағылмай, тик ғибрәт йөҙөнән уйлаған-белгәндәремде әйтеп үтеү кәрәк тип таптым.

***Гөлшат ЮНЫСОВА, БДУ-ның Сибай институты юридик факультеты студенты:*** Закон алдында бөтәһе лә бер тигеҙ, тигән һүҙҙәрҙе ҡабатларға тура килә был осраҡта. Баланың төп яҡлаусыһы - уның ата-әсәһе. Ә инде улар йөҙөндә бәләкәстәр яҡлау тапмай, киреһенсә, һәр төрлө йәберләүҙәргә дусар ителә икән, яңыраҡ ҡына ҡабул ителгән ювеналь законды ҡулланыуҙың бер яҙыҡлығы ла юҡ. Йәмғәтселектең уны ҡабул итеп бөтмәүе аңлашыла: ни булһа ла өйҙән сүп сығармаҫҡа күнеккәнбеҙ - бына был, ысынлап та, менталитет, ә баланы яҡлаусы закон ҡабул итеү күптән кәрәк ине, минеңсә. Күпме бала, шул иҫәптән уларҙың әсәләре йорт тираны - иҫерек һәм холҡһоҙ атай арҡаһында яфа сигә! Әлбиттә, бала үҙе барып ошаҡлашып та йөрөмәҫ, ләкин уның йәшәү шарттарын, һаулығын күҙәтеүсе опека һәм попечителлек органдары, уҡытыусылар, тәрбиәселәре бар бит. Баланы яҡлауға алып, иң беренсе улар саң ҡағырға тейеш. Шул саҡта, бәлки, "башһыҙ" ғаилә башлыҡтары бер аҙ аҡылға ултырыр ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 15 ЙЫЛ

# ЯҠШЫ ГӘЗИТ - УЛ...

## милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүен ойоштора алған гәзит

(Башы 1-се биттә).

Әммә тап 15 йыл элек баш мөхәррирҙәр менән бер осрашыуҙа ул саҡтағы Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов "Ни өсөн баш ҡаланың һаман да башҡорт телендәге үҙ гәзите юҡ?" тигән һорау-дәғүәһен яңғырата. Осрашыуҙан һуң ул саҡтағы БР Президенты аппараты етәксеһе Илдар Рәйес улы Ғимаев баш мөхәррирҙәргә "Был эште ойоштороуҙа һеҙҙән кәңәш-инициатива көтәм", тип әйтеп ҡуя. Был һүҙҙәрҙе ҡолағына һәм күңеленә индереп, "Вечерняя Уфа" гәзитенең ул саҡтағы энтузиаст баш мөхәррире Марат Муллаҡаев үҙенең редакцияһы эргәһендә проектты башлап ебәрергә тәүәккәлләй һәм "Башҡортостан" гәзитендә егерме йылдан ашыу эшләп, инде ҡанға һеңгән, инде күнегелгән эштән айырылырға теләмәгән миңә йүгереп килә. Бурыстың үтә ныҡ яуаплылығын аңлаған мин, күпмелер икеләнгәндән һуң, үҙемде "боҙло һыуға" ырғытам...

2002 йылдың ноябрь башында, йәш журналистар Әлфинә Ҡарағужина, Айҙар Хәкимйәнов, Валера Ғәйнетдинов, Азат Ярмуллин, гәзитте версткалаусы Шамил Харисов, корректор-тәржемәсе Әминә Имашеваларҙан бер коллектив туплап, "Вечерняя Уфа" редакцияһы эргәһендә эш башлағанда Марат Муллаҡаев тәкдим иткән проекттың бары тик "Киске Өфө" тигән атамаһы һәм "Гәзит "Вечерняя Уфа" һымаҡ уҡ мәғлүмәти баҫма булырға тейеш", тигән ишара ғына бар ине. Проект бөтөн асылы, эстәлеге, рухы менән эш барышында ижад ителде. "Башҡортостан" гәзитендә эшләгән йылдарҙа тупланған "түл" артабан төн йоҡларға бирмәгән, туҡтамай әйләнеп торған фекерҙәр, идеялар ҡуласаһына әүерелде лә, мине һәм минең йәш коллегаларымды бер тапҡыр ғына түгел, даими рәүештә, аҙна һайын әлеге лә баяғы "боҙло һыуға" ташланырға мәжбүр итте. Иң мөһиме, быға тиклемге тәжрибә, журналист үҙ уҡыусыһын тойорға, яҙғандарының кемгә төбәлгәнен белергә тейеш, тигән ҡағиҙәгә нигеҙләнгәйне. Ошо ҡағиҙәгә таянып, "Киске Өфө" гәзитенең тәбиғәте менән сабый, рухи аҙыҡты бар нәмәнән өҫтөн ҡуйған, әммә яңы замандың заңына, ҡатмарлы ҡанундарына яраҡлаша алмай, бер аҙ баҙап ҡалған уҡыусыларға төбәләсәк икәне төҫмөрләнде. Яңы баҫма үҙ уҡыусыларының "Заман һынауҙарын нисек еңергә?" тигән һәм башҡа бик күп һорауҙарына яуап та бирергә, рухын да күтәрергә, сәмләндерергә лә, танһығын да ҡандырырға тейеш ине. Был маҡсатты үтәүгә гәзитебеҙҙең баш ҡала гәзите тип нарыҡланыуы ла бик-бик ярҙам итте. Фәһем алыр, фекер әйтер, өлгө күрһәтер шәхестәр Өфөбөҙҙә бит! Халыҡтың рухын күтәрер һүҙҙе улар әйтмәй, кем әйтһен? Ауылда тыуып үҫеп, мең төрлө кәртәләр аша үтеп, баш ҡалала төпләнеп, дәрәжәләр яулаған милләттәштең шәхси фиҙаҡәрлеге, баһадирлығынан башҡа тағы нимә һәм кем өлгө була ала беҙгә, балаларыбыҙға? Шул уҡ ваҡытта баҫмабыҙҙы бер нисек тә Өфө гәзите, тип кенә сикләй алмаясағыбыҙҙы, Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы гәзите булараҡ, уның ҙурыраҡ, мөһимерәк әһәмиәткә эйә икәнен, йәғни Өфөбөҙҙәге башҡорт донъяһы - ул дөйөм башҡорт донъяһының сағылышы булыуын аңланыҡ һәм... үҙенән-үҙе әлеге юҫыҡтағы, 15 йыл дауам иткән йүнәлеште алды баҫмабыҙ. Баш йорттоң башҡорт донъяһы тураһындағы хәбәрҙәрен "Киске Өфө" аша Башҡортостаныбыҙҙың бар ауыл-ҡасабаларына таратыуға өлгәштек шулай.

Артур Миллер тигән бер аҡыллы кеше шулай тигән: "Нимә ул яҡшы гәзит? Ул милләттең үҙ-үҙе менән һөйләшеүен ойоштора алған гәзит". Нисек кенә булмаһын, ошо үтә лә яуаплы бурысты иңебеҙгә артмаҡлап алдыҡ баштан уҡ. Ун биш йыл буйы шуға ынтылабыҙ. Беләбеҙ, был ынтылыш әле... 110 проценты менән атҡарылып та бөтмәгәндер. 110 процентҡа эшләү генә камиллыҡты тәьмин итә, ти бит уңышлы кешеләр. Бәлки, беҙҙән һуң килгән быуын артылыр ул үргә. Һәр хәлдә, шул быуындың быуынын нығытырға ярҙам итергә тейеш гәзитебеҙ һүҙе, шәхестәребеҙ аҡылы. Ғөмүмән, халҡыбыҙға матбуғат һүҙе кәрәк икәненә инанғанбыҙ. Әҙип яҙған һүҙгә мөкиббән китеп ышаныу һаман йәшәй бит әле. "Гәзиттә уҡымаһа, дәүләт метеорология институты прогнозына ла ышанмаған кешеләр була", тигән бит берәү. Ошо ышанысты ҡаҡшатмаҫҡа ине ул, тип йәшәй ун биш йәшлек "Киске Өфө" гәзите.

Әйткәндәй, ошо рубриканы асып, уҡыусыларыбыҙҙың да ниндәйҙер һүҙ әйтеүен көтәбеҙ. Ул һүҙ маҡтауға ғына ҡоролмаһын беркүк, ә матбуғат баҫмалары, аҡ ҡағыҙ битенә яҙылған һүҙ, уның тәьҫире, йоғонтоһо тураһында фекер алышыуға әйләнһен. Ошо фекер алышыуҙарҙа "Беҙҙең башҡорт уҡыусыларына ниндәй матбуғат баҫмаһы кәрәк?" тигән һорауға яуапты сырамытырлыҡ булһын ине. Һеҙҙең арала гәзитебеҙҙе 15 йыл буйы уҡығандар ҙа барҙыр, моғайын. Улар ни әйтер? Һәр хәлдә, хаттар көтәбеҙ.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Белорет районына эш сәфәре барышында "Морат" тау саңғыһы үҙәгендә булды, унда шәхсән үҙе трассаларҙы һынаны, туристар өсөн булдырылған шарттар менән танышты, комплексты үҫтереү мәсьәләләре буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Республика Башлығы парковканы ойоштороуҙың ҡәнәғәтләнерлек булмауын, сервистың түбән кимәлен дә билдәләне, кәрәкле ресурстарҙы күрһәтеп, тау саңғыһы комплексының артабанғы эш планын әҙерләргә, подрядсыларҙы һәм ситтән белгестәр йәлеп итеп, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә асыҡланған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә ҡушты.

✓Башҡортостан балалар технопаркы булдырыу өсөн субсидия алыуға конкурста еңде. Федераль бюджет республикаға 2017 йылда 24 миллион һум бүләсәк. "Кванториум" балалар технопаркы - ул балаларҙың перспективалы тәбиғи-ғилми һәм техник йүнәлештәр буйынса ысын мәсьәләләрҙе сисеү майҙансығы. Улар лазер, нейро технологияларҙы, пилотһыҙ авиация, программалау, 3D-моделләштереү кеүек йүнәлештәрҙе өйрәнә. Технопарктар 5-18 йәштәгеләргә тәғәйенләнгән.

✓Рәсәй юстиция министрының бойороғо буйынса Башҡортостандың баш суд приставы итеп Илнур Мәхмүтов тәғәйенләнде. Был вазифала ул Дәүләт Думаһы депутаты итеп һайланған Зариф Байғусҡаровты алыштырҙы. Илнур Мәхмүтов 1980 йылдың 5 октябрендә Күгәрсен районында тыуған. Хеҙмәт эшмәкәрлеген Федераль суд приставтары хеҙмәтендә Башҡортостандың Күгәрсен районы буйынса бүлегендә суд приставы-башҡарыусыһы вазифаһында башлай. 2013 йылдың октябренән алып - Удмурт Республикаһының баш суд приставы.

✓Башҡортостан Иҡтисади үҫеш министрлығында республиканың 2030 йылға тиклем социаль-иҡтисади үҫеш стратегияһы проектын әҙерләүгә ҡағылышлы тәкдимдәр ҡабул итеү өсөн махсус электрон почта булдырылған. Үҙ тәкдимдәрен индерергә теләгән граждандар һәм йәмғәтселек хатты 2030@bashkortostan.ru адресына ебәрә ала.

✓2016 йылда Башҡортостандың Күп функциялы үҙәге 4,135 миллиондан ашыу дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәр күрһәткән. Быйыл хеҙмәттәр күрһәтеү өлкәһен киңәйтеү ҡарала. Һүҙ тәү сиратта 10 йылға иҫәпләнгән яңы сит ил паспорттарын биреү, водитель танытмаһын алыу өсөн документтар ҡабул итеү, шулай уҡ сит ил граждандарына патенттар тапшырыу хаҡында бара.

*МИЛЛӘТТӘШКӘ ӨНДӘШЕҮ*

**Берәй милләттәшеңә үҙ телеңдә өндәшеп, яуапты башҡа телдә алыу айырыуса ҡала ерендә йәшәгән кешеләр өсөн бик тә тәбиғи хәл. Быға әллә ни иғтибар итеп тормайбыҙ, һин дә мин урыҫса һөйләшеп алабыҙ ҙа китәбеҙ. Аллаға шөкөр, ул телде лә беләбеҙ... Әммә бына республикабыҙҙан алыҫта, башҡа өлкәләрҙә шундай хәлдәргә юлыҡһаң, теге йәки был яҡташың өсөн, хатта бөтөн милләтең өсөн ниндәйҙер ҡыйынһыныу тойғолары кисереп, ныҡ ҡына уйланырға мәжбүр булаһың.**

# ЮҒАЛМАҒЫҘ, БАШҠОРТТАРЫМ!



Медицина лейтенанты званиеһындағы йәш табип булып тәүге мәртәбә госпиталь буйынса дежурға тороуым бөгөнгөләй хәтеремдә. Тулҡынланып, иртәнге оперативкаға инәм. Майор, подполковник дәрәжәләрендәге олпат "ағайҙар" алдында үҙемде малай һымаҡ ҡына хис итеүемде башҡаларға, айырыуса шәфҡәт туташтарына белдермәҫкә тырышып: "Товарищ подполковник, лейтенант Суюндуков дежурство по госпиталю принял", - тип, госпиталь начальнигына доклад яһайым. Был госпиталдәге гөрөф-ғәҙәт буйынса, беренсе мәртәбә дежурға торғандарға ярҙамға оло табиптарҙы беркетәләр икән. "Һин башҡорт егете бит әле", тине подполковник Скибюк (ул үҙе украин милләтенән ине). "Так точно!" "Һинә ярҙамға землягыңды беркеттек. Таныш булығыҙ, майор Сәлихов Әсғәт (фамилияһы һәм исеме үҙгәртеп алынды)". Майор битараф ҡына баш ҡаҡты. Ситтәрәк ултырған был майорға ҡарап: "Минең яҡташ түгелме икән был ағай?" - тип уйлап ҡына ултыра инем, ҡалай йәтеш булды әле... Бына бәхет! Дежур табип булмәһенә инеп, икәүҙән-икәү ҡалғас, яҡташыма ҡул бирәм һәм башҡортсалап һүҙ ҡушам:

- Хәлил Һөйөндөков, Баймаҡ районынан.

- Иптәш лейтенант, хәтереңдә тот, звание буйынса түбәндәр башлап ҡул бирмәй! - тип һалды был ағай урыҫсалап, миңә ҡул да бирмәйенсә. Уның һөйләшеүендә ярайһы ғына ныҡ һиҙелгән акцентына ҡарап, был яҡташтың башҡорт, йәиһә татар телен бик яҡшы белеүен тойомланым шулай ҙа (һуңынан райондарыбыҙҙың береһенән булған был ағайҙың, ысынлап та, татар телле башҡорт булыуы, тап минең һымаҡ уҡ ҡасандыр Өфөлә медицина институтында уҡығаны хаҡында белдем).

- Виноват, товарищ майор...

Һалҡын ғына танышҡан был оло кешегә шулай ҙа бер аҙҙан:

- Һеҙ ҡайһы райондан? - тигән һорауҙы бирергә батырсылыҡ иттем тағы ла башҡортсалап. Ул, гүйә, минең һорауымды ишетмәне, урыҫ телен вата-емерә дежур табиптың документтары менән таныштыра башланы... Тыуған яҡтан алыҫта яҡташымды, өҫтәүенә, коллегамды осратыу шатлығым ифрат та ныҡ ҡырылған кәйеф менән алышынды. Тәүге дежурство ана шулай күңелһеҙ генә башланып китте.

Минең был "напарнигым"дың дежурство барышындағы ҡыланыштары, ысынлап та, аптыратырлыҡ ине. Артымда баҫып тороп, ауырыу тарихын нисек яҙыуымды ауырыным аша күҙәтеп, ул ғына ла түгел, "Не так надо писать, лейтенант!" тип, ауырыу һалдат һәм дежурҙағы шәфҡәт туташы алдында үҙен күрһәтергә тырышыуы тора-бара йәнгә тейә башланы. Минә һәр саҡ "һин"гә өндәшеп, "Слушай, лейтенант, че тебе старшие говорят!" тип бойороҡ тонында һөйләшкән яҡташыбыҙ өсөн оялыуымдың сиге булманы. Күпмелер ваҡыттан был яҡташҡа үпкәләү генә түгел, хатта асыулана ла башланым.

- Послушай, товарищ майор, я уже давно не студент, и очень хорошо знаю как писать историю болезни! - Йәш булыуыма ҡарамаҫтан, минең түҙемлегем сигенә етте, һәм мин унан ярайһы ғына ҡәтғи формала медсестра һәм ауырыу алдында бойороҡ тонындағы күрһәтмәләр бирреп тормауын үтендем. Табип этикаһы хаҡында ла иҫенә төшөрҙөм. Беҙҙең һөйләшеүҙәр, әлбиттә, урыҫ телендә барҙы.

- Өлкәндәр менән нисек "һин"гә һөйләшергә баҙнат итәһең, лейтенант?

- Үҙең башлап, иптәш майор, миңә "һин" тип өндәштең. Устав буйынса, званиеға ҡарамай, бөтә хәрбиҙәр ҙә бер-береһенә "һеҙ" тип өндәшергә тейеш!..

- Ағайыңа әйтеп, ҡолағыңды борҙортмаһаммы, лейтенант!.. - тип ҡуйҙы был ағай ахырҙа (шул уҡ гарнизонда минең бер туған ағайым Ғайса капитан званиеһында ракетчик булып хеҙмәт итеп йөрөй ине. Был яҡташ майор уның менән таныш булған икән). Уның был һүҙҙәрен ярым шаяртыу итеп ҡабул иттем...

Юғарыла һөйләгән рәүештә танышып киткән яҡташыбыҙға ҡарата, йомшаҡ ҡына итеп әйткәндә, ихтирам тойғолары уянманы һәм мин уның менән башҡаса бер ҡасан да башҡортса һөйләшергә ынтылманым. Үҙен әллә кемгә ҡуйған был ағайҙың телендә һөйләшкәнен дә бер тапҡыр ҙа ишетмәнем. Уның ҡарауы, был майорҙың ҡатыны ифрат та ябай Әлмирә исемле башҡорт ҡыҙы булып сыҡты. Матур итеп йырлай ҙа, саф башҡортса алсаҡ итеп һөйләшә лә белә ине...

Аҙым һайын булмаған хәлдә лә, ситтә бына ошондай яҡташтарыбыҙҙы осратыу бик күңелһеҙ хәл, әлбиттә. Үҙен ул хаҡ тип иҫәпләгәндер, моғайын, начальник бит ни тиһәң дә (әрмелә һөнәре буйынса йә терапевт, йә хирург булмаған, йәғни кеше дауалау менән шөғөлләнмәй торған врачтар - ойоштороусылар, медицина хеҙмәте начальниғы, тигән штат берәмектәре бар)... Уның урынында башҡа милләттәге берәй оло офицер булһа, бәлки, был хәлде иғтибарһыҙ ҙа ҡалдырған булыр инем һәм уға ҡарата шундай "юғары талаптар" ҡуйырға башыма ла инеп сыҡмаҫ ине...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**
**(Дауамы бар).**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# РУХЛЫ БЫУЫН ТӘРБИӘЛӘЙЕК!

***Зиниә ҒӘЛЛӘМОВА, Әбйәлил районы Асҡар ауылының 1-се мәктәбе уҡытыусыһы:*** Донъяла һәр нәмәне тотоп торған үҙәк бар, кеше өсөн ул - рух. Кешенең эске булмышын, донъяға ҡарашын, көсөн рух булдыра. Бына ни өсөн балаларҙа рух тәрбиәләү бөгөн иң мөһим бурыстарҙың береһе булырға тейеш. Рухи тәрбиә бер көнлөк эш түгел, атай-әсәй тыуғандан алып балаһы күңеленә үҙ халҡының милли көй-моңдары, уйындары, йолалары, гөрөф-ғәҙәттәре аша, ауыҙ-тел ижады ярҙамында уның тәүге орлоҡтарын һала. Беҙ йәш быуындың тормошҡа еңел ҡарауын, ата-әсәһен хөрмәт итмәүен, юғалып ҡалыуын һәм хатта үҙ-үҙенә ҡул һалыуға тиклем барып етеүен аптырап ҡабул итәбеҙ. Ни өсөн былай булды һуң әле, тигән һорауҙы йыш бирәбеҙ. Бындай проблемалар балаға бәләкәй саҡтан иғтибар, тәрбиә, йәнле аралашыу, аңлашыу етмәүҙән дә барлыҡҡа килә. Бала психик көсөргәнештә йәшәй, күп мәғлүмәт араһында дөрөҫөн һәм ялғанын айыра, үҙенә кәрәклене һайлай алмай. Атай-әсәйҙәрҙең береһе балаһын уңышлы, һәр яҡлап үҫешкән, бөтә нәмәлә алдынғы итеп күргеһе килеп, мөмкин булған бөтә түңәрәктәргә лә йөрөтә, икенселәре иһә балаһын бөтөнләй иғтибарынан мәхрүм ҡалдыра. Күп ваҡыт тегеләре лә, былары ла бала үҙе нимә эшләргә, шөғөлләнергә теләүе менән ҡыҙыҡһыныып тормай. Сөнки күптәренең балаһы менән йәйләп ултырып һөйләшергә, күберәк иғтибар бүлергә ваҡыты юҡ. Атай-әсәйҙәр хәҙер донъя көтәм, етеш йәшәйем тип көнө-төнө эшләй. Кемдәр вахта менән ситкә китеп аҡса таба, улар бөтөнләй тәрбиәлә ҡатнашмай. Ғаилә институты шулай йәйләп ҡына бөтөп барған кеүек. Бигерәк тә өләсәй һәм олатай тәрбиәһе етмәүе балаға шәхес булараҡ үҫешеү, тормошта үҙ урынын табыу мәсьәләһен ҡатмарландыра.

Бына ошо хәлдәрҙе еңеләйтеү өсөн беҙгә этнопедагогика, йәки халыҡ тәрбиәһе тураһында иҫкә төшөрөргә кәрәк. Электән беҙҙә балалар өләсәй-олатаһы тәрбиәһен алып үҫкән. Бала саҡта бигерәк тә халыҡ әкиәттәре, йомаҡтар, йыр-моң, уйындар ярҙамында бик матур тәрбиә алғандар. Өй эштәре менән булышҡан өлкәндәр араһында ярҙам итешеп йөрөп, хеҙмәт тәрбиәһе лә алғандар. Өләсәй-олатайҙар ейәндәрен ныҡ ярата бит ул, күп иғтибар бүлә, баланы тыңлай беләләр һәм уның ниндәй эшкә маһир, ҡулынан нимә килеүен дә күреп торалар. Иң мөһиме, улар баланы маҡтап, ҡупайтып ебәреп дәртләндерә лә белә. Тимәк, күңелен үҫтереп, артабан тормошта үҙ юлын табырға ярҙам итәләр. Бына шундай тәрбиә етмәй беҙҙең йәш быуынға. Гөмүмән, ғаилә һәм мәктәп бер юҫыҡта эшләргә тейеш, белем усағында ла этнопедагогика һәм заманса техниканы бергә ҡушып, тәрбиә эшен алып барырға мөмкин. Ҡыҙыҡһындырып һөйләһәң, балалар милли йолалар менән дә, халыҡтың тарихын да, туған телен дә теләп, яратып өйрәнә. Милләттең киләсәге рухлы йәш быуында булыуын бөтәбеҙ ҙә яҡшы аңлайбыҙ, ләкин һәр беребеҙ шул рухты тәрбиәләүгә лә тейешле иғтибар бүлергә өйрәнәйек.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Быҙтыр Федераль яза башҡарыу хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы учреждениеларынан 2481 кеше ваҡытынан алда ирекҡә сыҡҡан. Уларҙың 1614-е - шартлы рәүештә. Тағы ла 867 еңөйәтсенең язаһы холоҡ төҙәтеү эштәре йәки иректән сикләү менән алыштырылған. Ваҡытынан алда ирекҡә сығыу тураһында мәсьәләне хәл итеү ваҡыты еткән хөкөм ителеүселәрҙең 53 проценты судҡа мөрәжәғәт итеү хоҡуғы менән файҙаланған.

✓Илдең баш ҡалаһында Милли әҙәбиәттәр йорто булдырыласаҡ, Горький исемендәге Әҙәбиәт институты уның нигеҙе булып торасаҡ. Мәсьәлә 2017 йылдың 31 мартына тиклем ентекләп өйрәнелергә тейеш, был эшкә Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев менән Мәскәү мэры Сергей Собянин яуаплы итеп тәғәйенләнгән. Милли әҙәбиәттәр йортоноң күҙәтеү советын үҙ теләге буйынса Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ейәне Тимербулат Кәримов етәкләйәсәк, тип күҙаллана.

✓Былтыр Башҡортостанда 632 игеҙәк һәм 12 өс игеҙ сабый тыуған. 2016 йылда төбәктең ЗАГС органдары тыуым тураһында 56 меңдән ашыу акт теркәгән. 20 меңдән ашыуы ғаиләлә беренсе, 23 меңгә яҡыны - икенсе, һигеҙ меңдән ашыуы - өсөнсө, ике меңдән ашыуы - дүртенсе, 964-е бишенсе һәм артабанғы бала булып донъяға килгән. 28 757 малай һәм 27 003 ҡыҙ тыуған. Өфөлә 18 600 сабый донъяға ауаз һалған, ҡыҙҙар 528-гә күберәк. Кескәй өфөләр араһында 250 игеҙәк һәм ете өс игеҙ бала бар.

✓Башҡортостандың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәттәре буйынса, былтыр Башҡортостанда 25 323 никах теркәлгән. Айырылышыуҙар - 15 646.

✓Ҡонъаҡ районы башҡорттары хәҙер ҡабаттан Башҡортостандың көнүҙәк ваҡиғалары менән таныша һәм Башҡортостан юлдаш телеканалында урындағы телевидение яңылыҡтарын ҡарай ала, тип хәбәр иттеләр республиканың Силәбе өлкәһендәге вәкиллегендә. Быға район хакимиәте, район башҡорттары ҡоролтайы һәм башҡа иҗтимағи ойошма вәкилдәренең республика етәкселегенә Ҡонъаҡ районы биләмәһендә Башҡортостан юлдаш телеканалы эфирын тергеҙеү үтенесе булышлыҡ итте.

**"Башинформ"дан.**

ҠЫҪҠАСА

# ҠЫШҠЫ ӨМӘЛӘР ҺӘМ...

✓Өфө тарихында беренсе тапҡыр ҡышҡы өмә үтте. Ул байрам мәлендә туктауһыҙ яуып, баш ҡаланы тоtҡонлоҡҡа ултыртҡан ҡарҙан таҙартыу буйынса ойошторолдо. Сираттағы оператив кәңәшмәлә ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов унда ҡатнашыусыларға рәхмәт белдереү менән бер рәттән, проблеманың һаман да актуаль булыуын билдәләне: "Сарала 13,5 мең кеше ҡатнашты, шуларҙың 10 проценты - ябай халыҡ. Нигеҙҙә, өмә торлаҡ-коммуналь комплекс, мэрия, район хакимиәттәре, ҡала йәшәйешен тәьмин иткән учреждениелар һәм предприятиелар хеҙмәткәрҙәре көсө менән атҡарылды. Шуға ҡарамаҫтан, беҙ берләшә һәм хәл-торошто яйлай алдыҡ. Әммә ҡаланы ҡарҙан таҙартыу бурысы көн үҙәгенән алынмай, әлеге ваҡытта йорт аралары, ихаталарҙы таҙартыу төп маҡсат булып тора", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

✓Баш ҡалала вандалдар менән көрәш буйынса төрлө саралар, профилактик эштәр алып барылһа ла, улар һаман да үҙ һөнәрен ҡуймай - был юлы И. Якутов исемендәге парктың яңы иллюминация системаһы зыян күрә. Үҙәк аллеянан 600 мм диаметрлыҡ янып торған шар урлана. Яңы йыл алдынан парктың ял зонаһы буйына 30 яныусы шар һәм Мәңгелек ут тирәләй Өфө гербы төшөрөлгән 12 конструкция ҡуйыла. Әммә улар ни бары ике аҙна ғына халыҡты ҡыуандырып өлгөрҙө.

✓Башҡортостан уҡыусылары 2017 йылдағы Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерлек буйынса видеоконсультациялар ҡарай ала. Уларҙы Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт үҙенең Youtube каналына һалған. 11 видеолекциянан торған серияла БДИ-ның контроль-үлсәү материалдарын әҙерләү буйынса федераль комиссия етәкселәре һәр фән буйынса имтихандарҙың үҙенсәлектәре һәм йөкмәткеһе, 2017 йылдағы үҙгәрештәр хаҡында һөйләй, Берҙәм дәүләт имтиханына әҙерләнеү буйынса кәңәштәр бирә һәм сығарылыш синыф уҡыусыларының һорауҙарына яуап ҡайтара.

✓М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты 2017-2020 йылдарҙа ислам тарихын һәм мәҙәниәтен тәрән белгән белгестәр әҙерләү буйынса дәүләт программаһын тормошҡа ашырыу өсөн 200 миллион һумдан ашыу грант алаҫаҡ. Педагогия университеты ислам мәғрифын үҫтереү һәм экстремизмды иҫкәртеү буйынса программаны бойомға ашырыу менән 2008 йылдан шөғөлләнә. Республиканың төрлө вуздарынан һәм ғилми учреждениеларынан ислам тарихы һәм мәҙәниәте, теология, культурология, педагогика, философия, социология һәм башҡа гуманитар фәндәр буйынса белгестәр проект тирәләй берләшкән һәм төбәктә конфессия-ара татыулыҡты һаҡлау буйынса мөһим бурысты үтәй.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЙЫЛ ХӘСТӘРЛЕКТӘРЕ ШУНДАЙ

**2017 йылда Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда иғлан ителгән Экология һәм махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылы планына атмосфера һауаһын, һыу объекттарын, үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһын һаҡлау, шулай уҡ халыҡтың экологик мәҙәниәтен күтәреү өлкәһендә 118 сара инген.**

Был хаҡта матбуғат конференцияһында төбәктең тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Илдар Һаҙыев һөйләне. Планлаштырылған сараларҙың барыһын да халыҡ, йәмәғәт ойошмалары, ҡала һәм район муниципалитеттары, предприятиелар тәҡдим иткән. "Экология йылы ҡалдыҡтар менән эш итеү өлкәһендә, тирә-яҡ мөхиткә тәьсир итеүҙе нормалаштырыуҙа һәм иң яҡшы технологиялар индереүҙә, контроль-күҙәтеү эшмәкәрлегендә барған үҙгәрештәр осороно тура килде, - тип билдәләне министр. - Быларҙың һәммәһе лә илдә һәм республикала артабанғы экология сәйәсәтенең ныҡлы нигеҙе булып тора".

2017 йылда Дуҫлыҡ монументы янындағы Ағиҙел йылғаһының ярын нығытыу өсөн федераль ҡаҙнанан 1 миллиард 100 миллион һәм республика бюджетынан 890 миллион һум аҡса йүнәлтелә. Айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләрен һаҡлау өлкәһендәге сараларға ҙур иғтибар бүленә. "Парктар маршы" республика конкурстарын, "Башҡорт Уралы" биосфера резерваты биләмәһендә солоҡсоларҙың республика слетын, ҡурсаулыҡ урындары буйлап "Изге утрауҙарҙың дуҫтары" экологик марафонын үткәреү ҡаралған. Быйыл "Ирәмәл" һәм "Алтын солоҡ" тәбиғәт парктарында мобиль бәйләнеш булдырылырға тейеш, "Кандракүл" паркында парковка урындары һәм яңғын һүндереү ҡоролмаһы төҙәлә. Республикала "Шүлгәнташ" биләмәһендә һәм эргә-тирәләге тәбиғәт объекттарында геопарктар булдырылыуҙың халыҡ-ара тәжрибәһе тормошҡа ашырыла. Төп маҡсат - туристарҙы йәлеп итеү һәм рекреацияны үҫтереү. Йыл дауамында экологик белем биреү өлкәһендә "Кағыҙ шаушыуы", "Йәшел сессия" акцияларын, Башҡортостандың төҙәк ауыл биләмәләре һәм иң яҡшы мәктәп урмансылығы конкурстарын ойоштороу күҙаллана.

# СОЛОҠСОЛОҠ ЯҠЛАУҒА МОХТАЖ



**Башҡортостанда солоҡсолоҡто үҫтереүгә һәм бөрйән солоҡ бал ҡортон һаҡлап ҡалыуға йүнәлтелгән закон проектын тикшерәләр. Кәңәшмә Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө биология институтында уҙҙы.**

Закон проектын республика Дәүләт Йыйылышының Аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәтте файҙаланыу буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Руфина Шаһапова тәҡдим итте. "Ғалимдар баһалауы буйынса, ҡара төҫтәге урман бал ҡортоноң бөрйән тоҡомо донъяла иң ҙуры һәм генетик яҡтан иң таҙаһы. Популяция үҙәге Бөрйән районы "Шүлгәнташ" ҡурсаулығында урынлашҡан", - тип һөйләне Руфина Шаһапова. Депутат әйтеүенсә, бөрйән бал ҡорто төбәктең ҡырыс тәбиғәт шарттарына яраҡлашҡан. Башҡа төр бал ҡорттарында ҡаты Уралда ҡышын генетик ҡышлау һәләте барлыҡҡа килмәгән. Нигеҙҙә, бөрйән бал ҡорто - юғары сифатлы, экологик яҡтан таҙа бал алырлыҡ, умартасылыҡты үҫтереү өсөн үҙенсәлекле резерв. Уны һаҡлап ҡалыуҙың иң мөһим шарты - бөтә донъяла ҡыҙыҡһыныу уятыусы башҡорттарҙың боронғо шөғөлө - солоҡсолоҡҡа булышлыҡ итеү һәм уны үҫтереү. Тап солоҡта ҡаты тәбиғи һайлап алыу бара, ул генетик фондты һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирә. Төрлө бал ҡорто тоҡомдарын ҡушҡанда көсһөҙ тоҡом тыуа. Гибридлаштырыу процесы бөрйән бал ҡортона төҙәтелмәслек зарар килтереүе бар. Ғинуарҙа закон проектын эксперт төркөм менән тикшереү күҙаллана, унан һуң ул республика парламенты ҡарауына тәҡдим ителәсәк.

# ҺАҘЛЫҠТАР - ҠОШТАР ТӨБӘГЕ



**"Асылыкүл" тәбиғәт паркындағы Берҡаҙан-Ҡамыш һаҙлығы әһәмиәтле халыҡ-ара һыу-һаҙлыҡ, йәки Рамсар биләмәләре статусын алыуы ихтимал.**

Рамсар конвенцияһы хөкүмәт-ара килешеү булып тора, уның маҡсаты - һыу ҡоштарының йәшәгән урыны булараҡ, бөтә һыу-һаҙлыҡ биләмәләрен һаҡлау һәм һөҙөмтәле файҙаланыу. "Рамсар биләмәләре" статусы тәбиғәт ресурстарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса махсус режим индереүҙе күҙ уңында тота. Рәсәйҙә халыҡ-ара әһәмиәттәге 12 һыу-һаҙлыҡ биләмәһе иҫәпләнә. Әле Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса программаһы сиктәрендә Берҡаҙанды икенсе тапҡыр һуғарыу буйынса саралар алып барыла.

"Үҙ ваҡытында Урал алдында 700 гектар майҙанлыҡ, һирәк осраған йәнлектәр һәм ҡоштар йәшәгән иң ҙур һаҙлыҡ киптерелгән, торф сығарылған. Һаҙлыҡты эшкәрткәндән һуң Асылыкүлдәге һыу кимәле кәмене, был да етди проблема булып тора, - тип һөйләне Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө биология институты директоры Василий Мартыненко. - Тиҙҙән бында ярҙы нығытыусы дамба төҙөләсәк, махсус ҡойоу механизмы ҡуйыласаҡ. Объект килеһе йылдан эшләй башлай".

"Был Башҡортостанда халыҡ-ара әһәмиәттәге тәүге һыу-һаҙлыҡ биләмәһе буласаҡ. Һис шикһеҙ, төбәктең абруйын арттырасаҡ һәм Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының үҫеш программаһы фондтарынан ошо биләмәне тикшереү һәм үҫтереү өсөн аҡса алырға мөмкинлек бирәсәк", - тип хәбәр итте ғалим.

# БОҘҘАН - МӨҒЖИЗӘ




**Оҫта ҡулында бөтөн нәмә икенсе төрлө һынланыш ала, алмас та йәйгор төҫтәрендә балҡый, тип юҡҡа әйтмәйҙәр инде. Ҡарап тороуға ябай боҙ плитаһы, боҙ кирбесенән дә скульпторҙар сәнғәт өлгөһө тыуҙырырға һәләтле. Әйтерһең дә, уларҙың йөрәк йылыһы ошо һалҡын матдәгә йән өрөп, уларҙы ла кешеләр күңеленә йылылыҡ таратырға мәжбүр итә...**

Өфөлә 15 ғинуарҙа асылған Континенталь хоккей лигаһының Хоккей йондоҙҙары аҙналығына арнап, шул уҡ көндә Совет районы хакимиәте ярҙамында "Реформа" мебель студияһы ойошторған һәм И. Якутов исемендәге паркта скульпторҙар араһында боҙҙан төрлө һындар эшләү буйынса старт алған конкурс та быға асыҡ дәлил булды.

Үҙ көсөн һынап ҡарарға теләк белдергән 12 скульпторҙың ижад емешенең күпселеге спорт тематикаһына бағышланһа, башҡаларында инде баш ҡалабыҙ Өфө, тыуған Башҡортостаныбыҙ сағылыш тапҡан.

Боҙ скульптураһы конкурсына йомғаҡ бөгөн, йәғни 21 ғинуарҙа яһалды. Бүләкләү тантанаһында ҡунаҡтарға сәй табыны әҙерләнде, тамашасылар күңелен аниматорҙар асты, концерт программаһы күрһәтелде һәм, әлбиттә, бик күп призлар тапшырылды. Тамашаға йыйылған халыҡ күңеленә йылылыҡ ҡына түгел, ә ысын мәғәнәһендә илһам алып ҡайтты был саранан.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың ата-әсәләр йәмәғәтселеге Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт етәксеһенә йомғаҡлау аттестацияһы буйынса һорауҙар бирә ала. Ведомствоның матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 15 февралдә Сергей Кравцов уҡыусыларҙың ата-әсәләре менән ил кимәлендә осрашыу үткәрә һәм 2017 йылда Берҙәм дәүләт имтиханын, Дәүләт йомғаҡлау аттестацияһын уҙғарыуға бәйле һорауҙарға яуап бирә.

✓28-29 ғинуарҙа Өфөнөң "Төҙөүсе" стадионында Суперлига командалары араһында боҙҙа мотоуҙыш буйынса Рәсәй чемпионатының өсөнсө һәм дүртенсе этабы уҙасаҡ. Быйыл Суперлигаға дүрт команда инә. Бына улар: былтырғы чемпион "Мега-Лада" (Тольятти), былтырғы бронза призеры "Башҡортостан - Ғ. Ҡадиров исемендәге техник спорт төрҙәре үҙәге" (Өфө), "Каустик" (Стәрлетамаҡ) һәм "Каменск-Уральск техник спорт төрҙәре үҙәге" (Каменск-Уральск) командалары.

✓1-28 февралдә Башҡортостандың Үҙйөрөшлө машиналарҙың һәм башҡа төр техниканың техник торошон күҙәтеү буйынса дәүләт инспекцияһына, Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығына республика буйынса Эске эштәр министрлығының ЮХХДИ идаралығы менән берлектә "Каргиҙәр" операцияһын ойоштороу бурысы йөкмәтелде.

✓Өфөнән Галина Антоновна менән Валерий Вениаминович Семеновтарҙың ғаиләһе Бөтә Рәсәй "Йыл ғаиләһе" конкурсының 22 еңеүсеһе иҫәбенә инде. Бынан тыш, улар онлайн тауыш биреүҙә 6-сы урынға сыҡты. Конкурста Рәсәйҙең 77 төбәгенән 286 ғаилә ҡатнаша. Иң сағыу 80 ғаилә тарихы "Йыл ғаиләһе - 2016" маҡтау китабына индереләсәк. Галина Антоновна менән Валерий Вениаминович етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған 15 балаға ғаилә йылыһы бирә. Хатта төрлө ауырыуҙар диагнозы менән килгән балаларҙың, тейешле тәрбиә күргәндән һуң, диагноздары алына. Был үҙе мөғжизә түгелме ни!

✓Ғинуар башында Башҡортостандың Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы инспекторҙары һунар өлкәһендә һигеҙ ҡағиҙә боҙоу осраған асыҡлаған. Ғәйеплеләргә биш мең һум күләмендә штраф һалынған. Әле төбәк биләмәһендә затлы тиреле йәнлектәргә, ҡабанға һәм бер йәшкә тиклемге мышыға һунар дауам итә.

✔ *Башҡорт телендәге һүҙҙәрҙең динамикаһы, уның тирбәлеше икенсе телдә бөтөнләй икенсе тирбәлеш ала, сөнки һәр телдең үҙенсәлеге бар. Шуға ла, "Урал батыр" эпосын икенсе телдәргә бөтөн тулылығында ауҙарыу мөмкин түгел.*



*БАШ ҠАЛА ҠУНАҒЫ*

# ЙӘҺҮДТӘР ҘӘ БЕЛҺЕН, ТИНЕМ...



**Һуңғы йылдарҙа башҡорт халҡының мәшһүр эпосы "Урал батыр" бөтөн йәмәғәтселектең иғтибар үҙәгендә. Уға бәйле сираттағы яңылыҡ шул булды: Израилдә йәшәүсе яҡташыбыҙ Рауил САДИҠОВ уны иврит теленә тәржемәләп, китап итеп баҫтырып сығарҙы. Ошо көндәрҙә милләттәшебеҙҙе Өфөгә ҡайтҡан сағында тап иттек һәм уға "Урал батыр" эпосы тәржемәһе буйынса бер нисә һорауыбыҙҙы төбәнек.**

**➔ Башҡортостандан алыҫта, сит-яттар араһында йәшәп ятҡан милләттәште "Урал батыр" эпосын тәржемә итеүгә ниндәйҙер етди сәбәп этәргәндер?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, "Урал батыр" эпосын тәүҙә әкиәт тип уҡый башланым. Ҡайҙа әле, башҡортса әкиәт уҡыйым, туған башҡорт телен иҫемә төшөрәйем, тип тотондом. Бер тапҡыр уҡып сыҡтым - бер нәмә лә аңламаным. Әҫәрҙе ҡабат-ҡабат уҡырға тура килде һәм аҡрынлап уның мәғәнәһе аңлашыла башланы: күрәһең, йоҡомһорап ятҡан гендар уянғандыр, башҡорт ҡаны уйнай башлағандыр. Һәр хәлдә, эпостың һүҙҙәре ысын мәғәнәһендә ниндәйҙер моң булып яңғыраны. Ошо моң мине уйланырға мәжбүр итте.

Һуңынан, эпосты тулыһынса аңлағас, үҙемә бер схема төҙөп алдым да, моғайын, был эпосты иврит телле йәһүдтәр өсөн тәржемә итеү урынлы булыр ине, тип уйлана башланым. Әлбиттә, эште тәүҙә еңелерәк юлдан - балалар өсөн яҙылған башҡортса әкиәттәрҙе тәржемә итеүҙән башларға булғайным. Тик "Урал батыр"-ға ҡабат-ҡабат ураным да ҡайттым, ураным да ҡайттым. Тәржемә өсөн 4 йыл ваҡытым китте. Ошо йылдар эсендә минә БДУ-ның Учалы филиалы директоры Зилә Рәхмәтуллина һәр саҡ терәк булды, илһамландырып торҙо. Уның энергетикаһы шул тиклем ыңғайҙыр, күрәһең, уның менән аралашҡандан һуң яңы көс менән эшкә тотона инем. Шулай итеп, тәржемә өҫтөндә эшләп бөттөм. Артабан инде мөхәррир эҙләргә кәрәк булды, сөнки мин эшләгән вариантта бер генә нәшриәтсе лә эшемде ҡабул итмәҫ ине. Бер нисә мөхәррир менән һөйләштем. Улар барыһы ла иврит телен белгән рустар ине. Үкенескә күрә, ҙур энтузиазм менән тотондолар ҙа, һуңынан, сәбәбен әйтмәйенсә, ҡапыл юғалды ла ҡуйҙылар. Шуға ла Израилдә тыуған, иврит телендә һөйләшеп үҫкән кешене эҙләргә ҡарар иттем. Ундай кешене таптым, ул - филолог, мөхәррирләү буйынса икенсе дәрәжәһе булған йәһүд ҡыҙы. Уның менән 2-3 ай йәнәш ултырып, текстағы һәр һөйләмде сағыштырып тикшерҙек. Нәшер итергә "Вершина книг" тип аталған нәшриәт ризалашты. Китапты биҙәү, уға иллюстрациялар эшләүҙе лә үҙем башҡарҙым.

Башҡорттарҙың ошо бөйөк әҫәрен Израилдә лә белһендәр, тигән маҡсатта башланған эш ине инде был. Дөрөҫөн әйткәндә, унда башҡорттар тураһында бөтөнләй белмәйҙәр. Һәм "Урал батыр" китабы ниндәйҙер кимәлдә иудейҙарҙың донъяның барлыҡҡа килеүе тураһындағы ҡарашы менән тап килмәй. Быны танырға кәрәк. Шуға иврит телендәге "Урал батыр" Израиль өсөн ниндәйҙер кимәлдә яңылыҡ булып та тора.

**➔ Иң беренсе цензор - ул мөхәррир, тиҙәр. Һеҙҙең мөхәррирегеҙ "Урал батыр" эпосы тураһында ниндәй уй-фекерҙә ҡалды?**

- Мөхәррирләүсе ҡыҙ ҙа, нәшриәт хеҙмәткәрҙәре лә: "Үҙебеҙ өсөн яңы донъя астыҡ", - тине. Йәғни, был әҫәр улар донъя ҡоролошо тураһында быға тиклем уҡыған китаптарҙан нык айырыла. Израилдә бөгөн Америка, Англия йоғонтоһо бик көслө. Балалар, нигеҙҙә, Уолт Дисней һәм Золушка образдарында тәрбиәләнә. Ғөмүмән, менәр йыллыҡ тарихы булһа ла, хәҙерге йәһүд мәҙәниәте бер нисә йөҙ йыл менән генә иҫәпләнә. Төрлө илдәрҙән, ҡитғаларҙан килгән, бөтөнләй башҡа мәҙәниәтте, башҡа менталитетты үҙҙәренә һеңдергән төрлө этник төркөмдәр бер урынға йыйылған бит - уларҙа ниндәй дөйөм мәҙәниәт булыуы мөмкин! Бының өсөн, йәғни яңынан бер милләт булып формалашыу, дөйөм мәҙәниәт тыуҙырыу өсөн оҙайлы йылдар кәрәк.

**➔ "Урал батыр" эпосын төрлө кеше төрлөсә ҡабул итә. Ә һеҙгә ул ҡайһы яғы менән асылды?**

- Мин был эпоста Йыһан менән ниндәйҙер бәйләнеште тояам...

**➔ Беҙҙең гәзиттәге сығыштарҙа шундай бәхәс тыуа биреберәк ҡуйғайны: "Урал батыр" эпосы Исламға тиклем барлыҡҡа килгән әҫәр. Әгәр Ҡөрьән-Кәримде Мөхәммәт бәйғәмбәргә Юғарынан төшөргәндәр икән, "Урал батыр" эпосы ла башҡорт халҡына махсус рәүештә Юғарынан бәйән ителгән, тиергә мөмкинме?**

- Йәһүдтәрҙең "Тора"һы бөгөнгөләргә быуаттарҙан-быуаттарға телдән-телгә тапшырылған. Әлбиттә, заманына ҡарап, ул үҙгәргән, уға нимәләр өҫтәлгән, нимәләр алып ташланған. Ләкин ул йәшәгән. Борон-борондан ауыҙ-тел ижады бик күп халыҡтарҙа йәшәп килә. Әгәр шулай икән, ни өсөн "Урал батыр" эпосы ла башҡорттарға ебәрелгән булмаҫҡа тейеш? Бик ихтимал. Әммә уны, кемдер тарафынан яҙылған әҫәр, тип әйтеү дөрөҫ түгел һәм хатта ояһыҙлыҡ та тиер инем. Һәр халыҡтың Хоҙай тарафынан билдәләнгән үҙ мәҙәниәте булырға тейешлеген танырға кәрәк. Ә "Урал батыр" - ул башҡорт халҡының ғына түгел, Башҡортостан мәҙәниәтенең бер өлөшө, боронғо халыҡтарҙың киләсәккә сәләме ул.

**➔ "Урал батыр"ҙы башҡа телдәргә тәржемә иткәндә төрлө мәғәнәүи хаталар китә. Ә иврит телендәгеһе ул хаталарҙан азат тип әйтә алаһығыҙмы?**

- Шекспирҙы аңлау өсөн уны төп нөхсәһендә уҡырға кәрәк. Бер филолог танышым Шекспирҙың 500 йыл буйы нәшер ителгән эштәрен тикшерә һәм һәр нәшер ителгән һайын уның үҙгәрештәр кисереүен асыҡлай. Хатта инглиз телендә! Йәғни, яҙыусы әҫәрҙәренең бөгөнгө варианттары төп нөсхәнән нык айырыла. Шуға, бары тик төп нөсхәлә генә хәҡиҡәтте, дөрөҫлөктө табырға мөмкин. Мин дә эпосты төп нөсхәнән, башҡортса текстан тәржемә иттем. Тик башҡорт телендәге һүҙҙәрҙең динамикаһы, уның тирбәлеше икенсе телдә бөтөнләй икенсе тирбәлеш ала, сөнки һәр телдең үҙенең үҙенсәлеге, тәьсире бар. Шуға ла, "Урал батыр" эпосын барыбер ҙә икенсе телдәргә бөтөн тулылығында ауҙарыу мөмкин түгел.

**➔ "Урал батыр" эпосын башҡорт халҡының йәшәйеш программаһы, тип атарға мөмкинме?**

- Эйе, һис һүҙһеҙ. Ул башҡорттарҙың ғына түгел, кешелектең рухи-әхлаҡи кодексы. Унда кеше үҙен нисек тоторға, нисек йәшәргә, башҡалар менән мөнәсәбәттәрен нисек төҙөргә тейешлеге яҙылған. Тәү сиратта, кеше яуызлыҡты ауыҙлыҡларға тейеш. Шүлгән яуызлыҡ яғына китеү сәбәпле, Урал батыр хатта үҙ туғанына ҡаршы сыға. Уны ғәфү итә, ҡабаттан бергә булырға тырыша, бары тик һуңынан ғына, ауыҙлыҡламай тороп, яуызлыҡты еңеп булмаҫын аңлай.

**➔ "Урал батыр"ҙа, һеҙҙеңсә, ниндәй һүҙҙәр лейтмотив булып тора?**

- Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,
Кеше булһын затығыҙ,
Яманға юл ҡуймағыҙ,
Яҡшынан баш тартмағыҙ!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

*ҠЫҪҠАСА*

## ӘҮҘЕМДӘР ҠАЙҘА?

✔Республиканың баш ҡалаһы Халыҡ мәшғүллеге үҙәге Өфөнөң бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү һәм уға ярҙам итеү ҡала фонды менән берлектә сираттағы эшҡыуарлыҡ эшмәкәрлеге нигеҙҙәре буйынса бушлай курстар ойоштора. Дәрестәр 6-17 февралдә уҙасаҡ. Курстарҙа һәр теләүсе ҡатнаша ала, шул иҫәптән дөйөм тәғәйенләнештәге дөйөм белем биреү учреждениеларында уҡыу тыйылмаған пенсионерҙар һәм инвалидтар.

✔Декабрҙә Башҡортостанда эшһеҙлек буйынса пособиеның уртаса күләме 4159 һум, йәки эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы дәүмәленән 46,3 процент тәшкил итте. Әлеге ваҡытта эшкә һәләтле халыҡ өсөн йәшәү минимумы 8982 һум тәшкил итә. 2016 йылдың октябрендә төбәктә уртаса эш хаҡы 27 217,6 һумға еткән. "Эшһеҙлек буйынса пособие алыусыларҙың өлөшө иң аҙы - 28,6, иң күбе 54,3 процент тәшкил иткән. 2015 йыл аҙағында - 26,3 һәм 53,1процент", - тип һөйләне Башҡортостан Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат секретары Роза Кузьменко. Былтырғы йыл аҙағына республикала 23,6 мең кеше рәсми рәүештә эшһеҙ тип иҫәпләнгән. Дөйөм алғанда, бер йылда төбәктең 49,2 меңдән ашыу кешеһе эшһеҙ статусын алған.

✔Әүҙем граждандарҙың проект инициативаларын тормошҡа ашырыу, йәмәғәтселекте Башҡортостандың социаль-иҡтисади үҫеше мәсьәләләрен хәл итеүгә ылыҡтырыу маҡсатында социаль проекттарҙы хуплау буйынса "Действуем вместе" тип аталған мини-гранттар конкурсы старт ала. Конкурстың грант фонды - 300 000, мини-гранттың максималь күләме 25 мең һум. Унда коммерция булмаған ойошмалар һәм берекмәләр, дәүләт һәм муниципаль ойошмалар, инициатив төркөмдәр һәм айырым кешеләр ҡатнаша ала. Конкурс волонтер хәрәкәтен үҫтереү; техник һәм ижади ҡеүәтте хуплау; балалар, үҫмерҙәр һәм йәштәр араһында ғаилә ҡиммәттәренә ихтирам тәрбиәләүгә йүнәлтелгән проект инициативалары; сәләмәт тормош рәүешен пропагандалаған яңы спорт саралары форматын индереү; ихатаrange ҙарҙы төҙөкләндереү йүнәлтелгән проект буйынса ойошторола. Ҡатнашыу өсөн февралдең 1-нән 15-нә тиклем заявка бирергә кәрәк. Уны электрон почта аша ебәрергә йәки алып барып тапшырырға, почта аша һалырға мөмкин (sonko rb@mail.ru ("Конкурс мини-грантов" иҫкәрмәһе менән), баҫма заявканы: 450009, Өфө ҡалаһы, Комсомольская урамы, 35; Өфөнөң "Ҡаланы үҫтереүҙең йәмәғәт фонды" социаль, мәҙәни, иҡтисади үҫтереү фонды).

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йүткереү

❖ Йүткереүҙе, пневмонияны мәтрүшкә дауалай. 75 грамм мәтрүшкәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм йылы көйөнә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда яртышар стакан эсергә. Пневмонияның ауыр формаһында бынан тыш тағы ла бер дауа ҡушып дауаланығыҙ. Эмалле һауытҡа 1 стакан ярҙырылмаған һоло һалып, уға 1 литр һөт ҡойорға ла, 1 сәғәт талғын утта бешерергә, һөҙөргә һәм аҡ май, бал өҫтәп, йоҡлар алдынан эсергә. Төнәтмәләрҙе көн һайын әҙерләргә.

### Юғары ҡан баҫымы

❖ Гипертония һәм йөрәктең ишемик ауырыуын дауалау өсөн сәтләүек ҡыуағы (лещина) япраҡтарын һәм тамырын тигеҙ өлөштә алырға. 1 ҡалаҡ ваҡланған япраҡ һәм тамырға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 2 сәғәттән һөҙөргә һәм көнөнә 3-4 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Хәл яҡшырғансы дауам итергә.

### Уратыусы герпес

❖ Уратыусы герпестан дауаланыу өсөн был урынға 10-12 көн буйына көнөнә 1-2 тапҡыр дегәнәк майы һөртергә. Аҙағынан яңы ғына һығылған һуған һуты менән эшкәртәһең.

### Стенокардия

❖ Көн һайын 3-4 ҡалаҡ ҡабаҡ орлоғон балға ҡушып ашарға.

### Тимрәү

❖ Тимрәү, ҡорсаңғы ваҡытында ҡуҙғалаҡтың тамыры һәм орлоғонан яһалған төнәтмә менән сылатып торорға. Бынан тыш, ҡуҙғалаҡты ваҡлап, ҡаймаҡ йәки һөт өҫтөнә ҡушырға, килеп сыҡҡан майҙы көнөнә бер нисә тапҡыр зарарланған ергә һөртергә.

### Бәшмәк

❖ Аяҡ йәки ҡул бармаҡтары араһында барлыҡҡа килгән бәшмәкҡә көнөнә 1-2 тапҡыр һөтләгән һуты (молочай) һөртөгөҙ. 1 литр ҡайнар һыуға үҫемлектең өҫкө өлөшөн һалып, 1 сәғәт төнәтергә һәм эҫе һыуға өҫтәп, йоҡлар алдынан 10-15 минут аяҡтарҙы йәки ҡулдарҙы тығып ултырырға.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БАШҠОРТ КЕЙЕМЕ

**Урта донъя арҡаның өҫкө өлөшөнән кейемдең итәгенә тиклем сағыла һәм ул Ерҙең үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһының байлығын һәм матурлығын күрһәтә.**

Сигеү, аппликация ярҙамында кейемдең ошо өлөшө үҫемлектәр, сәскәләр, йәнлектәр һыны менән биҙәлә. Түбәнге донъя - күлдәктең аҫҡы өлөшө, шулай уҡ аяҡ кейеме. Был донъя кешене ҡурҡыта, ундағы яуыз көстәр кешенең ғүмеренә, сәләмәтлегенә зыян килтерә, тип ышанғандар. Бигерәк тә йәш ҡатындарҙың кейеменә иғтибар бирелгән, сөнки милләттең киләсәге улар тыуҙырған һәм тәрбиәләгән һау-сәләмәт быуындың ҡулында. Шуға ла ата-бабаларыбыҙ ҡыҙҙарҙың һәм йәш ҡатындарҙың һаулығын һаҡларға тырышҡан. Шуның өсөн дә ҡатын-ҡыҙҙың кейеме ниндәйҙер мәғәнәгә эйә булған төрлө биҙәктәргә бай. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ, аяҡ кейеме - сарыҡтың үксә өлөшө аппликациялы биҙәктәр ярҙамында байытылған арҡалар менән ҡайылған. Биҙәктең төҫө лә үҙенсәлекле, ул, ғәҙәттә, ҡыҙылептәр һәм ҡыҙыл төҫтәге туҡыма киҫәктәренән яһала, ә ҡыҙыл төҫ һәр замандарҙа ла һаҡлаусы функцияһын үтәгән. Икенсенән, бындай композиция тоннелгә инеү йәки унан сығыуҙы хәтерләтә. Гүзәл Ҡазбулатова иҫәпләүенсә, боронғо кешеләр тормоштоң яралыуын шулай күҙаллаған. Икенсе донъяға үҙенсәлекле юл булараҡ ҡаралған түбән донъялағы был "ишекте" яһап, уны биҙәүҙең төп маҡсаты нәҫел-ырыуыңды һаҡлау, был донъяға яуыз көстәр үтеп инеүенә юл ҡуймау.

Түбәнге донъя менән йылға һәм күлдәргә мөнәсәбәт тә бәйле. Боронғо башҡорттар һыуға ике төрлө ҡараштә булған. Бер яҡтан, һыу - йәшәү сығанағы, икенсе яҡтан - һыу үҙенең юлындағы бөтөн нәмәне емерә ала. Башҡорттарҙың һыуға бындай мөнәсәбәте "Урал батыр" эпосында ла күренә. Урал батыр эскән күлдең һыуында күн күргән дейеүҙәр уны һәләкәткә килтерә, Урал батыр, күлдең һыуын эсмәгеҙ, тип кәңәш итә. Тик ерҙә эсәр һыу етмәй башлағас, кешеләр унын улдарына килеп, ярҙам һорай. Шул саҡта улар булат ҡылыстары менән тауҙы уйып, Иҙел, Яйыҡ, Нөгөш, Һаҡмар тигән йылғаларға баш бирә.

Башҡорттарҙың кейемендә йылғаны күлдәктең итәгенә теgелгән таҫма һынландыра. Таҫма урта һәм түбәнге донъя сигендә, был да халыҡтың һыуға мөнәсәбәте тураһында һөйләй.

Милли кейемдә кешенең социаль йәки ғаилә хәленә бәйле элементтар ҙа бар. Мәсәлән, кейәүгә сыҡҡан ҡатын-ҡыҙ ғына ҡашмау кейә алған. Иң тәүҙә баш кейеме күрһәтеп торған ҡатын-ҡыҙҙың ғаилә хәлен. Кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙҙың кейеме, башлыса, ҡашмауы ромб формаһындағы биҙәктәргә бай булған. Ромбтың оҙонса түңәрәктең эсенә урынлаштырыуы ла ихтимал. Оҙонса түңәрәк - йәшәйеш символы. Унын ромбҡа әүерелеүе - Ер менән Һауаның, ир менән ҡатындың ҡушылыуын аңлата. Йәшәйештең нигеҙе һәм асылы. Шуға ла ромб кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙҙың кейемендә генә осрай. Ә йәш ҡыҙҙар толом башланған ергә өсмөйөш ҡуя, был унын кейәүҙә булмауы билгеһе. Бүрөттәрҙә, мәсәлән, ҡыҙҙың кейәүгә сығырға әҙерлеген билбау урынына билдә уратып алған декоратив биҙәк күрһәтеп тора. Тывалар итәк осона оһондайыраҡ биҙәкле тар туҡыма тегеп ҡуялар.

Бөтөн был миҫалдар милли кейемдең халыҡ, унын донъяға ҡарашы тураһында мәғлүмәт йөрөтөүен күрһәтеп тора.

**Айгөл КАМАЛИЕВА.**
**"Башҡорт костюмы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ*

# БАЛАҒЫҘҘЫ...

## сит-ят кешенең һүҙенән һаҡлағыҙ

**Беҙ көн һайын беҙҙе уратып алған кешеләрҙең йоғонтоһона дусар булабыҙ. Хатта шәхси ҡарашыбыҙ, ҡылығыбыҙ ҙа кем тарафынандыр шунда уҡ ыңғай йә кире тигән баһа ала һала. Бигерәк тә бәләкәй балаларға, уларҙың әсәләренә көн юҡ һымаҡ тойолоп китә. Мәсәлән, магазинда йәки урамда бала ҡысҡырып илап ҡараһын әле, шунда уҡ: "Уй, ҡалай насар ҡыҙ!", "Тыңлашмаһаң, алып китәм", - тигән һүҙҙәр ташлаусылар табыла. Бала үҙен насар тотҡас, тәрбиәһеҙ һәм бында унын ата-әсәһе ғәйепле, тигән һығымталар яһала. Бындай осраҡта нимә эшләргә? Баланы бөтөнләй ят кешеләрҙең агрессияһынан нисек һаҡларға? Ошо һорауҙарға психолог Альмира ИСХАҠОВА менән яуап эҙләйбеҙ.**



- Йәмғиәттә йәшәгәс, кешеләрҙең күҙенән ҡасып булмай, был тәбиғи. Әммә балағыҙға сит-ят кешеләр тарафынан яһалған киҫәтеүҙәргә лә иғтибарһыҙ ҡалдырырға кәрәкмәй. Ғәҙәттә, кеше бит уйлап та тормай, бала ямғырлы көндә кейемен бысратһа ла, оялтырға ғына тора. "Әсәйенә эш булған, хәҙер ул кер йыуа инде! Ҡалай бысраҡһың!" - тигән күрше ҡатындан да баланы яҡлау мотлаҡ. Юғиһә, балала даими ҡурҡыу һәм оялыу тойғоһо барлыҡҡа киләсәк. Һуңғараҡ ул тиҫтерҙәренән үҙен яҡлай алмауы ла бар. Йәғни, һеҙ был осраҡта баланы үҙен яҡларға өйрәтәһегеҙ. Был хәлдең бер ҡурҡынысы ла юҡлығы тураһында күрше ҡатынға бала алдында әйтегеҙ.

Тормош булғас, төрлө ваҡиғалар ҙа була. Бала магазинда нимәләр һорап илауы бар. Сөнки бәләкәй балалар, өлкәндәрҙән айырмалы рәүештә, алдаша белмәй. Ул үҙен рәнйетелгән тойһа, илап та ебәрә. Бында ла сит кешенең ҡыҫылыуына юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Шулай ҙа баланы илауға тиклем алып барып еткермәҫкә һәр әсәйҙең хәленән килә. Минең ике йәшлек ҡыҙым бар. Магазинда ул быны, тегене һорай башлағанда әүрәтеп алып китә алам, әммә беҙ "Аленка" тигән шоколад һәм һут эргәһенән тыныс ҡына үтеп китә алмайбыҙ әлегә. Шуға ла уларҙың зарарлы булыуын белһәм дә, мин ул нәмәләрҙе алам, сөнки күҙ йәшенә алып барып еткергем килмәй. Әммә бала ҡысҡыра, илай башлай һәм берәй өлкән йәштәге кеше уға киҫәтеү яһай икән, был урындан тиҙерәк китергә тырышығыҙ.

Дөрөҫөн әйткәндә, сит кешенең һүҙҙәре, балаға ҡарағанда, унын атаәсәһенә күберәк тәьҫир итә. Бала аңламай ҙа ҡалыуы ихтимал, әммә балаһына тик яҡшылыҡ ҡына теләгән әсәй йәки атай уны үҙенең битенә төкөрөү итеп ҡабул итә. Әлбиттә, бала алдында һинә киҫәтеү яһауға, йәки уны нисек тәрбиәләргә өйрәтеүгә берәү ҙә ҡыуанмаясаҡ. Бындай осраҡта ҡаршы яуап бирмәй ҡалыуы ла ауыр, әммә негатив яуап реакцияһы хәлдә ҡатмарлаштырасаҡ ҡына. Бәхәсләшмәгеҙ, сөнки ике яҡ та үҙенең фекерендә ҡаласаҡ. Иң яҡшыһы, ишетмәгәнгә һалышығыҙ ҙа ҡуйығыҙ. Ғөмүмән, өлкәндәрҙең әйткәнен артыҡ күңелгә алырға ярамай.

Шулай ҙа бала кешенең әйткән һүҙенән ҡурҡып, тағы ла ныҡыраҡ илай башлауы бар. Был саҡта: "Мин һине яратам, бер кемгә лә бирмәйем, һин минең улым, минең ҡыҙым", - тип тынысландырығыҙ. Балалар илағанда һәр ваҡытта ла әшләй торған ысул ул - ҡосаҡлау. Күтәреп, ҡосаҡлап торһаң, шунда уҡ тынысланалар. Һеҙҙең тәрбиәгеҙҙең дөрөҫ түгеллеге хаҡында һеҙгә әйтергә тырышыусыларға яуап ҡайтара белегеҙ. Был баланы Хоҙай Тәғәлә һеҙгә биргән, һеҙ уны тәрбиәләргә тейешһегеҙ. "Баламды үҙемә тәрбиәләргә рөхсәт итегеҙ", йәки "Был һөйләшеү минә оҡшамай", тип әйтә алаһығыҙ. Бала алдында унын тураһында бөтөнләй һөйләргә ярамай икәнен беләһегеҙ, юғиһә ул был һүҙҙәрҙе ҡолағына һалып ҡуйып, аҙаҡтан үҙегеҙгә ҡаршы ҡулланыуы ихтимал. Баланың ҡылыҡтарына яһалған киҫәтеүҙәр баланың шәхесен кәмһетмәһен.

Ысынында иһә, балаларҙың холҡон күмәкләшеп кемдәр боҙа һуң? Кемдер ныҡ яратып, кемдер ҡатыраҡ тотам тип, үҙебеҙ, өлкәндәр, боҙабыҙ. Кемдер был нәмә ярай, ти, кемдер ярамай, ти. Улар бит фәрештә кеүек кенә, тупылдашып үҫеп киткәләр ҙә, тыңлашмай, алдаша башлайҙар. Бала ышанысты шәхес булып үҫһен, бәхетле, изгелекле, игелекле булһын өсөн уны бары тик яратырға кәрәк һәм ул һеҙҙең яратҡанығыҙҙы белергә һәм күрергә тейеш. Шул саҡта урамда, мәктәптә, бала урындарҙа унын шәхесенә ҡарата әйтелгән һүҙҙәрҙең әһәмиәте лә булмаҫ.

Әлбиттә, беҙ, башҡорттар, ҡырыҫыраҡбыҙ, баланы яратыуҙы күрһәтеп тә бармайбыҙ. Был дөрөҫ түгел. Бәләкәй баланы көнөнә, иң кәмендә, 12 тапҡыр ҡосаҡларға кәрәк, тигән ҡараш бар. Йәғни, һүҙҙәр арҡанан һөйөү, баштан, сәстән һыйпау кеүек тактиль саралар менән оҙатылырға тейеш. Шуныһы ла бар, бөгөн йәмғиәттә бала культы барлыҡҡа килде. Сөнки ғаиләләрҙә балалар әҙ. Уларҙы ҡурсаҡ кеүек кейендереп, кәрәкконгә-кәрәкмәгәнгә ҡыҫтырып, улар тирәләй әйләнеп йөрөйбеҙ. Өләсәй-ҡартәсәйҙәрҙә әйтеп тораһы ла түгел, уларҙың сикһеҙ һөйөүе баланы хаттин шаштырып ебәрә ҡайһы саҡта. Мәсәлән, күп кәнфит ашарға ярамай бит, тигәнгә: "Өйөгөҙҙә ярамаҫ, миндә ҡунаҡта саҡта ярай", - тип кенә ебәрәләр. Ата-әсәгә лә быға түҙеп, аҙаҡтан баланы кире үҙ тәртибенә өйрәтеп алырға тура ҡала.

Эйе, беҙҙең әсәйҙәр менән бөгөнгө әсәйҙәр, беҙҙең өләсәйҙәр менән бөгөнгө өләсәйҙәр бер түгел, быуындар ҙа үҙгәрә. Тик заман үҙгәрһә лә, бер ҡасан да үҙгәрмәй торған әхләҡ ҡанундар бар. Улар бөтөн диндәрҙә лә сағылыш тапҡан. Кешенекенә теймә, кешене рәнйетмә, кешегә зыян итмә, алдама тигән тәғлимәттәр бөгөн дә бала тәрбиәләгәндә үҙәктә торорға тейеш. Йәшәйештең тәү күҙлеккә ошо ябай ғына ҡанундарын иҫегеҙҙә тотһағыҙ, бала тәрбиәләүҙә яңылышмаҫһығыҙ. Ғаиләм - ҡәлғәм, ти халыҡ мәҡәле. Кемдәндер ғаилә эшенә бер кем дә ҡыҫыла алмай. Башҡаларға ла ҡыйыу рәүештә ошоно әйтә алаһығыҙ.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ЙӨҘӨРГӘ ӨЙРӘН



Маргиналдар - үҙенә күрә бер милләт ул. Улар этник тамырҙарҙы, сәйәси йүнәлештәрҙе, дине, йыш ҡына кешелек ҡиммәттәрен инҡар итеүсе ҡатлам. Нимәләр тәҙөү, барлыҡҡа килтереү, ниҙер өсөн көрәшеү - уларҙың эше түгел, сөнки улар бөгөнгө көн менән йәшәй. Маргиналдарҙың лозунгы - глобаллашеү, сөнки глобаллашеү үҙенең үҫешендә маргинал булмышына бик ҡамасаулаған төрлө милли, дини, хатта дәүләт сиктәрен танымай. Маргиналдар - рокн-ролл музыка сәнғәте йүнәлеше кеүек, милли традицияларҙан мәхрүм булған аң зәғифлеге миҫалы.

Маргиналлыҡтың ҡурҡыныс яғы нимәлә? Ул тормошонда үҙ урынын тапмаған, йәшәйешендә дини һәм милли традицияларына таянмаған кешеләрҙе йәлеп итә. Рәсәйҙә ул, бер яҡтан, рус милләтенә кире йоғонто яһап, уны маргинал милләткә әүерелдереү ҡурҡынысы тыуҙырһа, икенсе яҡтан, рус булмаған халыҡтарға милләт буларак бөтөнләй юғалыу ҡурҡынысы менән янай. Маргиналлашыу, глобаллашеү кеүек үк, туҡтатып булмай торған процесс. Үҙ асылын һаҡлап ҡалам, тигән халыҡ, беренсенән, заманса интеграция юлын табырға, икенсенән, милли исем-атамаларын һаҡлау яғын ҡарарға тейештер, тип уйлайым. Был йәһәттән, һуңғы ваҡытта яңы тыуған балаларға боронғо исемдәрҙе ҡушыу күренешен ыңғай баһалайым. Халыҡты шәхестәр күтәрә. Бер кем дә, мәсәлән, дәрәжә һәм абруй яулаған шәхестәре булмайынса, башҡортҡа "ҡурайыгыҙ моңло, тарихығыҙ бай", тип кенә ихтирам күрһәтмәйәсәк. Аламамы, яҡшымы, маргиналлыҡ, йәғни донъя кимәлендәге маңҡортлоҡ - тәбиғи процесс. Минеңсә, һыу баҫып барғанда йүгереп йөрөп ҡалҡыулыҡ эҙләгәнсе, йөҙөргә өйрәнеү мөһимерәк.

**Алмаз ТИМЕРБАЕВ.**

✓ *Монгол-татар яуы башланғанға тиклем Табын ханлығы иң ҡеүәтле дәүләттәрҙең береһе һаналған. "Һөйләүҙәренсә, Табын ханлығы һөҙөмтәлә ун ете ағай-ҡусты араһында ете ырыуҙан торған табындарға бүленгән.*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# АТАМАЛАРҘА - ХАҠ ТАМЫРҘАРЫБЫҘ

**Тарихты архивтарҙағы документтарҙа, боронғо китаптарҙа, археологик ҡаҙылма материалдарында ғына түгел, ә ер-һыу, тау-ҡая, ауыл-ҡала атамаларында ла эҙләү фарыз. Оҙаҡ йылдар үҙебеҙҙең мең ырыуы башҡорттары йәшәгән Әлшәй, Дәүләкән, Миәкә һәм башҡа төбәктәрҙең топонимик атамаларын өйрәнеү миңә халҡыбыҙҙың тарихына бәйле күп биттәрҙе асырға, асыҡларға ярҙам итте. Гәзит уҡыусыларға үҙемдең эҙләнеүҙәремдән ҡайһы бер мәғлүмәттәрҙе еткереүҙе дауам итәм.**

Иҙеүкәй эпосында килтерелгән тағы бер боронғо һүҙ - **солан**. Беҙҙең бөгөнгө ҡәҙимге телдә салауат күпере, йәйғор тигәнде аңлата. Күсеп йөрөгән халыҡтың йәйге торлағының түбәһе тишек булып, йәйғор йәки солан ҡалҡһа, күренеп торған. Тора-бара солан һүҙе менән өйгә терәп яһалған ҡаралтыны атай башлайҙар, сөнки тәүҙә унын да түбә башы булмай, был һүҙ бөгөн дә ҡулланылышта йөрөй. Оло бабайҙар иҫән ваҡытта беҙҙең ауылда шундай лөғәт йөрөй торғайны: Мәкәшкә килеп урынлашҡан типтәрҙәргә лә өйҙәрен солан тәртибе менән, осло түбәле итмәйенсә урынлаштырыу шарты ҡуйылған булған. Быныӊ сәбәбен, улар башҡаларҙан айырылып тормаһындар өсөн, тип, үҙҙәренсә аңлаталар ине. Күрәһең, улар иртә яҙҙан килеп урынлашҡан булғандыр, ә, бәлки, бында сәбәп төптәрәк - генетик хәтерҙә булғандыр: боронғо Çубый башҡорттары үҙ булмышында һәм телмәр мифологияһында һаман да солан традицияһын һаҡлап килгән булған бит. Солан-йәйғор образы башҡорт көнкүрешендә бөгөн онотолоп бөткән ырым- йола, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең мифологик ишараһын сағылдырып, был ғәмәл башҡорттоң тәңрелек заманынан уҡ килгән булыуы мөмкин.

**Алаҫ** (рус телендә - алач) - Яйыҡ-мендәрҙең ораны. "Ут" тигән мәғәнәлә. Хакас халҡында "алас" тигән һүҙ - "окуривание травой", шулай уҡ ут мәғәнәһендә. Ҡара ҡайындың мендәрҙә өтәҫләү ғәмәлендә ҡулланылғанын иҫәпкә алғанда, "алаҫ" һүҙе ошо ғәмәлдән оранға әйләнеп китеүе мөмкин. Унан ҡала, көнсығыштан Мәкәшкә алыҫтан уҡ күренеп ятҡан, халыҡ йырҙарында йырланған Сағылтауҙар үҙ заманында билгетауҙар булған. Уларҙың башында алдан әҙерләнеп ҡуйылған усаҡтар тоҡандырылып, янған ут алыҫтан күренеп торған һәм усаҡтар һанына ҡарап, уларҙың шартлы сигналдарын белгәндәр. Бына ошо осраҡтарҙа ла "Алаҫ!" (Ут!) ораны яңғыраған. Ошоға өҫтәп, йәнә бер фараз тыуа - мендәрҙең ырыу ағасы ҡайын икәнен беләбеҙ, ҡара ҡайындың Яйыҡ - çубыйҙарҙа ни тиклем һөйөклө ағас булғанын да иҫәпләһәк, ырыу ағасы бына ошо ҡара ҡайын булыуы ла мөмкин.



Унан ҡала, әгәр **çанай** һүҙе менән йәйә-ҡорал аталған икән, был çанай ошо ҡара ҡайындан яһалыуы мөмкин һәм ҡайын тураһындағы ҡәтғи тыйыуҙар ҡоралға мохтажлыҡтың асылын сағылдыра булһа кәрәк. Шуға ла Күк батырҙың çанайы күктең соланы ("күк соландай") - йәйғор менән сағыштырылалыр, тимәк, был ҡорал ифрат ҡеүәтле булған һәм шундай уҡ ҡеүәтле батырҙарҙың химаяһын тәшкил иткән. Ташлы һәм Мәкәш ауылдарында борон-борон замандарҙа Çанай менән Шайтан шарҙарынан ҡара-ҡаршы уҡ атышҡандар, тигән риүәйәт әле лә йөрөй. Бер-береһенән хәтһеҙ генә арала урынлашҡан был шарҙарҙың береһенән икенсеһенә уҡ осоп барып етерлек булғас, беҙҙең бөгөнгө фиғел менән дә был йәйәләрҙең һәм батырҙарҙың ҡеүәтен тойомлап була. "Иҙеүкәй һәм Мораҙым" эпосында ун ике тотам уҡ тартҡан оҙон ҡуллы ырыу батырҙары телгә алына, бындай уҡтарҙың оҙонлоғо беҙҙең үлсәмгә әйләндергәндә өс метрҙан да кәм булмаған. Йәнә, йүнәлеште дөрөҫ (тура) бирер өсөн уҡтың ҡойроғона ҡарға ҡоштоң, йә булмаһа шоңҡар, ҡарсыға ҡоштоң йөн-ҡаурыйы ҡулланылған, бындай уҡтар "сәрпи уҡ" тип аталған. Мәғәнәһе - йыраҡтан ала торған уҡ. Мәҫәлән, Иҙеүкәйгә дуҫы Ыласын былай ти: "Ҡара бөркөт йөнөнән әҙерләнгән уҡ һиңә!" Ә "Һунғы һартай" үҙенең улы Ҡармасандың мәргәнлеген бына нисек белдерә: "Үҙ ғүмерендә унын алты ғына уғы яҙа китте. Ул егет ине". Ниндәй йәйәләр кәрәк булған бындай уҡтарҙы осорорға, күҙ алдына килтереп була. Мендәрҙең бына шундай йәйәләре çанай тип аталғандыр ҙа. Ә бына Аҡ урҙа ханы Туҡтамыштың уғы туғыҙ тотам тип билдәләнә.

Үҙ заманы өсөн Çанай һәм Шайтан шары тирәләрендә ысынлап та дәһшәтле алыштар булғандыр, шуға ла халыҡ хәтере был хәлдәрҙе ныҡ беркеткән һәм бөгөн дә был турала риүәйәттәр йөрөүе ошо әхүәлдәрҙең сағылышы. Ошо урында бер нәмәне билдәләп китеү урынлы һымаҡ. Күп халыҡтарҙың легендаларында, әкиәттәрендә эльфтар тураһында һөйләнелә. Улар оҙон аҡ-һары сәсле, ҡеүәтле уҡсылар, һунарсылар икәне билдәле. Башҡорт Мең (Мин) шәжәрәләрендә Сәсле атамаһы ҡулланылып, күп тармаҡтарҙың сығышы һәм дауамдары килтерелә. Шәжәрәләрҙә Сәсле-Ата тигән дәрәжә-исем дә бар, миндәрҙең Çубыйҙар тармағы үҙен туранан-тура Сәсле дәрүиш тармағы итеп билдәләй һәм тарихсылар быны инҡар итмәй, эпостар, урын, ер-һыу атамалары был әхүәлде тәкрарлап, быуаттар буйы һаҡлап килә. Сәсле Ата тоҡомонан Төкләҫ баба быуындары төгәлерәк яҙылған, бында башҡа ҡәүем шәжәрәләре лә мәғлүмәт ҡалдыра - Юрматы, Ҡыпсаҡ, Тамъян, Байлар, Бүләр улысы, ирәктеләр шәжәрәләрендә (төрлө шәкелдә яҙылған булһалар ҙа) Сәсле-Ата эҙҙәрен төҫмөрләп була. Сәсләләр ҡәүеменән айырмалы, сәсһеҙ йөрөгән ҡәүемдәр "таҙ" (таҙа) атамаһын йөрөткән. Был һүҙ беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып, төрлө сәбәптәр менән сәсе үҫмәгән кешене таҙ (таҙа) тип атау ғәмәле бар. Тимәк, Сәсле-Ата, Төкләҫ баба исеме менән Çубый Мең шәжәрәләрендә билдәләнеп килгән оҙон сәсле тоҡомдарҙың ҡоралы булған çанай. Ошондай ҡеүәтле йәйәнән йыраҡтарҙан атып алыр өсөн кәрәк булғандыр ун ике тотам сәрпи уҡтар. Ә бына яҡындан ала торған ҡыҫҡа уҡтарҙы **тәлтермәҫ** тип йөрөткәндәр. Иҙеүкәй эпосынан: "Тәлтермаҫ тигән йүгерек уҡ батырға яуҙа иш булмаҫ". Бындай уҡтарға çанайҙар кәрәкмәгән инде, бында талдан яһаған йәйәләр ҙә ғәмәлгә ярағандыр.

**Тутыя** - тамъяндарҙың ораны. Тутыйғош мәғәнәһендә килә, күрәһең, инә ҡошто шулай атағандар. "Иҙеүкәй һәм Мораҙым" эпосында Иҙеүкәйҙең атаһы (йә булмаһа, оло бабаһы) Ҡотлоно Туҡтамыш хан язалай. Был әхүәл бөтә варианттарҙа ла һөйләнелә. Сәбәбе - Ҡотлоноң Аҡһаҡ Тимер кешеләренә йәшерен рәүештә Туҡтамыштың һунар ыласыны йоморткаһын бирреп ебәреүе була. Ә бына беҙҙең ауылда ошоға оҡшаш риүәйәтте былай һөйләйҙәр ине: "Мендәрҙең шундай бер ырыу сере булған, ул сер тутыйғош (попугай) йомортҡаһының эсенә йәшерелгән һәм уны бик ныҡ һаҡлағандар. Бер-береһен киҫәтеп торор өсөн "Тутыя" тигән оранды гел әйтә торған булғандар, ә мәжлестәрҙә, йыйындарҙа, халыҡтың уртаҡ бер сәләме булып, ырыуға үҙҙәрен йәбештереү ысулы ла булған". Иҙеүкәй эпосында ошондай юлдар бар: "Ал тәхетнең арҡаҫы алтын еғаҫ (ағас), тутый ҡош çайрап телгә килгәндә...". Йәнә шундай юлдар: "Ҡуш ҡанатлы алтын таж, күҙ урынында гәүһәр таш, Сыңғыҙҙан килгән дәүләт ҡош бу башымда түгелме?" Әгәр дәүләт ҡошто дәүләт гербы тип иҫәпләһәк, тутыя ҡош образы (өрәге) Сыңғыҙ хан дәүеренән килгән, бәлки, унын тарафынан тамъяндарға тәғәйенләнгән оран булыуы мөмкин. Шәжәрәләр башҡорт ырыуҙары үҙ-үҙҙәрен минлекләһен өсөн Сыңғыҙ тарафынан тәғәйенләнгән ырыу билдәләре (тамға, ағас, ҡош, орандар) тураһында мәғлүмәт ҡалдырған.

Беҙҙең яҡтарҙа Тутыя тигән ҡатын-ҡыҙ исеме лә йыш осрай ине элегерәк, хәҙер был исем юҡтар рәтендә. Тамъяндар бик күп тарафтарҙы биләгән Мең (Мин) ырыуының айырымланып киткән бер тармағы, тип фаразларға нигеҙ бар, был фаразды шәжәрәләрҙәге уртаҡ тамырҙар күрһәтеп үк тора. Сыңғыҙ дәүерендә мендәрҙең хакимы (бейе) Ураҙас булыуы билдәләнә, ә тамъяндарҙың шәжәрә сылбыры һуңғараҡ ваҡыттарҙан башланған һәм уларҙың хакимы (бейе) Шәғәли бей тип билдәләнә. Бында өҫтәмә эҙләнеүҙәр талап ителә.

**Ҡорған** - ерҙән өйөп яһалған ҡоролма. Ғәҙәттә, ҡоролмалар билдәле кешеләрҙең ҡәбере өҫтөнә өйөлгән булған, бөгөнгө ҡулланылышта был һүҙ курган шәкелендә йөрөй. Иҙеүкәй эпосында шундай юлдар бар: "Ҡара тейен Алыпты гүр ҡаҙытып күмдерҙе, гүре ҡорған тау булды..."

**Зир** - аҡыл, зиһен. " Зир ҡәҙерен зирәк белер, ир ҡәҙерен ир белер", ти Мораҙым батыр эпоста.

**Ҡу күле** - аҡҡош күле. Был һүҙ "Иҙеүкәй менән Мораҙым эпосында бар. Аҡҡош күле бөгөнгө Балтас районында бар, икенсе урындарҙа ла барҙыр был атама.

**Кир** - мамонт, киртеш- мамонт теше.

**Клара ХӘМИҘУЛЛИНА.**

**(Дауамы. Башы 2-се һанда).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### ХАНЛЫҠТАР

### 1.Табын ханлығы

Майҡы бейҙең улдары һәм ейәндәре халыҡтың төрлө өлөштәре менән хакимлыҡ иткән. Унын Ҡаратабынбей улы, өлкән ул хоҡуғы буйынса, Иртыштағы ата йорто менән идара иткән һәм үҙ ҡулы аҫтындағы, хәҙерге заманда көньяҡ Уралдың көнсығышындараҡ йәшәгән ҙур төркөм башҡорттарға үҙенең исемен ырыу атамаһы итеп биргән. Монгол-татар яуы башланғанға тиклем Табын ханлығы иң ҡеүәтле дәүләттәрҙең береһе һаналған, ул Дәште Ҡыпсаҡ ырыуҙар берләшмәһенә ҡараған. "Һөйләүҙәренсә, Табын ханлығы һөҙөмтәлә ун ете ағай-ҡусты араһында ете ырыуҙан торған табындарға бүленгән. Ул ырыуҙарҙан волостар һәм ер дачалары барлыҡҡа килгән", - тип яҙа М. Өмөтбаев. "Табын ханлығының тарҡалыуы, күрәһең, башҡорт тарихының Алтын Урҙа осорона тап килә", тип яҙа Р. Буканова. Өмөтбаевтың раҫлауына ярашлы, башҡорттар хандарын үҙҙәре араһынан һайлап ҡуйған. Болғар хандарының яҙмышы ла күп осраҡта башҡорттарға бәйле хәл ителгән. Шундай бойондороҡһоҙ башҡорт хандарының береһе Ялман бей Аҡташ тауында йәшәгән. Ул был ерҙәрҙә Урал ҡалаларына һәм Һаҡмар йылғаһына тиклем хакимлыҡ иткән. Унын биләмәһендә йәшәүселәр, бигерәк тә Ағиҙел буйында йәшәүсе башҡорттар үҙҙәренең малын Урал һәм Һаҡмар йылғалары тигеҙлектәренә тиклем ҡыуған, ҡышларға урман-тауҙар араһына, Ағиҙел буйҙарына ҡайтҡан. Мәҫәлән, йомран-табын, бишул-табын башҡорттары иртә яҙҙан малдарын Ырымбур, Һамар губерналарының Кәмәлек, Туҡ йылғалары буйҙарына ҡыуып, Ағиҙел буйындағы Аҡташ тауы янына ҡышларға ҡайтҡан.

Әммә ерҙәрҙең генераль бүленешенә ярашлы, йомран, аҡташ, бишул башҡорттары Туҡ, Кәмәлек буйҙарында, хатта Урал ғәскәре ерҙәрендә тороп ҡала. Унда айырым кантон идаралығы булдырыла. Тимәк, ҡасандыр Аҡташ хандарының ерҙәре Урал аръяғының Дәште Ҡыпсаҡ биләмәләренә тиклем һуҙылған. Тарихи материалдарҙан шул асыҡлана, хатта табындарҙың үҙ ханы булған бер ҡәбиләһенең үҙ дәүләтселеге булған. Мәҫәлән, тарих фәндәре докторы Р. Ғ. Буканова, төрлө сығанаҡтарға, бигерәк тә XII быуатта йәшәгән ғәрәп географы Әл Иҙрисиның Берлинда баҫылып сыҡҡан "Славяндар һәм скандинавтар" тигән китабына таянып, XI-XIII быуаттарҙа башҡорттарҙың Табын ханлығы булғанлығын, ул ханлыҡ менән XIII быуатта Майҡы бей идара иткәнен иҫбат итте. Башҡорттарҙың иртә быуаттарҙа дәүләт ҡоролоштары, ханлыҡтары булғанлығын, әммә берҙәм дәүләткә ойоша алмауы хаҡындағы фекерҙе Д.Ж. Вәлиев, Н.А. Мәжитов, В.К. Сәмиғуллин хуплай. Барыбер ҙә был факт өйрәнеп бөтөлмәгән. Табын ханлығын башҡорт дәүләтселеге булараҡ XIX быуатта М. Өмөтбаев өйрәнгән, тинек. Р. Буканова фекеренсә, унын яҙғандары башҡорт шәжәрәләре мәғлүмәттәре менән тап килә.

**(Дауамы бар).**

# СӘХРӘЛӘРҘӘ ҡалалағы

**Был юлы ауылдарҙа йәшәгән ижади шәхестәребеҙ менән аралашып алырға ниәт иттек һәм уларға һорауҙарыбыҙҙы юллап, уларҙан яуаптар алдыҡ. "Ситтән тороп диалог"та ҡатнашыусы Әбйәлил районы Ҡырҙас ауылында йәшәүсе яҙыусы Иҙрис НОҒОМАНОВ, Учалы районы Иманғол ауыл хакимиәте башлығы, шағир Фәнил БҮЛӘКОВ, Салауат районынан күп балалы әсә, журналист Гөлшат ХАЖИЕВА менән әңгәмәбеҙ ауыл тормошо, ауыл мәшәҡәттәре тураһында булыр.**

**▸ Үтеп киткән йыл эсендә илдә, республикабыҙҙа, йәшәгән районығыҙҙа, ауылығыҙҙа һәм ғаиләгеҙҙә телгә алырҙай ниндәй ыңғай үҙгәрештәр, ҡыуаныслы ваҡиғалар булды?**

**И. Ноғоманов:** Күрер күҙ менән ишетер ҡолаҡҡа үҙгәрештәре лә, яңылыҡтары ла байтаҡ инде ул. Иғтибарлы булыу ғына кәрәк. Мин үҙем матбуғат баҫмаларын, телетапшырыуҙарҙы, интернетты күҙәтеп барам. Ил, республика, район кимәлендә ыңғай үҙгәрештәр менән бер ҡатарҙан киреләре лә күп булыуы эсте бошора. Юлдарҙың таҡырлана барыуы, төҙөлөштөң гөрләп тороуы, яңы технологиялар үҫеше һөйөндөрә. Ауылыбыҙ менән ғаиләбеҙгә килгәндә иһә, һайлауҙар һөҙөмтәһендә хакимиәт башына йәш, энергияһы ташып торған шәп егет килеүе бер өмөт уята. Ҡыҙым ейән бүләк итеп ҡыуандырҙы. Хәҙер инде ун дүрт ейән-ейәнсәргә олатай булынды. Ш. Бабич шиғырҙарын яттан һөйләп, Гөлли Мөбәрәкова ҡулынан мәртәбәле шәһрәтнамә алып ҡайтҡан туғыҙ йәшлек ейәнсәрем Ләйлә әле яңыраҡ Республика ярышында ҡыл-ҡумыҙҙа уйнап, дипломға лайыҡ булды.

**Ф. Бүләков:** Тормош, эш мәшәҡәттәре менән ыңғай үҙгәрештәрҙе, ҡыуаныслы ваҡиғаларҙы баһаларға ваҡыт та етмәй ҡала ҡайһы саҡта. Әммә күңелде күтәргән мәлдәр етерлек булды уҙған йылда. Ауыл хакимиәте башлығы булараҡ, биләмәлә башҡарылған ыңғай эштәр һөйөндөрә. Һәр хәлдә, былтыр район, республика ярҙамын даими тойоп йәшәнек.

Ғаилә - ул ҡәлғә тигән әйтемгә тоғро булып йәшәргә тырышабыҙ. Кәләшең, балаларың эргәһенә ҡайтһаң, бөтөн арыу, күңел борсоуҙарың һыпырып ташлағандай юҡҡа сыға. Ике өлкән ҡыҙым мәктәптә яҡшы ғына уҡып йөрөй, кесеһе балалар баҡсаһына йөрөй башланы. Кәләшем Зөһрәнең эше лә еңелдән түгел. Ул шәфҡәт туташы, ҡатмарлы операцияларҙа ҡатнаша. Эргәләге Учалы ҡалаһына көн дә йөрөп эшләй. Берберебеҙҙең мәшәҡәтле, тынғыһыҙ вазифаһын аңлап йәшәргә тырышабыҙ, киләсәктә лә гел шулай ғына булһын, тип торабыҙ.

**Г. Хажиева:** Бар кимәлдәге яңылыҡтарҙы, ваҡиғаларҙы күҙәтеп, уҡып барам. Хәбәрҙәрҙә негативтың күберәк булыуы борсой. Улар араһында яҡшылары юғалып ҡалғандай һәм тиҙ онотолғандай. Ҡапыл ғына береһе лә иҫкә төшмәй, тик хәүефлеләре генә һәр ваҡыт күҙ уңында: Украина, Сирия, көрсөк, эш хаҡтары кәмеү, инфляция, фажиғәләр, кеше үлемдәре... Америка менән Рәсәйҙең арҡалашыуы ни менән бөтәр - бар донъя көтә, шунһыҙ хатта кеше киләсәгенә күҙаллау ҙа яһай алмай. Дөрөҫ әйткәндәр, әҙерәк бел, ҡаты йоҡларһың, тип. Илдәге хәлдәрҙе уйлап, ҡайһы берҙә төн йоҡламай сығаһың.

Республика кимәлендә, әлбиттә, матур-матур ваҡиғалар булып тора, минең иғтибарҙы йәлеп иткәне - белемле йәштәр күбәйә, улар әүҙемдәр, матур эштәр атҡаралар. Миңә, мәҫәлән, үткән көҙ Өфөлә үткән "Өфөфорум" милли йәштәр форумы оҡшаны. Уның сиктәрендә ниндәй матур стартаптар һулыш алды, аңлы һәм айыҡ йәшәргә тырышҡан, йәмғиәткә файҙалы булырға ынтылған йәштәр бөтмәҫ дәрт-дарман, илһам алғандыр ундағы әңгәмәләрҙән. Бик матур сығыштар булды унда. Мәсьәлә дөрөҫ һәм ваҡытлы ҡуйыла: йәштәрҙе мотлаҡ йүнәлтергә, уларға юл күрһәтергә кәрәк, бик мохтаждар бит улар быға. Был йәһәттән бик файҙалы башланғыс булды был мәғариф форумы.

Район хәлдәренән мине, көрсөккә ҡарамаҫтан, район үҙәге Малаяҙ дауахана-поликлиникаһында төҙөкләндереү эштәре алып барылыуы ҡыуандыра. Әле генә яңыртылып, балалар бүлексәһе асылғайны, хәҙер заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған эндоскопия бүлеге асылырға тора. Тимәк, халыҡ алыҫҡа йөрөмәйенсә, кәрәкле диагностика- дауалауҙы урында алыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ.

Үҙебеҙҙең ғаилә тормошона килгәндә, уртансы балабыҙ - ҡыҙыбыҙҙың уҡырға төшөүе үҙенсә мөһим ваҡиға булды. Уның бик тә мәктәпкә барғыһы килә ине. Атаһы менән беҙ ҙә быға бик шатбыҙ. Шулай итеп, ике балабыҙ мәктәп уҡыусыһы хәҙер, уларға ҡарап, дүрт йәшлек улым да, мәктәпкә барам, тип башты ҡатыра. Апаһы артынан хәреф, һандарҙы өйрәнә.

**▸ Ауыл шарттарында тормош, ғәҙәттә, һәүетемсә бер көйгә генә үтә тора, ә күңел тигәнең яңылыҡ, үҙгәреш, ҡыуаныслы ваҡиғалар көҫәй. Рухи ихтыяждар көндәлек күнегелгән шарттарға "бикләнеп" кенә йәшәй аламы - был ҡаршылыҡты нисек хәл итергә өйрәндегеҙ?**

**И. Ноғоманов:** Ауыл ерендә йәшәһәм дә ниндәйҙер билдәле шарттарға "бикләнеп" ятырға форсат юҡ. Хаҡлы ялда булыуға ҡарамаҫтан, эш йырып сыҡҡыһыҙ. Райондың "Йәйғор", Урал аръяғының "Ҡуңыр буға" әҙәби ойошмалары гөрләп эшләп тора. Шуларҙың эсендә ҡайнашабыҙ. Йәш һәләттәрҙе асыҡлайбыҙ, башлап яҙыусы олораҡтарына ярҙам итәбеҙ. Ләйлә ҡыҙымды көн аша тиерлек шәхси машинамда район балалар сәнғәт мәктәбенә алып йөрөйөм. Моңло, һәләтле бала. Ошоларҙан сығып, шуны әйтмәксемен: ижад кешеһе үҙ-үҙенә бикләнеп һис йәшәй алмай, тейеш тә түгел.

**Ф. Бүләков:** Күңел яңылыҡ, үҙгәрештәр көҫәмәһә, йәшәүҙең мәғәнәһе лә булмаҫ кеүек. Бер төрлөлөк ялҡыта. Шуға ла төп эштән башҡа төрлө өлкәлә үҙеңде һынап ҡарарға кәрәктер, тип уйлайым. Мәктәптә шәмбе көн балалар уҡытам. Уларға үҙем белгәндәрҙе төшөндөрөргә тырышам. Шулай уҡ "Берҙәм Рәсәй" партияһының Учалы районы буйынса ревизия комиссияһы, Учалы район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты ағзаһы булып торам. Кешеләр менән көндәлек аралашыу, һорауҙарына яуаптар биреү, хәлдәренә инеү күңелгә ҡыуанысын да, борсолоуын да өҫтәй. Күңелдә "бер көйҙө" генә көйләтмәү өсөн миңә ижад ярҙамға килә. Шиғриәттең мең төрлө моңло ҡылдары күңелгә боҙланырға бирмәй, матурлыҡтан биҙҙермәй. Ауыр саҡта йәшәргә көс бирә. Интернет селтәре лә аралашыу даирәһен арттыра. Ижадымды хөрмәт итеүсе төркөмдәштәрҙең мендән ашып китеүе һөйөндөрә.

**Г. Хажиева:** Бөтә нәмә рухи ихтыяжыңа бәйле бит. Минеке иһә йыһан киңлегендәй! Күңел һәр ваҡыт яңылыҡ, үҙгәреш, төрлө ҡыуаныслы ваҡиғалар көҫәй, һеҙ әйтмешләй. Минең һәр нәмәлә эшем бар, һәр нәмәлә ҡатнашлыҡ итергә ынтылам. Был һыҙатым миңә йәшәйештә ҡайсаҡ ҡамасаулай ҙа, кеше менән араларҙы ҡатмарлаштыра, күптәр миңә һағайып ҡарай. Ләкин булмышыма йоғонто яһай алмайым әлегә. Үҙемә генә бикләнеп йәшәп булмай шул. Интернет ярҙамға килә бер аҙ. Ләкин виртуаль донъя реаль тормошто алыштыра алмай, күңел ихтыяждарын ҡәнәғәтләндермәй, быны икенсе төрлө хәл итеү юлдарын эҙләүҙән туҡтамайым.

**▸ Ҡала менән ауыл мөхитен сағыштырып ҡарарға тура килгәне бармы? Күңел ҡайһы тарафҡа тарта һәм ни өсөн? Күңел торошон үҙгәртеү өсөн йәшәгән ереңде, тышҡы шарттарҙы алыштырыу мотлаҡмы һәм, ғөмүмән, күңел яңырыуы, күңел бөтөнлөгө хаҡына ниҙәр эшләргә була, тип уйлайһығыҙ?**

**И. Ноғоманов:** Әлбиттә, ҡала менән ауылды сағыштырып ҡараған бар. Тик күпме генә сағыштырма, өҫтөнлөк һәр саҡ ауыл яғында. "Таланттар ауылда тыуа", тип тиккә генә әйтмәгәндәрҙер. Бигерәк тә Һаҡмар буйындағы дүрт яҙыусы сыҡҡан ҡырҡ өйлөк тыуған ауылым Әхмәт менән ғорурланам. Ҡалаға барһам, бер көн эсендә ялығып ҡайтам. Ғүмер баҡый ҡалала йәшәп, бөтә булған буш ваҡытын, ялын ауыл ерендә үткәреп тә, шул ауыл кешеһен кәмһетергә тырышып, һауалы мөнәсәбәт күрһәткән бәғзе ҡала әҙәмдәренә аптырайым. Мәңге бер нисә квадрат метрҙа бикләнеп ултырған бәндә сәхрәләрҙә йәшәгәндәр хәлен аңлар кимәлдә түгелдер ул...



**Ф. Бүләков:** "Ауылды маҡта ла, ҡалала тор", тигән әйтем бар ул барлыҡҡа. Беҙ иһә, ҡаланы маҡта ла, ауылда тор, тибеҙ. Беҙҙең ауыл, әлбиттә, Учалы ҡалаһы янында ғына. Көньяҡ микрорайонынан йылғасыҡ ҡына айырып тора. Беҙ, иманғолдар, хәҙер яртылаш ҡала, яртылаш ауыл кешеләре, тиһәң дә була. Шулай ҙа һуңғыһы күңелемә яҡыныраҡ. Баҡса, ҡош-ҡорт, мал тыуар ҡарау, ҡышҡыһын мейескә ут яғыуҙар, ҡар көрәүҙәр - ауылда бер ҡасан да буш тормайһың.

Әлеге мәлдә беҙгә ауылда йәшәү уңайлы. Дөйөм белем биреүсе мәктәп тә, музыка мәктәбе лә эргәлә. Балалар ҡараулы, олатай-өләсәйҙәр - янымыҙҙа. Улар тәрбиәһе лә бик мөһим балаларға. Башында булған, дөрөҫ тәрбиә алған бала ҡала ерендә уҡыһынмы, ауыл ерендә булһынмы, тормошта юғалып ҡалмаясаҡ.

Күңел торошон үҙгәртеү өсөн йәшәгән ереңде, тышҡы шарттарҙы алыштырыу мотлаҡмы, тип һорайһығыҙ. Шартына ҡарап, кешенең тышҡы ҡиәфәте, үҙен тотошо ғына үҙгәрәләр ул, тип уйлайым. Ҡайһы бер кешене аҡса, власть, төрлө тормош шарттары үҙгәртә лә кеүек. Әммә, минеңсә, Хоҙайҙан бирелгән күңел үҙгәрешһеҙ ҡалалыр ул. Кеше ниндәй шартта ғына йәшәмәһен, үҙ күңеленә, булмышына тоғро булып ҡала икән - ул бәхетле.



**Г. Хажиева:** Мин килен булып төшкән Салауат районы республиканың иң йәмле урынында икәне барыбыҙға ла мәғлүм. Мин уға тәү аяҡ баҫыуҙа уҡ ғашиҡ булдым. Тауҙар күккә олғаша, бар ерҙә аҡ ҡайындар йә ҡарағайҙар. Тап ошо район милли геройыбыҙ Салауат Юлаевты һәм халыҡ шағиры Рәми Ғариповты биргән бит! Тап мин йәшәгән ерҙәрҙә Салауат яу сапҡан, урман ҡыҙырған, шиғырҙарын ижад иткән! Бөгөнгө заман балалары быларҙы белмәй үҫә, үкенескә күрә. Герой, шағир һүҙҙәре уларға бер ни аңлатмаған һымаҡ. Райондағы халыҡтың 66 проценты башҡорт милләтенән

### *ИҘРИС НОҒОМАНОВ:*

*Ғүмер баҡый ҡалала йәшәп, бөтә булған буш ваҡытын, ялын ауыл ерендә үткәреп тә, шул ауыл кешеһен кәмһетергә тырышып, һауалы мөнәсәбәт күрһәткән бәғзе ҡала әҙәмдәренә аптырайым. Мәңге бер нисә квадрат метрҙа бикләнеп ултырған бәндә сәхрәләрҙә йәшәгәндәр хәлен аңлар кимәлдә түгелдер ул...*

### *ФӘНИЛ БҮЛӘКОВ:*

*Әлеге мәлдә беҙгә ауылда йәшәү уңайлы. Дөйөм белем биреүсе мәктәп тә, музыка мәктәбе лә эргәлә. Балалар ҡараулы, олатай-өләсәйҙәр - янымыҙҙа. Улар тәрбиәһе лә бик мөһим балаларға. Башында булған, дөрөҫ тәрбиә алған бала ҡала ерендә уҡыһынмы, ауыл ерендә булһынмы, тормошта юғалып ҡалмаясаҡ.*

***✓ Хәйерсе көнөнә төшһә төшә, ә тир түгергә теләмәй ҡайһы берәүҙәр. Ундайҙарға ҡарата хөкүмәт яғынан ниндәйҙер сара күреү яҡлымын. Эшләмәгәндәргә һалым хаҡында "Киске Өфө" яҙып сыҡҡайны инде былай, уҡыным.***

# Йәшәгәндәр хәлен... аңлар хәлдәме?

булһа ла, уҡытыу бар мәктәптәрҙә лә рус телендә алып барыла, башҡорт балалары үҙ телен сит телде өйрәнгән һымаҡ өйрәнә. Ҡасан да булһа был хәл үҙгәрер, тигән утопик ышаныста ҡалам шулай ҙа...

Ауыл ерендә йәшәү миңә оҡшай, ҡала ығы-зығыһы минең өсөн түгел. Унан һуң, мин балаларымдың бар яҡлап үҫешен, сыныҡҡан булыуын ҡайғыртам. Ауылда тынысыраҡ та, хәүефһеҙерәк тә. Әммә ҡайһы саҡта ауыл киңлектәре тар булып китә шулай ҙа. Теге йәки был проекттарымды тормошҡа ашырыу мөмкинлеге юҡ кимәлендә, үҙ ҡаҙанымда ҡайнарға мәжбүрмен, ярай әле интернет бар. Үҙем һымаҡтар менән аралашырға, фекерҙәштәр табырға ул ярҙам итә.

**► Йорт-ҡаралты тотоу, мал, ҡош-ҡорт бағыу, баҡса-бесән хәстәрлектәре йыл әйләнәһенә ҡабатланып килә торған бер төрлөлөк ҡуласаһы булып ялҡыта башлағанда, һеҙгә ниндәй шөғөл ярҙамға килә?**

**И. Ноғоманов:** Ауыл ығы-зығыһы шәхсән үҙемде һис ялҡытмай, тиер инем. Ауыл ерендә көн итеп тә бер ниндәй тереклеге юҡ кешеләр булыуы ғәжәп тойола миңә. Нисек улай йәшәмәк кәрәк? Ярай ҙа, шәп, аҡсалы эш урының булһа. Ә бит бер ерҙә лә эшләмәй, һуҡыр тин табыш алмайынса, һоро ҡорт ише көн итеүселәр ҙә бар. Хәйерсе көнөнә төшһә төшә, ә тир түгергә теләмәй ҡайһы берәүҙәр. Ундайҙарға ҡарата хөкүмәт яғынан ниндәйҙер сара күреү яҡлымын. Эшләмәгәндәргә һалым хаҡында "Киске Өфө" яҙып сыҡҡайны инде былай, уҡыным. Әйткәндәй, ҡыштың оҙон кистәрен рәхәтләнеп ултырып уҡып алырға әлдә гәзит-журналдарыбыҙ бар. Уларҙы ла алдырмаһаң, ни йәм тапмаҡ кәрәк? Үҙебеҙҙең башҡорт матбуғатын уҡымаған, өйөнә бер генә гәзит тә алдырмаған кешене мин ҡараңғы мөгәрәптә ултырған тотҡон һымаҡ күрәм.

**Ф. Бүләков:** Беҙ ҙә бына малтыуар тотмайбыҙ, Иҙрис ағай. Тик йыбанғандан, ялҡауланғандан түгел һис тә. Берҙән, ҡала эргәлә генә, бөтөн кәрәк ризыҡты магазин, баҙарҙан бара ла алаһың. Унан икебеҙ ҙә эшләгәс, ваҡыт та етеңкерәмәй: етмәһә, кәләш Учалыға йөрөп эшләй, тип әйткәйнем инде. Әммә баҡса, ҡош-ҡорт үҫтерергә яратабыҙ. Баҡса эше күңелгә ял бирә. Яланаяҡлап тыуған тупраҡҡа баҫып атлап, эшләп йөрөү минең өсөн үҙе бәхет. Ҡош-ҡортто ҡарау ҙа күңелле. Ҡыҙҙарым да уларҙы ҡарап эшкә өйрәнә. Ғаилә бюджетына файҙа бит ул ихатала үҫкән бар нәмә.

Бөтә нәмә ялҡытҡан саҡта ҡәләмгә тотонам. Ижад - күңелгә ял биргән бер йән дауаһы. Иҙрис ағай хаҡ: үҙебеҙҙең гәзит-журналдарҙы уҡый барып та фекер туплайһың, ваҡлыҡтарҙан бер аҙ арынып, тормош ҡиммәттәре хаҡында йышыраҡ уйланаһың.

**Г. Хажиева:** Көндәлек йорт-хужалыҡ эштәре, ысынлап та, бер төрлөлөгө менән ялҡытып та китә. Ауылыбыҙ бит ҙур түгел. Газ да үтмәгән, колонканан һыу ташыйбыҙ. Бар нәмә ҡул көсө менән башҡарыла. Ғаиләм ишле, балалар ҙа бәләкәй булғас, кер йыуыу, һауыт-һаба, йорт йыйыштырыу кеүек эштәр бар ваҡытымды ала тиерлек. Ярай әле, оло улым ҡул аҫтына инеп бара, бар эштәрҙә ярҙамлаша, Аллаға шөкөр. Атаһы эштә саҡта (ул биш көн һайын Силәбе өлкәһенең Бирҙәүеш ҡасабаһына вахтала йөрөп эшләй) ул минең төп таянысым. Йомош-юлға ул саба.

Ижадты үҙ күргән кеше булараҡ, төрлө шөғөлдәр мине бер төрлөлөктән ҡотҡара ла инде. Китап уҡырға яратам, шиғыр ҙа яҙғылайым, һуңғы ике йылда ҡул эштәре менән ныҡлап мауығам. Өйҙә ултырған ҡатын (декрет ялындамын) мотлаҡ ни менән булһа ла шөғөлләнергә тейеш, ти психологтар. Мин, әлбиттә, күңелемә ятышлы төрлө шөғөлдәр менән булышып ҡараным. Әлеге мәлдә канзаши һәм свитдизайн, аэродизайн менән мауығам. Канзаши сәнғәте сығышы менән Японианан, атлас таҫмаларҙан төрлө сәскәләр эшләүҙе аңлата. Ул сәскәләрҙе сәс биҙәүестәренә беркетәһең. Мин ҡыҙҙарға сәсте йыйып ҡуйыусы резинкалар, ҡаймалар эшләйем.

Икенсе шөғөлөм - свитдизайн. Ул кәнфиттәрҙән букеттар, башҡа төрлө композициялар төҙөү оҫталығы. Әлегә ярты йыл ғына шөғөлләнәм, ләкин был да бик мауыҡтырғыс. Дүрт бала әсәһе булғас, уларға байрам ойоштороу ҙа минең өҫтә. Уларҙы ҡыуандырыу йәһәтенән тыуҙы шарҙарҙан төрлө фигуралар эшләү, йәғни аэродизайн менән мауығыуым. Бынан башҡа ла төрлө ҡул эштәрен әүҙем үҙләштерәм, әле бына кәрзинкәләр үреү эшенә төшөнөп маташам. Бәхет ағастары, топиарийҙар эшләйем тағы ла. Мин, ғөмүмән, күп нәмәне үҙ ҡулым менән эшләүҙе хуп күрәм.



## ГӨЛШАТ ХАЖИЕВА:

*Ауыл ерендә йәшәү миңә оҡшай, ҡала ығы-зығыһы минең өсөн түгел. Унан һуң, мин балаларымдың бар яҡлап үҫешен, сыныҡҡан булыуын ҡайғыртам. Ауылда тынысыраҡ та, хәүефһеҙерәк тә.*

**► Үҙ ерлегегеҙҙән сығып, бөгөн ауыл тормошон үҙгәртеү һәм үҫтереү юлдарын тоҫмалларға буламы? Ауыл шарттарында етештереү, хеҙмәтләндереү тармаҡтарын булдырыу өсөн ниҙәр талап ителә?**

**И. Ноғоманов:** Ауыл тормошон үҙгәртергә лә, үҫтерергә лә була. Була ғына түгел - кәрәк! Бының өсөн йәшәп ятҡан ерһыуыбыҙға, төйәгебеҙгә ҡараш-мөнәсәбәтте ҡырҡа үҙгәртеү лазым. Күҙҙең яуын алып ятҡан сөм-ҡара һөрөнтөләребеҙ, көҙ миҙгеле биҙәге - сағыу-йәшел ужымдарыбыҙ һағындыра. Баҫыуҙарыбыҙҙы ниндәй хәлгә төшөрҙөк бит! Еребеҙ хаҡына ҡан ҡойған атай-олатаҙарыбыҙ рухы алдында оят. Шуныһы ҡурҡыныс: ҡарағура, ағаслыҡ баҫҡан баҫыуҙарыбыҙ өсөн бер кемдең дә йәне әсемәй, бер кем дә яуап тотмай.

**Ф. Бүләков:** Бөгөн ауыл тормошон үҫтереү юлы булып ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыу тора. Ауыл халҡын берләштереп тороусы, бер ергә туплаусы предприятиелар булһа, ауыл ерендә төпләнеүселәр ҙә артыр ине. Ишетеүемсә, күп ауылдарҙан бөгөн йәштәр ситкә ағыла. Беҙҙең ауыл биләмәһе халҡы үҙенең географик урыны менән бәхетле. Биш саҡрымда ғына ҡала, ун биш саҡрымда ғына Силәбе өлкәһенең Межозерный ҡасабаһы урынлашҡан. Күпселек ир-егеттәр тау-байыҡтырыу комбинатында эш таба, күп кенә ҡатын-ҡыҙҙар Учалы тегеү фабрикаһына йөрөп эшләй. Ҡалғандар иһә ҡала-райондың төрлө ойошма-предприятиеларында хеҙмәт итә. Себерҙә эшләүселәр ҙә етерлек. Ауыл халҡы шәхси хужалығынан арттырып ит-һөт, май-ҡаймағын, картуфын-йәшелсәһен ҡала баҙарына илтеп һата. Биләмәлә халыҡ һаны 2010 йылдан алып 200-ҙән ашыуға артҡан.

Ауылдарҙа фермерҙар эшләй ул, әммә уларҙың күпселеге осон осҡа ялғап килә. Бөгөнгө көндә ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырырҙай, етештергән тауарҙы баҙарға сығара алырҙай, ер ҡиммәтен белгән көслө инвесторҙар кәрәк. Тик ҡеүәтле предприятиелар үҫешһен өсөн дәүләттең дә ярҙамы даими булырға тейеш, тип уйлайым.

**Г. Хажиева:** Был һорауға яуап яҙыр алдынан мин районыбыҙҙың ауыл хужалығы тарихы менән ҡыҙыҡһындым, был тармаҡтың бөгөнгө мәлдәге хәле менән дә танышыу йәһәтенән мәғлүмәттәр эҙләнем. Совет осорондағы һымаҡ, әлбиттә, ҡаҙаныштар юҡ. 1965 йылда районда 493 мең тонна иген, ә 1980 йылда - ике тапҡырға күберәк - 793 мең тонна етештерелгән. Һыйыр малының иҫәбе генә 17 меңдән 1980 йылға 30 меңгә еткән. Әлеге мәлдә иһә мал һаны дүрт меңгә етәме юҡмы, быныһы ла 2013 йылғы мәғлүмәт. Бәлки, бөгөнгөнө совет осоро менән сағыштырыу урынһыҙҙыр, әммә район буйлап йөрөгәндә ҡый үләндәре, урман баҫҡан буш баҫыуҙарҙы, тегендә-бында емерелеп бөткән, шомло һәм ҡараҫҡы һымаҡ ултырған элекке ферма һарайҙарын күреү гел күңелде ҡыра. Бөгөн ауыл хужалығын КФХ-лар, фермерҙар күтәреп маташа ла ул. Ерҙә эшләү ерҙе яратыуҙы ғына түгел, аҡса сығымдары ла талап итә шул. Ысынында, райондың ауыл хужалығын үҫтереү мөмкинлектәре файҙаланылмай, тип һанайым.

Һеңлем ғаиләһе менән Күгәрсен районында йәшәй. Минең һымаҡ ҙур булмаған ауылда. Бына унда шәхси хужалыҡтарҙан һөт йыйыу эше яйға һалынған. Шуға ла кейәү малды тағы ла ишәйтте, йәй буйы һөт тапшыра. Мал тотҡан ауыл кешеһенең ғаилә бюджетына күпме ярҙам! Ә беҙҙең районда был да юҡ, үҙем һөт ташыусы машина алып һөт йыйырҙай булып китәм.

**► Үткән йылда ниндәй эштәргә ҡул етмәйерәк ҡалды, быйылғы йылға ниндәй өмөттәр бағлайһығыҙ?**

**И. Ноғоманов:** Быйылғы йыл - беҙҙең юбилей йылыбыҙ. Беҙҙең, тигәнем, 1952 йылда донъяға килгән "аждаһалар" инде. Һабаҡташтарыбыҙҙың һәр береһендә ҡунаҡ буласаҡбыҙ, Алла бирһә. Был үткәндәрҙе барлап, киләсәкте күҙаллап ултырыу йолаһы беҙҙең ғәҙәткә ингән. Йәнә лә, әсәйебеҙгә 85 йәш тула. Йылдың үтеп барғанын барлауға кигәндә, үҙемдең ижад емештәрем матбуғатта баҫылып торҙо, бер тарихи роман яҙып ташланым, яҙыусылар йыйынында булып ҡайттым. Өмөттәргә ҡағылышлыһы: Зәйнәп Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә сираттағы йыйынтығым баҫырға әҙерләнә. Китапты юбилейымда ҡулыма алып ҡыуанырмын, ул уҡыусы күңеленә хуш килер, тип ышанам. Тағы... яңы әҫәрҙәр тыуҙырырмын, тигән өмөттәмен. Хоҙай Тәғәлә һаулыҡ, илһам насип итһен.

**Ф. Бүләков:** Күп эшкә ҡул етмәй ҡалды. Барыһы ла бюджетҡа бәйле бит. Ауыл биләмәһендә бер эште эшләһәң, икенсеһе сығып ҡына тора. Киләһе йылға бюджет ҡаралған, бөтә мәсьәләләрҙе урындағы депутаттар менән бергәләп хәл итербеҙ, тип уйлайым.

Ижади эшкә килгәндә, быйыл нәшриәткә "Торналарҙы офоҡ саҡыра" тигән икенсе йыйынтығымды тапшырҙым. Киләсәккә һәр ваҡыттағыса яҡты уйҙар менән бағам.

**Г. Хажиева:** Күп нәмә кешенең ниәтенән генә тормай шул, һиңә генә бәйле булмаған сәбәптәр ҙә килеп сығып, аяҡ сала. Һәр нәмәнең үҙ сираты, үҙ ваҡыты, тигән девиз менән йәшәйем. Әлеге мәлдә бар иғтибарым йәшен тултырған сабыйыбыҙға йүнәлдерелгән. Дөрөҫөн әйткәндә, балаларҙан бушамайым.

Әлбиттә, амбицияларым булған менән ҡәнәғәтләнергә ирек бирмәй. Әйләнгән һайын яңы пландар менән янам, ярай әле, тормош иптәшем миңә бар яҡлап терәк, теләктәш булып тора. Эргәндә ышанıслы яҡының барҙа, яйлап-аҡрынлап булһа ла хыялыңа яҡынлашаһың. Әлегә иң мөһиме - балаларҙы яҡшы кешеләр итеп тәрбиәләүгә ныҡлы нигеҙ һалыу.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баш ҡала баҫмаһы һаналһаҡ та, бар милли баҫмалар һымаҡ, беҙҙең гәзитебеҙҙең дә төп уҡыусылары ауылдарҙа. Баш ҡалабыҙ менән республикабыҙ төбәктәрен тоташтырыусы бер күпер һымаҡ "Киске Өфө". Шуға ла гәзитебеҙ биттәрендә ауыл хәбәрҙәре лә урын алыуы, ауылдарҙа йәшәүсе шәхестәребеҙ тураһындағы сығыштарға ла йыш урын бирелеүе аңлашыла торғандыр. "Ситтән тороп диалог" рубрикаһындағы әңгәмәләрҙә республикабыҙҙың иң төпкөлөндә йәшәгән уҡыусыларыбыҙ ҙа ҡатнаша ала, тимәксебеҙ. Үҙегеҙҙе танытып, ниәтегеҙҙе белгертеп, шылтыратырға ғына ҡала.**

✓ *Рифат хәҙер ҡурайында әсәһенең бер нисә йырын уйнай ала. Ҡайғылыһын да, күңеллеһен дә. "Рифат, йә тағы уйна", - тип кенә тора малайҙар. Әммә уйындар ҙа, музыка ла малайҙарҙың аслыҡ ҡайғыһын баҫа алманы.*



Талха ҒИНИӘТУЛЛИН

# БРИГАДА ӨЙРӘҺЕ

Хикәйә

Өйөндә һалҡын, шулай ҙа тормош тын алышы аңҡый ине әле. Рифат ботаҡ-сатаҡ һындырып, мейесенә яҡты. Ут таныш тауыш менән геүләне. Мейес, һикенең яланғас таҡталары, тәҙрә ҡорғандары уның ҡайтыуына шат һымаҡ ине. Һандыҡтан әсәһе байрамдарҙа һәм ҡунаҡтар килгәндә генә йәйә торған йөн балаҫты алып, һикегә йәйҙе һәм йортта әсәһе барҙағы һымаҡ йәмле булып китте.

Унан баҙҙан ярты биҙрә шытҡан картуф сығарҙы, уны ҙур кәстрүлдә йыуҙы ла йоҡа ғына итеп телгеләп, ҡыҙған плитә өҫтөнә теҙҙе. Ҡыҙарып-күмерләнеп бешкән картуфты ашаны, бер аҙ тынысланды һәм әсәһенең уны күҙәтеп илағанын тойғандай булды.

Кисенә Камилә апаһы килде һәм тупһанан уҡ:

- Нишләйһең бында? - тауышы асыулы. - Кешеләр ҡыуып сығарған тип уйлар ҙа. Мин һине ҡыуҙыммы? Ашатманыммы? Әйҙә, ҡайт!

- Юҡ! - тине Рифат ҡәтғи рәүештә.

- Ҡысҡырма! Ҡайт, тип әйттем бит!

- Бармайым. Мин һеҙгә бер ҡасан да йәшәргә бармайым!

- Һин нимә тинең, ә?

- Һин мине оятһыҙ урыҫ һүҙҙәре менән әрләнең.

- Ярай, ҡыҙыулыҡ менән әйткәнмендер ҙә... Ғәфү ит, - тине апаһы килешкәндәй тон менән. - Әйҙә, ҡайт.

- Юҡ.

Апаһы бераүыҡ өндәшмәй торҙо ла илай башланы.

- Һинеңсә, мин һандуғас булып һайрарға тейешме ни? Ағайыңдан хәбәр юҡ. Тәслимә уҡыуын ташланы, өләсәйең тамам алышынды. Минзифаның үлеүен аңламай.

Апаһы ҡайтып киткәс, Рифат ҡурайын алды ла уйнарға маташып ҡараны. Тырыша торғас, әсәһенең яратҡан йырын килтереп сығарған һымаҡ булды... Ҡурай уға әсәһенең тауышы менән йырлай төҫлө. Һәм ул әсәһе үлгәндән һуң беренсе тапҡыр илап ебәрҙе...

Рифат дуҫы Азатҡа һирәк булһа ла ингеләп йөрөй. Сәй эскән саҡтарына тура килһә, Кәримә апай өҫтәл артына ултырта, ашъяулыҡҡа ҡара көлсә һала ла бер үк һүҙҙе ҡабатлай:

- Бына ҡара, беҙ нимә ашайбыҙ...

Ҡайсаҡ Азат та инә Рифатҡа. Рифаттың ҡара көлсәһе булмағас, дуҫын ул плитәлә ҡыҙҙырылған йоҡа картуф менән һыйлай.

Малайҙар күпселектә өйҙәре иркенерәк булған Кинйәктә йыйылалар. Уның әсәһе, Сафия апай, көлсә менән һыйламай, әммә ҡыумай ҙа. Уларҙы бөтөнләй күрмәгән һымаҡ, иғтибарға ла алмай. Ире үлгәс, аҡылын юйған икән, тип һөйләнеләр. Ире, Сабир ағай, Низам байҙың улы ине. Уларҙың илле баштан артығыраҡ ат өйөрө булды, биш бүлмәле ҙур өйҙә йәшәнеләр. Синфи дошман. Кулактарҙы класс булараҡ һөрөр алдынан ғына Низам бай үлеп ҡуйҙы. Күп балалы ғаиләне һөрмәнеләр, әммә йорттарынан ҡыуҙылар. Унда тәүҙә мәктәп булды, унан ауыл түрәләре урынлашты - ауыл советы һәм колхоз идараһы. Күпмелер ваҡыт туғандарында йәшәп, кулак ғаиләһе бәләкәй генә йорт һалып сыҡты һәм колхоз тормошо менән йәшәй башланы.

Үҫмер сағына тиклем Сабур "кулак малайы" тамғаһы менән йөрөнө, унан колхозда бригадир ҡайҙа ҡуша, шунда эшләне. Ике йыл армияла хеҙмәт итте, өйләнде һәм һуғыш башланыр алдынан уның ҡайһы класҡа ҡарағанын ауылда һирәктәр генә хәтерләй ине инде. Һуғыш иғлан ителгәндең өсөнсө көнөндә үк повестка тотторҙолар. Сабур атаһының ҡәберенә барҙы, доға ҡылды, кисенә ҡатынына " колхоздары өсөн үлгем килмәй" тине лә лапаҫҡа инеп аҫылынды.

Ҙы еңеп, герой булып ҡайтасаҡтар. Торараҡ малайҙарға Рифат һәм уның дуҫы Азат та ҡушылды. Кинйәк таҡмаҡтарына музыка өҫтәлде.

Рифат хәҙер ҡурайында әсәһенең бер нисә йырын уйнай ала. Ҡайғылыһын да, күңеллеһен дә. "Рифат, йә тағы уйна", - тип кенә тора малайҙар. Әммә уйындар ҙа, музыка ла малайҙарҙың аслыҡ ҡайғыһын баҫа алманы. Баштағы уй, телдәге хәбәр тик ашау тураһында ғына булды. Һыйырҙары юғалған Хәйбулла менән Мөбәрәк орлоҡҡа ҡалдырған картуминә ҡайырыһын ҡырҡып бирә - теленде йоторлоҡ...

- Сажиҙә үлде бит. Шешенде лә үлде...

Бер ваҡыт Кинйәк:

- Малайҙар, әйҙә урамға сығайыҡ та еҫкәнеп киләйек, - тине.

- Нимәне еҫкәйек?

- Бөтә колхоз начальниктары ла он йәшерҙе, хәҙер уларҙың өйөнән ҡоймаҡ еҫе сыға, ти әсәйем.

- Әйҙә, еҫкәйек. Еҫкәп кенә туябыҙмы һуң?

- Мужит туйырбыҙ ҙа.

- Еҫкәнек, эс тулы ҡоймаҡ, - тип эсен һыйпаны Мөбәрәк.



Ире үлгәндән һуң Сафияны алыштырҙылармы ни. Ул кешеләрҙән ҡаса, ялтана, өндәшмәй, әйтерһең дә, хаҡһыҙ ғәйеп тағыуҙарҙан ҡаса, йәки артында бысраҡ мыҫҡыллауҙар ишетергә теләмәй. Колхозда көндәм, хатта тырышып эшләне. Кәүҙәгә таҙа, көслө ҡатын өс йөҙгә тиклем көлтә бәйләй, кәбән ҡоя, урман йыға. Әсә менән улының нисек көн иткәндәре менән бер кем дә ҡыҙыҡһынманы. Кинйәк ҡайсаҡ ауылдан юғалып та тора - рудникта ағаһы йәшәй - әммә әйләнеп ҡайта. Күрәһең, унда артыҡ тамаҡҡа бигүк шат булмағандарҙыр.

Кинйәк һәр уйынды ойоштороусы һәм уйлап сығарыусы ине икенсе бригадала. Малайҙарҙан өлкәнерәк тә, бер йыл беренсе класта уҡып та алды, тик икенсегә барманы - ҡорһаҡ ас булғанда уҡыу ҡайғыһы түгел. Рудникта ул урыҫса "балакать" итергә, һүгенергә өйрәнгән. Тағы башҡортса һәм урыҫса таҡмаҡтар отҡан. Малайҙарҙы көлдөрөр өсөн ҡайсаҡ көйләп тә йөрөй:

*Девка стоит на горе,*
*Ветер шарит в подоле,*
*Бесстыжий ветер и шпион,*
*Куда заглядывает он?*

*Военная норма -*
*Десять грамм корма.*
*С голоду не помрешь,*
*Девку замуж не возьмешь.*

Кинйәккә тик икенсе бригада малайҙары ғына килә. Ҡыҙҙарҙы, бәлки, малайҙар араһына әсәләре ебәрмәгәндер. Әхмәҙулла, Вәсим, Мөбәрәк, Камил, Зиннәтулла, Апуш, Ғәбделхай килә. Кинйәктән башҡаларының аталары фронтта. Васимдең әсәһе генә иренә "ҡара ҡағыҙ" алды. Мөбәрәктең атаһы юҡ, олатаһын хеҙмәт армияһына алдылар. Малайҙарҙың бөтәһе лә аталарының тере булыуына ышана - фашистарфын да ашап бөткән, яҙға шешенделәр, ҡараштары һүнде.

- Атайым өйҙә саҡта әсәйем уға ла, миңә лә көн дә берәр йомортҡа бирә торғайны...

- Ә минең әсәйем төшкөлөккә тары бутҡаһы бешерә, бөтәбеҙ ҙә бер табаҡтан ашайбыҙ. Май һалынған сынаяҡты табаҡ уртаһына ултырта ла, майҙы ҡалаҡ менән алаң да бутҡаны майлайһың - и ауыҙға. Сиратлап ашайбыҙ, тәүҙә атай, әсәй, мин, унан ҡустым. Ул сиратты боҙһа, атайым үҙенең ағас ҡалағы менән башына - трак! Ҡустым иламай, ауыртҡан башын һыпыра ла йәнә бутҡа ашарға керешә. Бутҡа булһа, ул шешенмәҫ тә, үлмәҫ тә ине...

- Бөтә ашантыны фронтҡа ебәреп торалар, ти әсәйем.

- Йомортҡаныламы?

- Эйе. Йомортҡа ашамаған ҡыҙылармеецтарҙың немецты еңерлек көсө булмай ҙа. Илһам ағай һабантуй алдынан бәһлеүән Саҙрыйға колхоз ҡошсолоҡ фермаһынан йөҙ йомортҡа биргәйне, Саҙрый йөҙ йомортҡаны ла, йәнә өс тәрилкә ҡаймаҡты ашап, бөтә көрәшселәрҙе лә еңде тип һөйләне. Үәт, белдеңме?

Балалар хыялы аталары йомортҡа ашап, һөжүмгә ташлана ла фашистарҙы үлтергәнен һүрәтләй.

- Иң тәмлеһе ҡоймаҡ. Ҙур табала майҙа йөҙөп бешкәне.

- Ә билмән? Беҙ атайым менән тулы сөгөн ашап бөтә торғайныҡ. Беҙ ашайбыҙ, әсәйем тағы бешерә. Ҡышҡыһын атайым извозға киткәндә бер ҡапсыҡ туңдырылған билмән алып китә...

- Иң тәмлеһе - яңы бешкән икмәк. Әсәйем мейестән ала, һикегә һала, таҫтамал менән ҡаплай, ә еҫе бөтә урамға тарала. Теге һәр ваҡыт ас иҫәр Сажиҙә еҫен һиҙеп ҡала ла беҙгә инә. Әсәйем

Кинйәк кенә көлдө, йөҙө, күҙҙәре шешенгән Хәйбулла хәбәргә битараф ҡалды.

- Теләмәгәндәр - асығығыҙ, ә беҙ Рифат менән үҙебеҙгә икмәк эҙләргә китәбеҙ, - тине Кинйәк атаһының йыртыҡ телогрейкаһын кейеп.

Ауылдың урамы буйлап киттеләр, һуғыштың тәүге көндәрендә үк фронтҡа киткән бухгалтер Хәмитйәндең өйө тапҡырына туҡтанылар.

- Рифат, уйна, - тине Кинйәк. - Бында ҡоймаҡ еҫе сыҡмаһа ла уйна.

Рифат ҡурайын тартты, әммә өйҙән бер кем дә сыҡманы.

- Тағы уйна.

Рифат "Буранбай"ҙы уйнаны. Ҡапҡаның келәһе ысҡында ла бухгалтерҙың ҡатыны күренде.

- Нимә бында сыйылдап йөрөйһөгөҙ?

- Беҙ артистар, беҙ асбыҙ, - тип яуапланы Кинйәк. - Беҙгә әҙ генә икмәк бирһәгеҙ икән...

- Беҙҙең икмәк юҡ. Үҙебеҙ ас ултырабыҙ. Китегеҙ бынан, - тине ҡатын һәм шартлатып ҡапҡаһын япты.

Ары киттеләр.

- Еҫкә, Рифат, - тине Кинйәк. - Минең танау маңҡалап тора, шуға ла еҫте насар һиҙә.

Китеп баралар, уйнап китеп баралар. Һуғышта юғалған бригадир Муллахмәт өйө янында Кинйәк үҙенең таҡмағын ҡурайға ҡушылып йырланы: "Военная корма, десять грамм норма..."

Ҡыйшайған ҡапҡанан таяҡҡа таянған ҡарт сыҡты ла малайҙарға ике картуф һондо.

- Уйнағыҙ, балалар, уйнағыҙ. Беҙ йырҙы онотторҡ та инде.

Картуфты атлаған көйө ашанылар. Склад мөдире аҡһаҡ Ғәлиптең өйө тапҡырына ла еттеләр - кемдең-кемдең, уның ашарына булмауы мөмкин түгел - кемдең ҡулында, шуның ауыҙында.

- Еҫкә, - тине Кинйәк.

Рифат еҫкәне: ирей башлаған март ҡары, тиреҫ, төтөн еҫтәре менән бергә бөтә тишек-ярыҡтан яңы бешкән икмәк еҫе килә ине.

- Ҡоймаҡмы? - тип һораны Кинйәк.

- Юҡ, икмәк.

- Тимәк, әле генә мейестән алғандар. Уйна!

Ҡапҡаны Ғәлиптың "Ситаҡа" ҡушаматлы ҡатыны асты һәм:

- Нимәгә ҡысҡырышаһығыҙ? - тип һораны.

- Беҙ тауышланмайбыҙ, беҙ - артистар, беҙ ас! - тине Кинйәк.

"Ситаҡа", "Һеҙ ҙә булдығыҙмы артист!" тип ҡәнәғәтһеҙ боролданы ла ҡапҡаһын япты. Ә Рифат уйнауын дауам итте. Яңынан ҡапҡа асылды, унан Сабит - аҡһаҡ Ғәлиптең иҫәрерәк бәләкәй малайы килеп сыҡты. Ул ҡулындағы икмәк һынығын Кинйәккә һондо. Кинйәк икмәкте бүлеп, яртыһын Рифатҡа бирҙе, үҙендә ҡалғанын ауыҙына килтерҙе. Килтерҙе лә, төкөрөп, ҡысҡырып ебәрҙе:

- Ашама, ул икмәккә һейгән!

Бер нәмә лә аңламаған Рифат икмәкте сәйнәргә булғайны ла еүеш ризыҡта әсе еҫ һиҙеп, кире төкөрҙө. Ә иҫәр Сабит мыҫҡыллы көлөп, ҡапҡаһын япты.

- Еҫкәнегеҙме инде хәҙер? - тине Кинйәк тәрән көрһөнөп. - Аллаһы Тәғәлә быының өсөн һеҙҙе язалар әле!

Туҡ йәшәгән өйҙәрҙә аслыҡтан ҡотолоу сараһы килеп сыҡмағас, Кинйәк ризыҡ табыуҙың икенсе формаларын эҙләргә кереште. Урларғамы? Үҙҙәре һымаҡ астарҙың нимәһен урлайһың? Кем йәшергән, улар оло ҡара йоҙаҡтар элә. Тотһалар, Әбделхайҙы туҡмаған кеүек, үлтергәнсе туҡмаясаҡтар ҙа ҡуясаҡтар. Оҙаҡ уйланы-барланы Кинйәк һәм бер нәмә килтереп сығарҙы.

- Әйҙәгеҙ, колхоз складына (келәтенә) төшәйек. Унда ашарға бар. Берәй тоҡ аҡ он алыр ҙа астарға таратыр инек. Тик бер кемгә лә һөйләмәҫкә! Кем һөйләй, Алла һуғасаҡ.

- Тотһалар?

- Тотһалар, төрмәгә ултырталар.

- Балаларҙы төрмәгә ултыртмайҙар.

- Складты нисек асабыҙ һуң? Ишегендә ҙур йоҙаҡ. Асҡысы кәрәк.

- Асҡысы аҡһаҡтың кеҫәһендә. Уны нисек алырға икәнен мин беләм.

Кинйәккә бер кем дә ышанманы: колхоз складына төшөү - колхоз шалҡанын урлау түгел. Малайҙар Кинйәктең ниәтен ысынға алманы һәм шундуҡ онотто. Тик эскерһеҙ һәм бер ҡатлы, һәр нәмәгә ышанып барыусы Азат ҡына быны әсәһенә һөйләне.

- Ҡуй, һеҙ нәмә уйлап сығарҙығыҙ? - тип ҡурҡып китте Кәримә. - Урлашырға яраймы ни? Төрмәгә ултырталар бит!

- Кинйәк, балаларҙы төрмәгә ултырмайҙар, ти.

- Нишләп ултыртмаһындар? Хәҙер бөтәһен дә ултырталар. Ана, Бибизада тоҡтан бер ус бойҙай алған. Ултыра бит. Ә балалары асҡа интегә...

**Әмир ӘМИНЕВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 1-2-се һандарҙа).**

# ЯҘЫУСЫ ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## тәнҡитсе лә матурлыҡты аңлай белергә өйрәтә



**Художестолы әҙәбиәт тәү сиратта шағирҙар, прозаиктар, драматургтар ижады менән бәйле булһа ла, уның йәшәү рәүеше әҙәбиәт ғилеме белгестәре хеҙмәтенән тыш тулы ҡанлы була алмаҫ ине. Әйҙәгеҙ, бындай ҡараштың дөрөҫлөгөн бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙҙың диалогы - филология фәндәре докторы, БДУ профессоры Фәнил КҮЗБӘКОВтың һорау ҡуйыуы һәм бөгөнгө әҙәби процеста әҙәби тәнҡитсе ролендә әүҙем ҡатнашҡан филология фәндәре кандидаты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты Зәки ӘЛИБАЕВтың яуаплауы аша күҙаллап ҡарайыҡ.**



**Ф. Күзбәков:** Һинең өсөн әҙәби тәнҡит нимә ул? Һөйләшеүҙе ошо һорауҙы асыҡлауҙан башлайыҡ, булмаһа.

**З. Әлибаев:** Уҡыусы менән ижадсы араһындағы күпер. Әҙип кенә түгел, тәнҡитсе лә матурлыҡты аңлай белергә өйрәтә. XXI быуат - теүәл заман осоро, машина теле менән аралашҡан дәүер. Бигерәк тә ошондай солғанышта матурлыҡты күрә, тейешенсә баһалай белеү бик мөһим. Сәнғәттә тыуҙырыу ғына түгел, уны аңлау өсөн дә әҙерлек кәрәк бит. Ә яҙыусыға әҫәренең профессиональ тәнҡитсе тарафынан тикшерелеүе ни тиклем әһәмиәтле булыуын әйтеп тороу ҙа урынһыҙ. Әлбиттә, башҡорт әҙәбиәте бер үк әҙиптең әҙәби тәнҡит өлкәһендә лә, башҡа жанрҙа ла уңышлы һәм емешле эшләгән осраҡтарҙы бик яҡшы белә. Ғайса Хөсәйенов, Рауил Бикбаев, Вафа Әхмәҙиев, Әнүр Вахитовтар, мәҫәлән...

**Ф. Күзбәков:** Ысынлап та, шағирҙы аңлау өсөн күпмелер дәрәжәлә үҙеңә лә шағир булыу кәрәктер... Был осраҡта шиғриәтте эске һиҙемләү менән аңлау ҡеүәһе тураһында һүҙ бара. Шул нигеҙҙә тәнҡитсе күнел ҡылдарын сиртерлек әҫәрҙәр һайлай икән, эш һөҙөмтәле килеп сығасаҡ. Мәҡәләләр бит, күбеһенсә, ҡәләмдәштән дә бигерәк уҡыусыға йүнәлтелә. Әммә күп кенә тәнҡитселәр йә кандидатлыҡ, йә докторлыҡ диссертацияһы тип яфалана, йә ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ бурысын үтәп ыҙалана... Ә һин үҙеңдә принципиаль тәнҡитсе тип иҫәпләйһеңме?

**З. Әлибаев:** Ауыр һорау... Йәшермәйем, хилафлыҡтар ҙа барҙыр. Баҫылған әйберҙәремде ҡайтанан барлағанда, бигерәк тә әүәлгеләрен күҙҙән кисергәндә, үҙемдең етешһеҙлектәремде асыҡтан-асыҡ күрәм. Әҙиптең генә түгел, тәнҡитсенең дә үҫеү, өлгөрөү этаптары була, күрәһең. Тәжрибә туплана килә, үҙаллылыҡ көсәйә.

**Ф. Күзбәков:** Бөгөнгө әҙәби тәнҡит буйынса башҡорт әҙәбиәтен тәғәйен күҙаллап буламы? Йәмғиәт үҫешенә булышлыҡ итерлек кимәлдәме ул? Әллә шәхси зауыҡтарҙы ғына ҡәнәғәтләндереүсе ролендә сығыш яһаймы? Йәмғиәт, әҙиптәр, уҡыусылар уға мохтажлыҡ кисерәме? Әгәр ҙә, бөгөнгө тәнҡит юғары талаптарға яуап бирә, тибеҙ икән - әйҙә, асыҡлайыҡ: ниндәй тәнҡит ниндәй талаптарға яуап бирә? Ошо юсыҡта уйланып, Мостай Кәрим көндәлектәрендә шундай һығымта яһаған: "Талантһыҙлыҡ талантһыҙлыҡты юғарыға сөйә, ул быны менән үҙен дә сөйә, үҙен раҫлай". Теге йәки был әҙип ижадын, йә ниндәйҙер әҫәрҙе тикшерергә ниәтләү нимәгә бәйле була?

**З. Әлибаев:** Күбеһенсә хәҙерге әҙәби процесс менән шөғөлләнгәс, бөгөнгө әҙәбиәт буйынса дәрестәр алып барғас, сағыштырмаса яңыраҡ донъя күргән әҫәрҙәр, әле ижад итеүсе әҙиптәр ижадына иғтибар туплайым. Зәйнәб Биишева, Һәҙиә Дәүләтшина романдары, Аҡмулла, Бабич, Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим шиғриәте өлгөһөндә тәрбиәләнгән быуын вәкиле буларaҡ, улар кимәленән, улар ҡарыштарынан сығып баһаларға ынтылам. Милли характерҙы асҡан әҫәрҙәр нығыраҡ ҡыҙыҡһындыра. Редакцияларҙан килеүсе заказдарҙы иҫәпкә алмайынса ла булмай...

**Ф. Күзбәков:** Төп критерий, әлбиттә, әҫәрҙең художество кимәле инде ул. Ижад емешенең өлгөрөп еткән, йә, киреһенсә, сейле-бешле булыуы әҙип үҙ алдына ҡуйған маҡсатҡа өлгәшә алыуалмау проблемаһын килтереп сығара бит. Ә маҡсаттар ниндәй булған һуң? Шулай итеп, художестволылыҡ, образлылыҡ, ижади оҫталыҡ мәсьәләләре үҙенән-үҙе әҫәрҙең йөкмәткеһе, ваҡиғалар сылбыры, геройҙар тураһында һөйләшеүгә илтә. Әҫәрҙе тикшергәндә һинең өсөн нимә мөһимерәк: темаһың актуаллегеме, әллә художестволылыҡмы?

**З. Әлибаев:** Икеһенең берлеге. Бөгөнгө көн ҡаҙағына һуҡһын...

**Ф. Күзбәков:** Ә бөгөн актуаль булған күренеш, иртәгә икенселәгә әйләнеүе лә бар бит әле... Ысын мәғәнәһендәге талант идеологияға хеҙмәт итмәһә, арзан дан, йәһә ни ҙә булһа маҡтаулы исем, премиялар тип ҡырсынмаһа, тема актуаль булған өсөн генә художестволылыҡты артҡы планға күсермәҫ, публицистик характерҙағы әҫәрен роман тип тәҡдим итмәҫ... Тап ошондай сетерекле хәлдәрҙә күҙ уңында тотҡанда, әҙәби тәнҡитсегә айырыуса принципиаллек күрһәтергә кәрәктер бит. Икенсе яғы ла бар: әҙәби тәнҡитсенең һүҙе үтемлеме һуң, әйткәндәренә ҡолаҡ һалалармы? Уның абруйын күтәреү буйынса идаралыҡ нимә эшләй? Шул уҡ маҡтаулы исемдәр биреү буйынса эшләгән комиссияларҙа профессиональ тәнҡитсе булып танылған кем бар? Ошондай сәбәптәр арҡаһында маҡтаулы исемдәрҙең бәсен ебәрҙек түгелме?

**З. Әлибаев:** Был осраҡта тупаҫыраҡ яңғыраһа ла халыҡтағы шундай әйтем иҫкә төшә: эт саба тип, бет саба. Ул алған бит, ә ни эшләп мин алмаҫҡа тейеш, тип уйлай күптәр. Ваҡландыҡ, һүҙ сәнғәтен ваҡланыҡ. Бөгөнгө прозала үҫеш һиҙелмәй...

**Ф. Күзбәков:** Дөйөм алғанда, бәлки, шулайҙыр ҙа. Әммә Әмир Әминев, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Фәрзәнә Аҡбулатовалар ижады ла бар бит әле. Әҙләнәләр, ҡыҙыҡлы табыштарға юлығалар... Прозала ла, шиғриәттә лә Мәүлит Ямалетдин уңышлы эшләй. Былтырғы "Яңы офоҡтарға" конкурсы ла әҙәби процесҡа бер йәнлелек индереп ебәрҙе. Ғәлим Хисамовтың романдары айырым һөйләшеү талап итә. Күптән түгел премияға тәҡдим ителеп, ҙур-ҙур мәҡәләләр баҫылған романдар хаҡында ла уҡыусы профессиональ тәнҡитсе һүҙен бик тә ишетергә теләр ине. Бөгөнгө әҙәби процесты, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әҙәби тәнҡит аша күҙаллауы ҡыйыныраҡ түгелме?

**З. Әлибаев:** Бөгөнгө әҙәбиәт донъяһында ваҡиға булырҙай әҫәрҙәребеҙ бар ул, тик беҙ уларҙы күрә-күрһәтә белмәйбеҙ. Көндәлек ығы-зығыла әрәнәһе бергә бутала. Әле телгә алынған Фәрзәнә Аҡбулатова ижады ентекле иғтибарға лайыҡ. Уның формаға бәйле эҙләнеүҙәре уңышлы килеп сыға. Нияз Алсынбаев та был йәһәттән ҡыҙыҡлы булмаҡсы... Тик күп нәмә теләк булыуҙан үтә алмай. Беҙ хатта төрлө яҡлап Рәми Ғарипов ижадын тулайым баһаламағанбыҙ. Беҙгә бөгөнгө әҙәбиәтте яҡшы белгән профессионалдар кәрәк. Ваҡыт еткереүе ҡыйын. Бигерәк тә прозаға...

**Ф. Күзбәков:** Уныһы шулай. Роман үҙе лә бер көн эсендә яҙылмай. Яҙылғас, баҫылып сығыуын көтөргә кәрәк. Баҫылғанды тәнҡитсе иғтибарға алырға, уҡып сығырға, фекер тупларға... Ә бөгөнгө заман - компьютер заманы, ракета тиҙлеге. Романдарға ваҡыт бүлә аламы бөгөнгө башҡорт уҡыусыһы?

**З. Әлибаев:** Әҙәби тәнҡитсе тап бына ошо проблемаларҙы күҙ уңында тотоп эшләргә тейеш тә. Ул, башта әйткәнемсә, әҙип күнеленән уҡыусы йөрәгенә күпер һалырға тейеш. Уҡырлыҡ әҫәрҙең уңышлы яҡтарын асып күрһәтергә, кәмселектәренә күҙ йоммаҫҡа, сәнғәти матурлыҡҡа иғтибар иттерергә...

Әҙәби тәнҡит тә - заман емеше, йәғни йәмғиәт менән бергә атлай, бергә үҙгәрә. Иң мөһиме - профессиональ кимәлдә булырға тейеш ул. Ижадсының шәхесенә, таныш-тоношлоҡҡа ҡарамай, ижад елкәндәренең йүнәлешен билдәләп, хәрәкәтте барлыҡҡа килтереүсе фекерҙе ваҡытында, урынында әйтеп барырға бурыслылыр, тип уйлайым. Бөгөн беҙҙә "парад" йәки "биҙәкле" тәнҡит өҫтөнлөк итә һәм беҙ, шуның менән мауығып, төп эшебеҙҙе онотабыҙ, буғай. Әҙәби тәнҡит бөгөн "картайҙы". Бер тирәлә уралабыҙ. Яңы, үткер, ҡыйыу фекер юҡ. Хатта уның кәрәге лә юҡ һымаҡ. Сөнки әҙәбиәт донъяһында әҙәби тәнҡиткә үгәйһетелгән ҡараш йәшәп килә. Был тармаҡта хеҙмәт итеүселәр тик "парад", юбилейҙар ваҡытында ғына иҫкә төшә. Уларҙы "пафослы маҡтау" менән ҡоралландыралар ҙа ҡуйған маҡсаттарына өлгәшәләр. Объективлыҡ етешмәй. Яҙыусыға бит артабан үҫешеү өсөн гәҙел фекер ишетеү бик мөһим. Асылда нисек килеп сыға? Премияға тәҡдим ителгән әҙип ижады хаҡындағы мәҡәләләрҙе йыш ҡына уҡырлыҡ булмай. Юбилейҙарға бәйләләре тураһында әйтеп тороу ҙа кәрәкмәй - барыһы ла бер ҡалыптан. Былыһы бер хәл. Ҡыҙғанысы шунда: саралар үтә - әҙип онотола. Ә, бәлки, тап ошоноһо иң гәҙел баһалыр? Әҙәби тәнҡиттә лә төрлөлөк кәрәк.

Әҙәбиәттең айырым-айырым йүнәлештәре буйынса байтаҡ хеҙмәттәр бар, кандидатлыҡ, докторлыҡ диссертациялары яҡлана, тик әҙәбиәт өлкәһендә үҙенең фәнни мәктәбен булдырған ғалимдарыбыҙ бармы? Заманында академик Ғайса Хөсәйенов мәктәбе бар ине. Ә хәҙер ундай бер мәктәп тә юҡ. Бәлки, шул сәбәпле тулайым әҙәби процесс тейешенсә баһалана алмайҙыр. Был йәһәттән һеҙ "Ағиҙел" биттәрендә ойоштоған әңгәмәләр ошо бушлыҡты тултырғандай иткәйне: тәрәнтәрән фекерҙәр яңғыраны, өлгөрөп еткән мәсьәләләр ҡуҙғатылды, хәл ителәргә тейешле проблемалар бар ҡыркыулығына ҡуйылды. Тик ул осорҙағы әҙәбиәт цехы етәкселеге был башланғысты күтәреп алырға теләмәне...

**Ф. Күзбәков:** Парадокс шунда: күптәребеҙ бөгөнгө әҙәби процесҡа тәғәйен баһа ишетергә теләй, әммә шәхсән үҙе хаҡында маҡтау ғына яңғырaһын... Телгә алынған фәнни мәктәпте туранан-тура ғына ла аңларға ярамайҙыр, моғайын. Ғайса ағай Хөсәйеновҡа бәйле әйтмәксемен. Ул бер үҙе генә лә тотош институт башҡара алырҙай эштәр атҡарҙы. Тиҫтәләгән фән кандидаттары, фән докторҙары әҙерләне. Уларҙың күпселеге әҙәбиәт тарихы менән шөғөлләнә, бөтәһе лә, беҙ Ғайса Хөсәйенов мәктәбен үткәнбеҙ, тип әйтә ала. Шулай ҙа был, минә ҡалһа - күбеһенсә, тышҡы, формаль күрһәткес кенә. Фәнни мәктәп тип аталған күренеш - остаз ирешкәнде яңы осорға яңыса үҫтереп алып китеү ҙә ул. Икенсенән, фән донъяһында кемдәндер башланғыстарын дауам итеү - мотлаҡ уның етәкселегендә генә диссертация яҡлауға һис кенә лә бәйләнмәгән. Үкенеслеһе шул: хатта академик Ғайса Хөсәйеновтың әҙәбиәт ғилеменең һәммә тармағында ла уның һымаҡ уҡ ҡолас ташлап иркен йөҙгән энциклопедик ҡарашлы уҡыусыһы күренмәй...

Ә шулай ҙа... Булғанының ҡәҙерен белеп, әҙәбиәт донъяһында ең һыҙғанып эшләргә дәрте-теләге ташып торғандарҙы мәләндә күтәрмәләргә, уйфекерҙәребеҙ менән уртаҡлашып торорға кәрәк беҙгә. Әҙәбиәтебеҙ, телебеҙ, рухиәтебеҙ тип, ихлас янып йәшәһәк, үрҙә әйтелгәнсә, халҡыбыҙға торошло булырбыҙ.

ИНТЕРНЕТТАН



# АҠЫЛЛЫ...

## бәхетлеме?

■ Ғалимдар раҫлауынса, уңыштың 20 проценты ғына кешенең аҡылынан тора. IQ термины менән бер рәттән хәҙер EQ - эмоциональ интеллект тигән термин барлыҡҡа килде. Бына фекерләү һәләтенең тап ошо төрө беҙҙең уңышлы булыу-булмауыбыҙға яуаплы икән. Һүҙ кешенең үҙ хис-тойғолары менән идара итеү, позитив була һәм маҡсаттар ҡуя белеү һәләте тураһында. Тимәк, логик фекерләй алыу һәм белем булыу ғына кешегә уңыш алып килмәй. Эмоциональ интеллект түбән булһа, психосоматик ауырыуҙар барлыҡҡа килеү хәүефе арта.

■ Баланың кәйефе, эмоциональ интеллект кимәле, шулай уҡ өлкән тормоштағы уңышлылығы унын рационынан тора, тип иҫәпләй ғалимдар. Баланың туҡланыу ғәҙәте 6-10 йәштәрҙә формалаша. Үкенескә күрә, улар был мәлдә чипсы, шоколад кеүек "дөрөҫ" булмаған ризыҡты күпләп ашай. Рәсәйҙә бөтөн сирҙәрҙең 50 проценты дөрөҫ туҡланмауҙан килә, тип иҫәпләй табиптар. Педиаторҙар шуға ла бәләкәйҙән баланың нимә ашауына иғтибар итергә кәңәш итә. Иң "дөрөҫ" продукттар исемлегендә тәүге урында һөт ризыҡтары тора икән. "Ғәҙәти генә майһыҙландырылған йогурт та көндәлек кальций нормаһын тулыландыра, әммә быны ата-әсәләрҙең күбеһе белмәй ҙә", - ти педагог-методолог Наталья Чалая.

■ Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына килтереүсе төп сәбәптәрҙең береһе булып юғары холестерин тора. Етмәһә, бөгөн был ауырыуҙар йәшәрә һәм 52 процент осраҡта ваҡытынан алда үлемгә йәки инвалидлыҡҡа килтерә. Статистика буйынса, 30-50 йәштәге ир-егеттәрҙең холестерин кимәле күпкә юғарыраҡ, был инде миокард инфарктына тура юл. Майлы кислоталар организмда барлыҡҡа килмәй, шуға ла дөрөҫ туҡланыу кәрәк. Аҡ майҙа, иттең майында булған ауыр майҙар организмға файҙа килтермәй.

■ Баланың интеллект кимәлен билдәләйәсәк гендар уға әсә кешенән күсә, ти ғалимдар. Сөнки был гендар Х-хромосома менән бәйле. Был осраҡта иһә "ҡулайлаша белгән гендар" тураһында һүҙ бара, улар балаға әсәнән күсһә - эшләйҙәр, ә атанан күсһә, баҫылып ҡалалар. Шулай ҙа атайҙарҙың гены фекерләй белеү ҡеүәһенә йоғонто яһамай, тип уйлау хата, ти профессор Дженнифек Дельгадо. Улар баш мейеһенең хис-тойғолар һәм инстинкт, шулай уҡ асығыу тойғоһо, агрессия өсөн яуап биргән өлөшөндә туплана. Әсәйҙән күскән күҙәнәктәр мейенең фекерләү, ҡабул итеү, хәтер, телмәр өсөн яуап биргән өлөшөндә йыйыла. Тик бөтөн нәмә лә гендар менән бәйле түгел икән. Бынан бер нисә йыл элек Миннесота штаты эксперттары асыҡлауынса, үҙенең әсәһенә ныҡ яҡын булһа, 2 йәшендә үк ҡатмарлы абстракт уйындар уйнай башлай ала, ныҡышмалыраҡ була, проблемалар килеп тыуғанда артыҡ бошоноп бармай. Вашингтон тикшеренеүселәре раҫлауынса, әсәһенең иғтибарын һәм яҡлауын тойған балаларҙың гиппокамп күләме ҙурыраҡ була. Баш мейеһенең был өлөшө белем алыуға, уны хәтерҙә ҡалдырыуға яуап бирә.

ҒИБРӘТ ӨСӨН

**Суфыйҙар тураһындағы бер әсбапта яҙылған был ғибрәтле хәл. Борон-борон заманда бер аҡыл эйәһе йәшәгән. Үҙенең шәкерте менән донъя гиҙергә яратҡан был. Бер ауыл аша үтеп барғанда урам уртаһында бесәй балаһы менән уйнап ултырған баланы күреп ҡала былар. Аҡыл эйәһе малай янында туҡтап, байтаҡ ҡына ваҡыт унын уйнағанын күҙәтеп тора ла, ҡапыл ғына уға таяғы менән деңгәҙәтә һуғып ебәрә. Малай шунда уҡ йән бирә. Шәкерте йәне әрнеп ҡарттан был ҡылығына аңлатма биреүен һорай. Ҡарт шулай ти: "Аллаһы Тәғәләнән мин был малайҙың үҫкәс ҙур залимға әйләнәсәге һәм бик күп кешеләрҙең ғүмерен ҡорбан итәсәге тураһында хәбәр алдым. Уны үлтереп, мин миллиондарса ғәйепһеҙ ғүмерҙәрҙе ҡотҡарҙым" ,- ти.**
**Был риүәйәт һәр кемде уйландырырлыҡ. Сабый йәнен ҡыйыуҙан да хәтәрерәк ғәмәл юҡ, тип тетрәнәсәк күптәр. Икенсе яҡтан ҡараһаң... Әлеге аҡыл эйәһенең бәләкәй Наполеон, Гитлер, Бен Ладен, Чикатило һәм башҡа вәхшиҙәргә юлыҡмауы үкендереп тә ҡуя.**

# ВӘХШИҘӘР ҒАИЛӘЛӘ ТӘРБИӘЛӘНӘ

### Наполеон



Психологтар фекеренсә, баланың ниндәй булып үҫәсәген кескәй сағынан уҡ белеп була. Залимлыҡ та бала саҡтан башлана. Бына, мәҫәлән, Наполеон Бонапарт имсәк имгән саҡтан үҙ һүҙле, илаҡ булған. Унын илаҡлығы шул тиклем өйҙәгеләрҙең мaҙаһына тейгән, уны хатта йыш ҡына яңғыҙын бер бүлмәгә бикләп ҡуйыр булғандар. Үҙ һүҙлелеге, ҡыҙыу ҡанлылығы, кирелеге үҫә төшкән һайын арта ғына барған. Биш йәшендә ул үҙенән өлкәнерәктәргә ҡаршы тора, ҡаршы һуғыша башлаған. Бер саҡ хатта уҡытыусыһының бармағын тешләп өҙә яҙған. Ниҙер оҡшамаһа, тамағы ҡарлыҡҡансы ҡысҡырып, ярһып, хәлдән тайыр булған. Яза бирһәләр иһә, иламаған, ауыртыуға ла түҙгән. Кемдәндер ғәфү үтенеү тигәнде бөтөнләй белмәгән ул.

Ун йәшендә Наполеонды Францияға хәрби училищеға уҡырға ебәрәләр. Бында уны тағы ла ҙурыраҡ һынауҙар көтә. Йәштәштәре унын йәмһеҙлегенән, ҡыҫҡа буйынан, ҙур башынан, ярлы булыуынан, акцентынан, хатта исеменән көләр булған. Биш йыл уҡыу дәүерендә ул иптәштәре хәтерендә һуғыш суҡмары булараҡ ҡына тороп ҡала, яҡын дуҫтары ла булмай. Уҡытыусылары иһә уны "Аңра хайуан" тип йөрөтә. Уға бирелгән характеристикала шундай юлдар бар:" Иҫ киткес тәкәббер, дан яратыусы, тупаҫ, энергиялы, көйһөҙ, уйламайынса теләһә ниндәй аҙымға бара ала, уңайы тура килһә, ҙур дан ҡаҙанырға ла мөмкин..."

Шарттар, ысынлап та, уңайлы булып сыҡҡан...

### Сталин



Сталиндың атаһы йәшләй донъя ҡуйған. Иҫән сағында атаһы берҙән-бер улын аяуһыҙ туҡмай торған булған. 7 йәш булғанда атаһынан туҡмалып, Иосиф ҡулын һындыра. Ауыртыныуҙарына түҙә алмай, үкһеп-үкһеп илаған баланы йыуатыусы ла булмай хатта. Ҡулындағы яраһы шешеп, саҡ-саҡ үлмәй ҡала малай. Ошо хәлдән һуң ҡулы бер нисә сантиметрға ҡыҫҡарып ҡала унын. Улы сирләп ятҡанда ла туҡмауҙан туҡтамай атаһы. Улының күҙ алдында әсәһен дә туҡмап ырғыта. Психологтар тап бына ошондай вәхшилек Сталинға рәхимһеҙлек һабаҡтары биргән, тип иҫәпләй.

Дуҫтары ла Иосифты төрлөсә мыҫҡыллай, унын зәғифлегенән көлә. Туҡмалыуҙар, мыҫҡылланыуҙар мәңгелеккә күңеленә уйылып ҡала Иосифтың. Миллионлаған кешене үлемгә хөкөм иткәндә ул атаһынан үс алғандай рәхәтлек тойғолары кисерә. Бала саҡтағы ауыртыу ғүмер буйы кешенең хәтеренән сыҡмай шул. Кес кенә Иосифтың күҙ йәштәре, ауыртыныуҙары өсөн миллиондарса ғәйепһеҙ кешеләрҙең йәне ҡыйыла.

### Фюрер



XX быуаттың иң ҡанәскес йәлләде Адольф Гитлер ҙа бала сағында бик бәхетһеҙ булған. Яуыз атаһы, тышҡы ҡиәфәтенең йәмһеҙлеге, йәштәштәре тарафынан кәмһетелеүҙәре, нескә күңеле уны шундай шәфҡәтһеҙ йыртҡыс итеп үҫтерә. Адольф динде күрә алмай. Әсәһе сиркәүгә алып барһа, әлеге сиркәүҙең ҡала менән бергә шартлап, күккә осоуын теләй. Бөтөн залимдар кеүек, Гитлер ҙа бик шыҡһыҙ ҡиәфәтле була. Психологтар раҫлауынса, үҙенден ҡиәфәтенән ҡәнәғәт булмау тойғоһо - кешелекһеҙлеккә илтеүсе тура юл ул.

### Заман Гитлеры

Краснодар Гитлеры Александр Мовин эше бөтә Рәсәйҙе тетрәндерҙе. Йәш йыртҡыс, баҡсаһында крематорий яһап, үҙенең дуҫтарын, һөйәркәләрен, күршеләрен терелэй яндырған. Мовин менән һөйләшкән психологтар шундай һығымта яһаған: таныштарын үлтереп, Александр инстинктив рәүештә кешеләрҙән үҙенең бәхетһеҙ бала сағы - алкоголик атаһы, хәйерселек, тиңдәштәренең мәсхәрәләүе өсөн үс алған. Әгәр кешене бала сағында яратмаһалар, наҙламаһалар, ҡыйырһытһалар, бер ҡасан да йәлләмәһәләр, ул яуыз, рәхимһеҙ булып үҫә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, залимдарҙы тәрбиә тыуҙыра. Балаларыбыҙ кеше үлтереүсе, ҡараҡ йәки залим булып үҫмәһен өсөн уларҙы яратырға кәрәк. Бер-береһенә хөрмәт менән ҡараған ата-әсәй янында бер ваҡытта ла залимдар, вәхшиҙәр үҫмәйәсәк.**

**Шунын өсөн, "икеле" алып ҡайтҡан улығыҙҙың яңағына ебәрер алдынан йөҙ тапҡыр уйлағыҙ. Бала бер ниҙе лә онотмай. Теләһә ниндәй кәмһетелеүҙәрҙе лә ул ғүмер буйына хәтерендә һаҡлай. Барлыҡ әҙәм аҡтығы, енәйәтселәрҙе бала саҡтарында кәмһеткәндәр. Залимдар золом шарттарында тәрбиәләнә. Герострат менән Нерондан башлап, Саддам Хөсәйен менән Осама Бен Ладен миҫалы ла шуны дәлилләй.**

**Суфыйҙарҙың тағы бер хикәйәтен иҫкә төшөрәйек. Бер аҡыл эйәһе эргәһенә бер ҡарт килә һәм уға: "Мин ғүмерем буйы ғибәҙәт ҡылдым һәм кешеләргә изгелек эшләнем. Ожмахҡа эләгерменме икән?" - тип һорау бирә. "Юҡ, эләкмәйәсәкһең", - ти аҡыл эйәһе. "Ни өсөн? - ти икән ҡарт. - Мин тормошомдо Аллаһҡа бағышланым. Ғибәҙәт ҡылыу тураһында ғына уйлап, хатта улымды ашатырға онота инем". "Нәҡ быны шунын өсөн дә, йәғни улыңды тәрбиәләргә онотоуың өсөн дә һин тамуҡҡа эләгәсәкһең", - ти аҡыл эйәһе. Фәһеме аңлашыла торғандыр.**

ӘЙТЕМСӘЛӘР

# ҺАУЛЫҠ - ҘУР БАЙЛЫҠ

### Рух сәләмәтлеге



Тынғыһыҙ замандарҙа тынғыһыҙ кеше генә уңышҡа ирешә ала, тиҙәр.

Ә психологтар тыныс кеше тынырaҡ эшләгәндә эш уңышлыраҡ сыға, ти.

Тынғыһыҙҙың ғүмере ҡыҫҡараҡ, тыныстыҡы оҙонораҡ булыр, ти улар.

Ашыҡҡан ашҡа бешер, ашыҡмаған эшен бөтөрөр, тигәндәре, бәлки, шулдыр.

* * *

Ығы-зығы, ашығыу, тынғыһыҙлыҡ кеше һаулығын ҡаҡшата шул.
Тыныстар, вайымһыҙыраҡтар, эшкә һәлмәктәр оҙон ғүмерлерәк.
Оҙон ғүмер һөрөп, шып-шым йәшәп, тып-тын донъя ҡуйыуҙан ни мәғәнә?

* * *

Йогтарҙың хатха-йогу тигән бер күнекмәләре бар.

Улар шунын менән билдәле бер ваҡытта ота, уны ниндәйҙер бер файҙаға тота. Отоуҙан отоу ярала.

Рухы һауҙың - тәне һау.

Кешенең һаулығы һәм һауығыуы иң беренсе сиратта рух һаулығынан һәм рухты һауыҡтырыуҙан башланыр.

Рухы һау йән һәм тән ауырыуҙарын да еңелерәк еңер.

Рух һаулығы тән һаулығын һаҡлашыр.

Ҡарамаҡта былар ниндәй ябай, әммә тәрән мәғәнәле төшөнсәләр.

Төшөнсәләр генәме ни - һау йәшәү ҡануны, һаулыҡ кодексы улар.

Шуларҙы ысынлап тороп аңлай һәм тормошта гел тота алһаҡ, барыбыҙ ҙа һап-һау булыр инек бит.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИКЕ ИҢЕБЕҘҘӘ...

## ике фәрештә



**Фәрештәләрҙе Аллаһы Тәғәлә барлыҡҡа килтергән. Нәфис нурҙан торған тәндәре төрлө ҡиәфәткә инә ала һәм улар иҫ киткес ҙур ҡеүәткә эйәләр. Фәрештәләр шул тиклем күп, уларҙың һанын тик Аллаһ ҡына белә. Ғәйшә һүҙҙәренә ҡарағанда, Бәйғәмбәребеҙ былай тип әйткән: "Фәрештәләр нурҙан, ендәр уттан барлыҡҡа килгән".**

Ҡөрьәндә фәрештәләр тураһында текстар бик күп. Фәрештәләр бик ҙур тәнгә эйә. Бәйғәмбәребеҙ Ябраил фәрештәне бына нисек һүрәтләй: "Серле зат Ябраил булып сыҡты. Мин уны ни бары ике тапҡыр ғына күрҙем. Бер тапҡыр уның һауанан төшөп килгәнен шәйләнем: фәрештәнең кәүҙәһе шул тиклем ҙур, хатта ер менән күк араһындағы арауыҡ уның тәне менән ҡаплана ине". Имам Әхмәт түбәндәге хәҙисте әйтеп ҡалдырған: "Бәйғәмбәребеҙ Ябраил фәрештәне уның ысын ҡиәфәтендә күргән. Уның алты йөҙ ҡанаты тотош донъяны ҡаплай һәм һәр бер ҡанатынан Аллаһҡа ғына билдәле булған алтын-көмөш, гәүһәр-яҡут, аҡыҡ таш һибелә". Әбү Дауыттың хәҙисендә Бәйғәмбәребеҙҙең һүҙҙәре тасуирлана: "Миңә фәрештәләрҙең береһе тураһында һөйләргә мөмкинлек бирелде. Уның ҡолағы менән яурындары араһында ете йөҙ йыллыҡ ара бар".

Фәрештәләр бер-береһенән ҡиәфәте менән айырыла: береһенең ике, икенсеһенең дүрт, өсөнсөһөнөң алты йөҙ ҡанаты бар. Йәғни, улар төрлөһө төрлө баҫҡыста тора. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Ике, өс, дүрт ҡанатлы фәрештәләрҙе тыуҙырған, Һауаны һәм Ерҙе яратыусы Аллаһыбыҙға оло маҡтау булһын!"

Фәрештәләр иҫ киткес матур. Ябраил тураһында һөйләгәндә, Бәйғәмбәребеҙ бына нимә ти: "Ул ҙур кәүҙәле генә түгел, уның йөҙө лә иҫ китерлек матур". Йософто күреп, ҡулдарын телеп бөткән ҡатындар тураһында бәйән иткәндә, Бәйғәмбәребеҙ бына нимә тигән: "Йософто күреп ҡалған ҡатындар ҡулдарын телеп бөттөләр һәм "Был бит кеше түгел, фәрештә", тип әйттеләр". Фәрештәләрҙең матур йөҙлө булыуына инанған ҡатындар сағыштырыу өсөн башҡа һүҙ тапмаған, күрәһең. Улар иҫ киткес изге күңелле һәм ярҙамсыл. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Һеҙҙең өҫтә һаҡлаусылар - саф күңелле яҙып ултырыусылар бар".

Фәрештәләрҙең йәнә бер сифаты - оялсанлыҡ. Бәйғәмбәребеҙ бына нимә тип әйткән: "Фәрештәләр оялған кешенән мин нисек оялмайым инде". Белем дә фәрештәләрҙең ыңғай сифаттарына инә. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Мин һеҙҙең нимә белмәгәнегеҙҙе беләм". Ул фәрештәләрҙең белемгә эйә булыуҙарын инҡар итмәй, әммә уларға билдәле булмаған мәғлүмәткә эйә булыуы хаҡында белдерә.

Аллаһы Тәғәлә фәрештәләргә ендәрҙә һәм кешеләрҙә булмаған сифаттар бирә. Улар тураһында тағы ла нимә билдәле һуң? Фәрештәләр күктә йәшәй һәм улар Аллаһтың әмерен үтәр өсөн генә ергә төшә. Аллаһ әйткән: "Ул үҙенең ҡушыуы буйынса ҡолдарына фәрештәләр ебәрә ала". Әбү Хөрәйрә Бәйғәмбәребеҙҙең һүҙҙәрен бына нисек еткерә: "Көндөҙгө һәм төнгө фәрештәләр бер-береһен алмаштырып, ергә төшә һәм бергә таңғы һәм төштән һуңғы намаҙға йыйыла". Төндө кешеләр менән ерҙә бергә үткәргән фәрештәләр күккә кире әйләнеп ҡайтҡас, Аллаһы Тәғәләнең: "Минең ҡолдарым һеҙ киткәндә нимә эшләп ҡалды?"- тигән һорауына фәрештәләр бына нимә тип яуап бирә: "Беҙ киткәндә улар намаҙ ҡылып ҡалғайны. Беҙ килгәндә лә улар намаҙ уҡый ине".

Фәрештәләр араһында ҡатын-ҡыҙ енеслеләр юҡ. Бәйғәмбәребеҙ фәрештәләрҙе ҡатын-ҡыҙ затынан тип һанаған кешеләрҙе шелтәләп, былай тип әйткән: "Ҡайһы берәүҙәр фәрештәләрҙе ҡатын-ҡыҙҙар енесенән, тип уйлай. Улар фәрештәләрҙе барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашманы". "Кем дә кем һуңғы ғүмергә ышанмай, шулар фәрештәләрҙе ҡатын-ҡыҙ тип атай".

Фәрештәләрҙең йәнә бер сифаты - улар бер ҡасан да гонаһ ҡылмай һәм Хоҙайға ҡаршы килмәй: "Фәрештәләр Аллаһҡа ҡаршы килмәй һәм ул нимә ҡуша, барыһын да үтәй"; "Фәрештәләр бер ҡасан да Аллаһтың һүҙен бүлмәй һәм уның ҡушыуы буйынса ғына йәшәй". Фәрештәләр Аллаһҡа табыныуҙан һәм уны маҡтауҙан арымай. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Фәрештәләр Аллаһты көнө-төнө маҡтай һәм тамсы ла арымай". Шулай итеп, фәрештәләр кешеләрҙән һәм ендәрҙән үҙҙәренең барлыҡҡа килеүе һәм тәбиғәте менән ҡырҡа айырыла. Кешеләргә һәм ендәргә килгәндә инде, уларҙың да бер-береһен айырған үҙенсәлектәре бар. Бының тураһында Аллаһтың үҙенә генә билдәле.

Фәрештәләргә ышаныу - Ислам диненә ышаныуҙың бер терәге. Кеше фәрештәләрҙең барлығына ышанмай тороп, Аллаһҡа ышанам, тип әйтә алмай. Аллаһ әйткән: "Бәйғәмбәребеҙ һәм динлеләр Аллаһҡа ышандылар һәм Аллаһ тарафынан ебәрелгән бар нәмәне ҡабул ҡылдылар. Уларҙың барыһы ла Аллаһҡа, Уның фәрештәләренә, Уның бәйғәмбәрҙәренә ышанды". Шулай итеп, фәрештәләргә ышаныу - Бәйғәмбәребеҙгә ебәрелгән хәҡиҡәттең өлөшө ул. Аллаһ Бәйғәмбәргә һәм динлеләргә фәрештәләргә ышанырға әмер биргән һәм улар уны бер ҡаршылыҡһыҙ үтәгән.

Ысын мосолман кешеһенә фәрештәләргә ышаныу фарыз. Уларҙың барлығына ысын күңелдән ышынырға кәрәк. Фәрештәләргә ышанмай тороп, Ислам диненә тоғро булыу мөмкин түгел.

● Фәрештәләр күп һәм уларҙың һаны тик Аллаһҡа ғына билдәле. Быны түбәндәге аят та дәлилләй: "Ярҙамсыларының һанын ул Үҙе генә белә".

● Уларҙың юғары урынын һәм бурысын һанлау һәм белеү мөһим. "Фәрештәләр Аллаһтың һүҙен бүлдермәй тыңлай һәм һәр әмерен үтәй".

● Фәрештәләрҙең Аллаһ ҡаршыһында төрлө урын алып тороуын белергә кәрәк.

● Фәрештәләрҙе яратырға һәм уларға ҡарата дошманлыҡтан һаҡланырға кәрәк.

● Фәрештәләрҙе Аллаһы Тәғәлә яратҡан һәм улар нимәне булһа ла барлыҡҡа килтерә, яҙмыштарҙы үҙгәртә, йәшәйешкә йоғонто яһай алмай. Улар тик Аллаһтың әмерен үтәүселәр генә.

Фәрештәләргә табынырға ярамай, сөнки тик Аллаһҡа ғына табынырға мөмкин. Улар Аллаһ тарафынан төркөмдәргә бүленгән:

● Ябраил фәрештә - ул башҡа фәрештәләргә ҡарағанда күпкә өҫтөнөрәк. Аллаһ үҙе Ябраил фәрештәнең көсөн, ышаныслығын, һәләтен билдәләгән.

● Микаил фәрештә - уның исеме Аллаһы Тәғәлә тарафынан Ябраил фәрештәнең исеме менән бер ҡатар телгә алына.

● Исрафил фәрештә - иң яҡшы фәрештәләрҙең өсөнсөһө һанала. Төнгө намаҙ ваҡытында Бәйғәмбәребеҙ шулай тип әйткән: "О, Аллаһы Тәғәлә, Ябраилдың, Микаилдың һәм Исрафилдың Аллаһы..."

● Үлем фәрештәһе - уға Хоҙай бәндәләренең йәндәрен алыу ҡушылған. Был фәрештәнең ярҙамсылары килә: яҡшыларға - матур, насарҙарға - ҡот осҡос ҡиәфәттә.

● Тауҙар фәрештәһе - улар тауҙар менән идара итә.

● Әсә ҡарынын күҙәтеүсе фәрештәләр - улар әсә ҡарынында үҫкән сабыйҙың үҫешен теркәп бара.

● Тәхетте йөрөтөүсе фәрештәләр - улар ҙа иң яҡшы фәрештәләр булып һанала.

● Ожмах һаҡсылары. Аллаһы Тәғәлә әйткән: "Кем Аллаһтан ҡурҡып йәшәгән, шуларҙы Ожмахҡа оҙатасаҡтар. Улар Ожмах ҡапҡалары янына барып еткәс, һаҡсылар бына нимә тип әйтәсәк: "Тыныслыҡ һеҙгә! Һеҙ һәйбәт булдығыҙ. Ожмахта мәңге йәшәгеҙ!".

● Тамуҡ һаҡсылары - улар 12 фәрештәнән тора.

● Тулған йорт фәрештәләре - көн һайын был йортҡа 70 мең фәрештә инә һәм башҡа унда бер ҡасан да әйләнеп ҡайтмай.

● Сәйәхәт итеүсе фәрештәләр - улар Аллаһты иҫкә алыусыларҙы эҙләй. Аллаһты телгә алыусылар табылһа, был фәрештәләр шундуҡ бер-береһен саҡырырға тотона. Бындай кешеләрҙе ҡанаттары менән ҡамап алып, иң яҡын һауа ҡатламына тиклем күтәреләләр.

● Яҙып алыусылар - был фәрештәләр бәндәләрҙең һәр бер ҡылығын теркәп барырға бурыслы.

● Мөнкир һәм Нәнкир - ошо фәрештәләр мәрхүм булып ерләнгән кешеләрҙән һорау ала.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Тыңлай белеү - сифатлы аралашыу ул

Беҙ тормошобоҙҙоң билдәле бер өлөшөн уҡырға, яҙырға һәм һөйләшергә өйрәнеү өсөн сарыф итәбеҙ, ә бер минутыбыҙҙы ла тыңларға өйрәнеү өсөн файҙаланмайбыҙ. Күптәребеҙ һөйләп ҡалырға тырыша, әгәр иҫе китеп тыңлаған аудитория тапмай икән, ныҡ күңеле ҡайта. "Ни өсөн мине тыңламайһың?", "Ниңә минең һүҙҙәремә тамсы ла иғтибар итмәйһең?" тип аптырай. Үҙегеҙгә отчет бирәһегеҙме, юҡмы, әммә тыңлай белеү һәләте һөйләй белеүгә ҡарағанда тирә-яҡтағыларға нығыраҡ тәьҫир итә. Донъяға яҡшы тыңлаусылар етмәй. Кешенең мин-минлегенә бер нәмә лә битарафлыҡ кеүек ауыр йоғонто яһамай. Әммә тыңлай белеү бер нәмә лә өндәшмәү тигәнде аңлатмай. Күңелһеҙләнеү, тынысһыҙланыу, әңгәмәсенең һүҙҙәре менән килешмәү, уның фекерен асыҡтан-асыҡ һанға һуҡмау - былар барыһы ла коммуникация сифатының түбәнәйеүенә килтерә. Бындай мөнәсәбәт булғанда әңгәмәсегеҙ үҙен ситләтелгән итеп тоясаҡ. Үҙ алдына ул: "Миңә мөһим нәмә әйтергә кәрәк. Мине тыңлауҙары кәрәк", - тип ҡабатлай. Һәм уны тыңлаясаҡтар, һеҙ түгел икән, икенсе берәү! Ул тирә-яҡтағыларҙы үҙен тыңлырға мәжбүр итеү өсөн бөтөн нәмәгә барасаҡ. Бала илай башлаясаҡ, нимәнелер ватасаҡ, һеңлеһен йәки ҡустыһын илатасаҡ. Уҡыусы дәресен ҡалдырасаҡ йәки мәктәпкә йөрөүҙән баш тартасаҡ. Ир йәки ҡатын "өндәшмәү көрәшен" иғлан итәсәк йәки өйҙән сығып китәсәк. Хеҙмәткәр бер туҡтауһыҙ мыжыясаҡ һәм ризаһыҙлыҡ белдерәсәк. Һәр кем тирә-яҡтағыларҙы үҙен тыңларға мәжбүр итеү өсөн ысулдар эҙләйәсәк.

Кешеләр күпселек осраҡта аралашмай, ә бары тик сират буйынса һөйләй! Күптәр, әгәр мәжбүр итмәһәләр, бөтөнләй тыңламаҫтар ҙа ине. Бына бында төп проблема йәшеренгән дә инде. Бик аҙҙар ғына башҡаларҙы ихлас тыңларға йәки тыңлау һәләтен камиллаштырырға әҙер. Был тезисты урындағы колледжда ике курс алып барырға тәҡдим ителгәс, ғәмәлдә бер нисә йыл элек раҫланым. Уларҙың береһе - ораторлыҡ, икенсеһе тыңлау сәнғәтенә бағышланғайны. Хаҡлығымды раҫлар өсөн ризалаштым. Бер нисә көндән беренсе курс төркөмө теләүселәр менән тулды, хатта ике төркөм ойоштороорға тура килде. Ә икенсе төркөмгә бер генә кеше лә яҙылманы! Барыһы ла һөйләргә теләй, ләкин берәү ҙә тыңларға теләмәй. Уйлап ҡараһаң, һеҙ кемде нығыраҡ ихтирам итәһегеҙ? Кем һеҙҙе тыңларға әҙер, шуларҙымы? Бына ни өсөн психологтар һәм психиатрҙарҙың клиенттары һәр саҡ күп. Кешеләр, хатта аҡса түләп булһа ла, кемгә булһа ла хәбәр һөйләргә теләй. Яҡшы тыңлаусы булыр өсөн һеҙ быны теләргә тейешһегеҙ. Көн дауамында осрашҡан кешеләрҙең барыһына ла уларҙың һеҙҙең өсөн мөһим булыуын аңлау мөмкинлеге бирегеҙ. Әгәр һеҙҙең менән эре компания башлығы, билдәле сәйәсмән йәки телевидение йондоҙо һөйләшергә теләй икән, моғайын да һеҙ уларҙың һәр һүҙен йотлоғоп тыңларһығыҙ. Әгәр һеҙгә урам таҙартыусы, сүп түгеүсе, өй эштәрен башҡарыусы йәки һауыт-һаба йыуыусы мөрәжәғәт итһә, уларға иғтибар бүлерһегеҙме? Моғайын, юҡтыр! Ләкин әгәр ошо кешеләр булмаһа, һеҙгә кем кәрәклерәк булыр ине: йоғонтоло кешеләрме, әллә тормошоғоҙҙо уңайлыраҡ итеүселәрме? Бында нимә мөһим: бар кешеләр ҙә бер тиң һәм һеҙ, уларҙы тыңлап, быны аңларға тейешһегеҙ.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Кеше тормошо бер ҡап шырпы һымаҡ. Уға етди ҡараһаң - көлкө, етди ҡарамаһаң - ҡурҡыныс.*

*(А. Рюноскэ).*



МАТУР БУЛ!

# КҮНЕКМӘЛӘР, КҮНЕКМӘЛӘР...



**Ҡатын-ҡыҙ, ғәҙәттә, һәр ваҡыт ябығырға тырыша. Ябығырға, арҡалағы май ҡатламын бөтөрөргә теләүселәргә ошо ябай, әммә һөҙөмтәле күнегеүҙәр тәҡдим итәбеҙ.**

**◆ Ҡалаҡ һөйәген бер-береһенә яҡынайтырға һәм айырырға**

Бармаҡтарығыҙҙы арҡағыҙҙа "йоҙаҡҡа" бикләгеҙ ҙә, ҡалаҡ һөйәген яҡынайтырға тырышығыҙ, бер үк ваҡытта арҡағыҙҙы турайтып, күкрәгегеҙҙе кирегеҙ. Был күнегеү ябай ғына кеүек, әммә даими эшләгәндә бик һөҙөмтәле.

**◆ Ян-яҡҡа боролоу**

Был күнегеү арҡа мускулдарына көсөргәнеш бирә, бер үк ваҡытта ҡабырғаларҙа йыйылған май ҡатламына йоғонто яһай. Аяҡтарығыҙҙы ҡулбашығыҙ киңлегендә баҫығыҙ, ҡулбашығыҙҙы һәм ҡулдарығыҙҙы мөмкин тиклем артҡа ташлағыҙ, мускулдарҙы тарттырыу өсөн сайҡалыусы хәрәкәттәр яһағыҙ.

**◆ "Кәмә" күнегеүе**

Иҙәнгә ятығыҙ, ҡулдарығыҙҙы алғы һуҙып, уларҙы "йоҙаҡҡа" бикләгеҙ. Арҡағыҙҙы мөмкин тиклем көсөргәнеш төшөрөп, ҡулдарығыҙҙы һәм ҡулбаштарығыҙҙы күтәрегеҙ. Бер үк ваҡытта аяҡтарығыҙҙы тура ғына күтәрегеҙ, шул уҡ ваҡытта алға-артҡа ҡарай бәүелегеҙ.

**◆ Арҡаны бөгөү**

Арҡағыҙҙы "бесәй" кеүек дуғаландырығыҙ: дүрт тағанлап торған ыңғайы ҡулдарығыҙҙы мөмкин тиклем алға һуҙығыҙ, элекке хәлегеҙгә ҡайтығыҙ, эсегеҙҙе эскә тартығыҙ һәм арҡағыҙҙы ҡабат дуғаландырығыҙ. Икенсе вариант: дүрт тағанлап торғанда иҙәндән 30 см бейеклектә һуҙылған епте күҙаллап йәки ысын еп бәйләп, шуның аҫтынан сығығыҙ.

**◆ Ҡулдарҙы яҡынайтыу һәм айырыу**

Гантель, бик булмаһа, һыу йәки ҡом тултырылған пластик шешә ҡулланығыҙ. Тура баҫығыҙ, ҡулдарығыҙҙы күкрәк тураһынан алға һуҙығыҙ һәм уларҙы мөмкин тиклем айырығыҙ.

**◆ Стенаны "терәп" тороғоҙ**

Стенаға янбаштарығыҙ һәм ҡулбашығыҙ менән терәлеп тороғоҙ. Маҡсатығыҙ - стенаға арҡағыҙ менән тотош терәлеү. Һуңынан ошо тороштан, янбашығыҙҙы стенанан айырмай ғына, кәүҙәгеҙҙе бороғоҙ һәм уң ҡулығыҙ менән һул яҡ ҡулығыҙ яғындағы стенаға үрелегеҙ. Элекке торошҡа ҡайтып, икенсе ҡулығыҙ менән шундай уҡ хәрәкәтте ҡабатлағыҙ.

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ГЕРОЙ-ҠАЛАЛАР




Вәсилә ӘБДРӘХИМОВА төҙөнө.

**2-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Автономия. Рокоссовский. Ләйсән. Аҡлан. Милек. Ҡайнаға. Тымау. Анаконда. Гамма. Талалихин. Рампа. Матросов. Яры. Әпәй. Уҡа. Панфилов. Ассамблея. Алҡым. Саҡматаш. Бөжәк. Аҙаш. Гектар. Ҡаҙылма. Ғариза. Навага. Ҡомалаҡ. Ысул. Арабеска. Одеон. Юрматы. Рацион. Ҡобара. Тана.

**Вертикаль буйынса:** Яҙма. Ҡалҡыуыс. Жуков. Аммиак. Нәилә. Арҡа. Перл. Руль. Магний. Яҙмыш. Ыуылдырыҡ. Анонс. Арлан. Нектар. Ойоҡ. Юнга. Аҙым. Иғтибар. Март. Макулатура. Рейс. Напалм. Пафос. Абышҡа. Аҙна. Аласаҡ. Нахаҡ. Картуф. Мөштөм. Ихата. Сеул. Тоҫмал. Вигвам. Шандаҡ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# МӘСКӘҮГӘ - УҠЫРҒА!



**Мәскәүҙең Бәләкәй дәүләт академия театры ҡарамағындағы М.С. Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһы (институты) Башҡортостандың һәләтле йәштәрен йыя. Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, был маҡсатлы курс буласаҡ, тимәк, республика вәкилдәре бөтөнләй бушлай уҡый аласаҡ.**

Уҡырға барырға теләүселәр 15 февралгә тиклем 2017-2018 уҡыу йылдарында "Актёрлыҡ сәнғәте" программаһы буйынса "Драма театры һәм кино артисы" һөнәренә уҡыуға документтар тапшыра ала. Унда көндөҙгө бүлектә дүрт йыл дауамында уҡыйҙар. 14 маҡсатлы буш урындан тыш, абитуриенттар Д.Г. Кознов курсындағы тағы ла 4 түләүле урынға дәғүә итә ала. Урта (тулы) дөйөм, урта һөнәри йәки юғары белемле, башҡорт һәм рус телдәрен белгән Рәсәй граждандары ҡабул ителә. Өфөлә М.С. Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһы, Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы һәм республиканың театр ойошмалары вәкилдәре ҡатнашлығындағы комиссия һайлап алыу конкурсы уҙғара. Уны үткән абитуриенттарға ҡабул итеү имтихандарында ҡатнашырға рөхсәт ителә, тип хәбәр иттеләр ведомствоның матбуғат хеҙмәтендә.

Тулыраҡ мәғлүмәт менән Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының Мәғариф буйынса республика уҡытыу-методика үҙәге сайтының "Маҡсатлы белем алыу" бүлегендә һәм 235-78-16, 233-59-00 телефондары буйынса танышырға мөмкин.

# ҠУРАЙ БАЙРАМЫ



**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының Ҙур залында "Ҡурай байрамы. Ел тыуҙырған моң..." программаһы күрһәтелә. Был проект былтыр Рәсәйҙең 8 ҡалаһына - Ҡурған, Ырымбур, Ижевск, Пермь, Магниторск, Силәбе, Миәс, Мәскәүгә барып ҡайтты.**

Рәсәй ҡалалары халҡын хайран ҡалдырған тамаша хәҙер өфөләр иғтибарына тәҡдим ителә. Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Айытҡолов, Башҡортостандың халыҡ артисы Римма Амангилдина, халыҡ-ара конкурстар лауреаттары Марсель Ҡотоев, Аяз Нухов, Артур Ғайсаров, шулай уҡ "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө (художество етәксеһе Ринат Рамазанов) һәм Башҡортостандың Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры (художество етәксеһе һәм дирижер - Линар Дәүләтбаев) ҡатнашлығындағы концерт 2 февраль көнөнә тәғәйенләнгән. Программала башҡорт халыҡ көйҙәре, Башҡортостан композиторҙары, шул иҫәптән, Заһир Исмәғилев, Нур Дауытов, Илдар Хисаметдинов, Анатолий Кукубаев, Урал Иҙелбаевтың музыкаһы яңғыраясаҡ. Был үҙенсәлекле проектты Милли эштәр буйынса федераль агентлыҡ, Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, Башҡорт дәүләт филармонияһы тормошҡа ашыра.

✓ *2017 йылдың 1 ғинуарынан алып парковкала машина урыны күсемһеҙ милеккә тиңләштерелде. Законда машина урынын күсемһеҙ милек итеп иҫәпләргә була.*



*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# РУЛЬ АРТЫНДАҒЫЛАРҒА



● Быйылдан башлап автомобилдәр "ЭРА-ГЛОНАСС" (авария булғанда ашығыс хәбәр итеү) системаһы менән йыһазландырылырға тейеш. Система хеҙмәттәрҙең оператив хәл итеүе мәҡсатында ҡуйыла. "ГЛОНАСС" бәйләнеш-үҙәгенә юл-транспорт ваҡиғаһы тураһында мәғлүмәт 10 секунд эсендә килә. Автомобиль етештереүсе "ЭРА-ГЛОНАСС" системаһын ҡуймайынса "ОТТС" хуплауын алмаясаҡ. Сертификацияны үтеү өсөн завод краштест үткәрергә тейеш. Продукцияның ярашлы ҡиммәтләнеүен ҡулланыусыларға түләргә тура киләсәк. Хәҙер борт ҡорамалдары - тахограф һәм "ГЛОНАСС" терминалдары менән йөк ташыусы машиналар һәм пассажир автобустары йыһазландырыла. Бынан тыш, ҙур йөклө транспортта федераль юлдар буйынса йөрөгән өсөн хаҡ алыусы "Платон" система ҡоролмаһы булырға тейеш. Белгестәр бөтә автомобиль транспорттары өсөн берҙәм телематик сервис кәрәклеге хаҡында үҙ фекерен белдерҙе.

● 2017 йылдың 1 ғинуарынан алып парковкала машина урыны күсемһеҙ милеккә тиңләштерелде. Законда машина урынын күсемһеҙ милек итеп иҫәпләргә була, әгәр ул торған бина (төҙөлөш, ҡоролма өлөшө) кадастр тураһындағы закон менән ҡаралған тәртиптә яҙылһа. Машина урынының сиктәре ерҙә (иҙәндә) буяу йәки башҡа алымдар менән билдәләнеүе мөмкин. Закон парковка урынын ипотекаға алырға рөхсәт итә.

● 2017 йылдың 1 ғинуарынан алып теүәл ике йыл дауамында водителдәр бер төркөм дәүләт хеҙмәтенә - мәсәлән, водитель таныҡлығы, транспорт сараһы таныҡлығы, паспорты алыуға 30 процент ташламаға эйә булыуы бар. Шарты - хеҙмәткә электрон заказ биреү һәм шул уҡ исул менән түләү (берҙәм дәүләт хеҙмәттәре порталы йәки ҡулланыусыны берҙәм идентификациялау һәм аутенфикациялау системаһы менән бәйле төбәк порталдары аша). Әҙер документтарҙы Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы бирәсәк. 2017 йылға тиклем автоһәүәҫкәрҙәр ҡайһы бер дәүләт пошлиналарын ташлама менән электрон рәүештә түләй алды, әммә хеҙмәт һөҙөмтәһе лә виртуаль ғына бирелә ине. Шул уҡ ваҡытта, водитель таныҡлығын алмаштырыу хеҙмәте менән файҙаланыу мөмкинлеге булманы, сөнки электрон төрҙә ул юҡ ине. Хәҙер сикләү бөтөрөлә, документтарҙы теләк буйынса Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһында ҡағыҙҙа ла, һанлы форматта ла алырға мөмкин.

● 2017 йылда балаларҙың автомобиль кресолоарын ҡулланыу ҡағиҙәләре ҡәтғиләшә. 7 йәшкә тиклем балалар тик автомобиль креслоларында йөрөй, 7 йәштән 11-гә тиклем - хәүефһеҙлек ҡайыштарын эләктереп артҡы урында, әгәр ҙә улар автомобиль конструкцияһы менән ҡаралһа. Алғы яҡта - 12 йәшкә тиклем автомобиль креслоһында. Ҡағиҙә боҙған өсөн штраф - 3 мең һум. Бынан тыш, 7 йәше тулмаған баланы салонда ҡараүһыҙ ҡалдырған осраҡҡа 500 һум штраф ҡарала.

● Дәүләт Думаһы депутаттары автомобилде хәүефле йөрөткән өсөн язаны көсәйтергә ниәтләй. Дәүләт төҙәлешө һәм ҡануниәт буйынса комитет Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодексҡа юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен бер нисә тапҡыр боҙған водителдең таныtмаһын тартып алыу хаҡында төҙәтмәләр индерергә тәҡдим итәсәк. Был турала "Известия" гәзите комитет рәйесе урынбаҫарына һылтанып хәбәр итә. Хәүефле йөрөткәндә таныtманы тартып алыу тураһындағы ҡарарҙы ҡағиҙә боҙоуҙарҙы теркәгән камералар түгел, автоинспектор ҡабул итә. Бер нисә тапҡыр ҡағиҙә боҙған водителдәрҙең ике йылға таныtмаһынан мәхрүм ителеүе мөмкин, тип билдәләй комитет рәйесе урынбаҫары. Рәсәй Хөкүмәте хәүефле йөрөткән өсөн биш мең һум күләмендә административ штраф һалыуҙы билдәләгән закон проектын хупланы. Тейешле урындарҙа башҡа автомобилдәргә юл бирмәү, ҡапыл әкренәйеү, хәүефһеҙ дистанцияны тотмау, уҙыуға ҡаршылыҡ тыуҙырыу кеүек күренештәр машина менән хәүефле идара итеүгә ҡарай.

*ВИКТОРИНА*



## ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Был юлы Спартак Ильясовтың күптән түгел Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан "Бигылый" романы буйынса һорауҙар тәҡдим итәбеҙ:**

**1. Романдың төп геройы Биктимер үҙенең ҡаҫҡын булып йәшәргә мәжбүр булыуын ниндәй сәбәптәргә бәйләп аңлата?**
а) Аллаһы Тәғәләнең тап уларҙың нәҫелен ҙур һынауҙар алдында ҡуйыуына;
б) тыуған илдең уны яҡламауына;
в) ил менән идара итеүселәрҙең хаталы ҡарашына.

**2. Биктимер ҡапма-ҡаршы тороусы ҡайһы ғәскәргә әсирлеккә эләгә һәм унан ҡаса?**
а) дошман ғәскәренә;
б) үҙ ғәскәренә;
в) икеһенә лә.

**3. Ҡаҫҡын хәлендә көн күрергә мәжбүр булған совет һалдаты, автор фекеренсә, ниндәй сифаттарын юғалтмай?**
а) ватансылыҡ сифаттарын;
б) яугирлыҡ сифаттарын;
в) элекке сержант булараҡ, етәкселек сифаттарын.

**4. Биктимерҙең үҙенең берҙән-бер һәм ғүмерлек мөхәббәте менән осрашыуы ғүмеренең ҡайһы осоронa тура килә һәм ҡыҙ ниндәй милләт вәкиле була?**

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем беҙгә 246-03-24 номеры буйынса шылтыратып, ошо һорауҙарға дөрөҫ яуап әйтә, шул уҡыусыбыҙға Спартак Ильясов үҙенең "Бигылый" китабын бүләк итмәксе. Үткән уйын йомғаҡтары буйынса Ғәлим Хисамовтың автографы ҡуйылған "Өн һәм һан" китабын Өфө ҡалаһынан Эльмира Шакирова отто! Йәгеҙ, кем алыҡ?**

**Рубриканы Иҙел РӘХИМОВ алып бара.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Баймаҡ районы 1-се Әтҡол ауылында йәшәүсе әсәйебеҙ
**Хисмәтуллина Сәлимә Кизелхаҡ ҡыҙын**
**60 йәшлек** оло юбилейы менән ысын күңелдән ҡотлайбыҙ. Беҙгә йәшәү нуры биргәнең өсөн Хоҙай Тәғәләнең мең рәхмәте яуһын һиңә, әсәйебеҙ, ҡартәсәйебеҙ. Оҙон ғүмер, тән сихәте, һаулыҡ, күңелеңдәге йән йылыһының нуры һүнмәйенсә, беҙгә, балаларыңа, йәшәйеш сығанағы булып тороуыңды теләйбеҙ.

*Сәстәреңә, әсәй, сал керһә лә,*
*Һин бит беҙҙең йөрәк түрендә.*
*Оҙаҡ йәшә, әсәй, ауырымайса,*
*Һин бит был донъяла бер генә.*

**Иң изге теләктәр менән бөтә балаларың исеменән улың Артур һәм уның ғаиләһе.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 ғинуар "Ай тотолған төндә"** (М. Кәрим) 12+
**22 ғинуар "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама
**24 ғинуар "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл
**25 ғинуар "Йософ һәм Зөләйха"** (Ҡол Ғәли, Ю. Сафиуллин инсц.), музыкаль риүәйәт
**26 ғинуар "Антигона"** (Ж. Ануй), драма
**27 ғинуар "Хыялый"** (С. Әбүзәр), лирик комедия

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 ғинуар "Калигула"** (А. Камю), трагедия. Башлана 18.00 16+
**27 ғинуар "Ҡыҙ урлау йәки башкирская пленница"** (М. Кәрим), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**21 ғинуар "Носорог и жирафа"** (Х. Гюнтер). Башлана 12.00, 14.00 0+
**22 ғинуар "Сказка синего моря"** (Б. Заходер). Башлана 12.00, 14.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Ғинуар (Рабиғел ахыр - Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (25) дүшәмбе | 7:52 | 9:22 | 13:30 | 16:03 | 17:33 | 19:03 |
| 24 (26) шишәмбе | 7:51 | 9:21 | 13:30 | 16:05 | 17:35 | 19:05 |
| 25 (27) шаршамбы | 7:49 | 9:19 | 13:30 | 16:07 | 17:37 | 19:07 |
| 26 (28) кесе йома | 7:48 | 9:18 | 13:30 | 16:09 | 17:39 | 19:09 |
| 27 (29) йома | 7:46 | 9:16 | 13:30 | 16:11 | 17:41 | 19:11 |
| 28 (30) шәмбе | 7:44 | 9:14 | 13:30 | 16:13 | 17:43 | 19:13 |
| 29 (1) йәкшәмбе | 7:43 | 9:13 | 13:30 | 16:15 | 17:45 | 19:15 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*Асылда, бик һирәк ижадсы ойошторуосы һәләтенә эйәлер. Шунлыҡтан, ойошма эшен ойоштора алмаған етәкселәрҙе әрләү ҙә яҙыҡ булыр, яҙыша белеү етәкселек итеүҙе йәки етәкселек итә белеү яҙыусы була алыуҙы аңлатмай бит.*

ӘЙҘӘГЕҘ, ФЕКЕР АЛЫШАЙЫҠ!

# ЯҘЫУСЫ ӨСӨН...

## ижад мөһимме, әллә ойошма ағзаһы булыумы?




**"Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 2-се һанында Тимер Ниәтшин ағайҙың "Яҙыусы вазифаһы - ул рух һағындағы яугир" тип исемләнгән мәҡәләһен уҡып сығып, үҙ фекеремде әйтергә булдым.**

Автор телгә алған "әтәс" функцияһының тәғәйенләнешен, был ҡоштоң, йыл хужаһы булыуҙан тыш, мәҡәләгә бәйләнешен күрмәнем, әлбиттә. Әммә быныһы мөһим түгелдер. Ә нимә мөһим һуң? "Ойошма" мәғәнәһенә һалынған һәм ингән төшөнсәләрҙә нимә иң мөһиме? Ғөмүмән, ысын ижадсыға ойошма ниңә кәрәк? Быныһы минең уйланыуҙарым булды. Ә инде мәҡәләлә телгә алынған Яҙыусылар ойошмаһына килгәндә, минеңсә, бындай ойошманы үҫеш өҫтөндә булған, әүҙем ижад иткән йәки ижад итеүселәрҙең хеҙмәтен төплө анализлай алған кешеләр етәкләргә тейеш. Үҙе ижад итеүҙән, уҡыусы өсөн ҡыҙыҡ булыуҙан туҡтаған яҙыусылар (нисек кенә үкенесле булмаһын - хәҡиҡәт) "яҙыусы" япмаһы артында нимә генә башҡарып ҡарамаһын - үҙгәреш булмаясаҡ. Шунлыҡтан, мин (ойошма ағзаһы булмаһам да) бөгөн актуаль була алған ҡәләм тирбәтеүселәр яҡлы. Әлбиттә, ижад классикаға дәғүә итергә һәм мәңгелек булыуға ынтылырға тейеш. Әммә бында һүҙ ижадсылар эшен ойоштороусыны һайлау хаҡында бара бит. Асылда, бик һирәк ижадсы ойоштороусы һәләтенә эйәлер. Шунлыҡтан, ойошма эшен ойоштора алмаған етәкселәрҙе әрләү ҙә яҙыҡ булыр, яҙыша белеү етәкселек итеүҙе йәки етәкселек итә белеү яҙыусы була алыуҙы аңлатмай бит.

Ошо тәңгәлдә Зәки Әлибаев кандидатураһына ла туҡтап киткем килә (сөнки, ул мәҡәләлә телгә алына). Ул бөгөнгө башҡорт филологияһының иң нигеҙле ғалимдарының һәм башҡорт әҙәбиәтенең бармаҡ менән генә һанарлыҡ реаль тәнҡитселәренең береһе. Бөгөн яҙыусылар яңы әҫәр ижад итә лә, уны икенсе берәүҙәренән һыҙыра маҡтатып яҙҙырып һала. Һәм ошо әҫәргә күҙәтеү булып һанала. Үрҙә телгә алынған тәнҡитсе материалдарын һәр ваҡыт ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп барам, сөнки унда ысын тәнҡит, фәнни анализ бар. Тап ошо өлкәнең юҡҡа сығып барыуы арҡаһында ла бөгөн әҙәбиәттә көрсөк кисерәбеҙ түгелме һуң? Минең әлегә тиклем Яҙыусылар ойошмаһына ғариза тотоп барғаным булманы, әммә уны З. Әлибаев кеүек белемле, мәҙәниәтле, замандаштары хөрмәтен ҡаҙанған ғалим етәкләһә, шатланып барыр инем.

Оло быуын һәр саҡ йәштәрҙе кәмһетергә тырыша инде ул (барыһы ла түгел, әлбиттә). Нисек кенә яҡшы һәм һәйбәт булмаһын, берәү ҙә, бер нәмә лә мәңгелек түгел. Ә инде һинең ижадыңдың ни ғүмер йәшәүен бары тик һәләтең һәм уҡыусы (халыҡ) ғына хәл итә. Уға йөҙ китап та, ижад кисәләре лә, ойошма етәксеһе булыу ҙа, атаҡлы исемдәр ҙә йоғонто яһай алмай. Быларҙы тормош беҙгә иҫбатлай тора, беҙ аңламамышҡа һалышабыҙ. Сөнки яһалма дан, билдәлелек көҫәйбеҙ. Әҙәмдең нәфсе тигәнгә баш була алмауылыр инде был...

Ойошманың сираттағы ултырышы үтеп, ул тағы ла бер нәмә лә хәл итмәһә лә аптырамайым. Бында күптәрҙең тормошҡа ҡарашын һәм фекерләүен нигеҙҙән үҙгәртмәй тороп, артыҡ алға китеш булмаясаҡ. Ә, ғөмүмән, ижад иткән кешегә быларҙың барыһы ла мөһим дә түгел...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына Ғафури районы Һабай ауылынан Р. Басиров түбәндәге китаптарҙы тәҡдим итә:**




**35. Әхнәф Харисов "Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы".** Октябрь революцияһына тиклем башҡорттоң яҙма теле булмаған, грамоталылыҡ буйынса СССР-ҙа ҡырғыҙҙарҙан ҡала икенсе урында булған, уның хәҙерге яҙма теле Октябрь революцияһы емеше генә һәм башҡалар, тип мәктәп йәшенән үк ҡаныбыҙға һеңдерергә тырыштылар. Шул заманда Әхнәф Харисовтың "Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы" тигән китабы сығыуы бик күптәргә аяҙ көндә йәшен йәшнәгәндәй тәьҫир иткәндер. Китапта Ҡол Ғәлиҙән башлап бик күп яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың исемдәре, яҙған әҫәрҙәре урын алған. Башҡорт халҡының быуаттар төпкөлөнән үк булған яҙма хазиналары тураһындағы был хеҙмәт һәр быуын уҡырлыҡ.

**36. Рауил Бикбаев "Рәми" китабы.** 2007 йылда донъя күргән был китапты тыныс ҡына уҡыу мөмкин түгел. Бер ваҡыт авторҙың үҙен Өфөлә осратып, "Китабығыҙҙы уҡып сыҡтым, Рәми тураһында яҙылғандар ысын булһа, иҫең китәрлек бит", - тип уйымды белдергән инем. "Барыһы ла ул китапҡа һыйманы әле", - булды яуабы. Тормош һынауҙарына бирешмәй, Кеше булып ҡалған Рәмиебеҙ тураһында бөтәһенә лә уҡырға тәҡдим итәм.

**37. Әкрәм Бейеш "Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ көрәше".** 1993 йылда баҫылған китаптың милли аңыбыҙҙы үҫтереүҙә әһәмиәте баһалап бөтөргөһөҙ. Заманында "Йәшлек" гәзитендә өҙөк-өҙөк булып баҫылып та сыҡты ул.

**38. Рәшит Шәкүр "Сыңрау торналар иле".** Авторҙың был китабында башҡорт фольклоры тураһында ифрат бай материалдар тупланған. Мәҫәлән, Мөхәмәтша Буранғолов тураһында "Ныҡлыҡ билгеһе, бөйөклөк өлгөһө" тигән мәҡәләне уҡып, нахаҡҡа рәнйетелгән оло шәхесебеҙ ҡаһарманлығына һоҡланыу тойғоһон кисерәһең.

**39. Муса Мортазин "Әҫәрҙәр: Очерктар, повесть, документтар һәм фотолар".** Ҡурҡыу белмәҫ полководец, аҡыллы дәүләт эшмәкәре, тарихсы, яҙыусы ла булған милли геройыбыҙ халҡыбыҙҙың XX быуат Салауаты, тип ғорурланырлыҡ улы. Китапта М. Мортазиндың үҙенең һәм бик күп көрәштәштәренең фотолары бирелгән. 1994 йылда донъя күргән китап шул яғы менән дә бик мауыҡтырғыс.

Хөрмәтле гәзит уҡыусыларыбыҙ! **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы"** тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИР БУЛҒАН ИР...

## егерме биштә баш булыр

Торна менән дуҫ булһаң, башыңдан ҡайғы китмәҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Кеше тормошо бер ҡап шырпы һымаҡ. Уға етди ҡараһаң - көлкө, етди ҡарамаһаң - ҡурҡыныс.

**(А. Рюноскэ).**

Кеше тормошо тимер һымаҡ. Уны эшкә екһәң - ул туҙа, ҡулланмаһаң - тутыҡ баҫа.

**(Катон).**

Кеше тормошо ағын йылға һымаҡ: туҡтауһыҙ бер үк ағыш, әммә һәр саҡ таҙа һыу.

**(Г. Торо).**

Үлем менән йәшәү бер тиң хоҡуҡлы: улар бер береһенән башҡа йәшәй алмай.

**(А. Дальсем).**

Тормош ул - сәнсеүсе һәм ҡырҡыусы ҡоралдар менән тулы йәшник. Уларға ҡағылып, беҙ әленән әле ҡулдарыбыҙҙы ҡанатабыҙ...

**(Ж. Ренар).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер йәш үҫмер аҡыл эйәһе булған ҡарт эргәһенә килә һәм: "Әфәндем, һинең кеүек аҡыл эйәһе дәрәжәһенә етеү өсөн мин нимә эшләргә тейешмен?" - тип һорай. Аҡһаҡал уға яуап бирмәй. Үҫмер кире боролоп китә, ләкин иртәгәһенә шул уҡ һорау менән тағы килә. Был юлы ла аҡһаҡал уға бер ни тип тә яуап бирмәй. Үҫмер өсөнсө көнөнә лә килә һәм: "Әфәндем, һинең кеүек аҡыл эйәһе дәрәжәһенә етеү өсөн мин нимә эшләргә тейешмен?" - тигән һорауын ҡабатлай. Аҡһаҡал урынынан тора һәм үҫмергә үҙ артынан эйәрергә ишаралап, йылғаға табан йүнәлә. Килеп еткән ыңғайы һыу эсенә инеп китә, үҫмер ҙә уның артынан эйәрә. Муйын тәңгәленәсә тәрәнлеккә еткәс, аҡһаҡал үҫмерҙе башынан тотоп һыуға сумыра һәм уны, бар көсөнә тыпырсыныуына ҡарамаҫтан, тыны бөткәнсе сығармай тота. Үҫмер инде тонсоғам тигәндә һыу өҫтөнә килеп сыҡҡас, аҡһаҡал унан: "Шунан, улым, һыу аҫтында булғанда һин барыһынан бигерәк нимә теләнең?" - тип һорай. Үҫмер бер ниндәй икеләнеүһеҙ яуап бирә: "Һауа! Һауа! Бары тик һауа теләнем!" Аҡһаҡал: "Ә һин байлыҡ, власть, мөхәббәт тураһында уйламаның мыни?" - тип ныҡыша. "Юҡ, әфәндем, мин бары тик һауа тураһында ғына уйланым", - тип яуаплай үҫмер. "Ул саҡта һинең алдағы һорауыңа яуап шулай булыр: һин минең кеүек аҡыл эйәһе дәрәжәһенә күтәрелер өсөн аҡылды ла әле генә һауа көҫәгән көс менән көҫәргә, уны бөтөн башҡа маҡсаттарыңдан өҫтөн ҡуйырға тейешһең. Аҡыл туплауға шундай ныҡышмалыҡ менән ынтылһаң, һис шикһеҙ, аҡыл эйәһе буласаҡһың..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 20 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5007
Заказ - 103/01